ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 май (һабанай) 2021

№21 (959)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.*

***Мөхәрририәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Талайҙармы һине, ергенәм...**



2

**Йәштәребеҙгә ни булған,**

**йәки Ҡазандағы фажиғә тураһында**



3

**Беҙ генә балаларҙы түгел,**

**балалар ҙа беҙҙе тәрбиәләй икән дә...**



8-9

**Эшләмәгән эштәре юҡ!**



12-13

**ТВ-программа** 14

*АФАРИН!*

# КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ...

## беҙҙең майҙан булһын "Арт-Ҡоролтай"

**14 майҙа Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында Башҡортостан мәҙәниәте тормошона айырым бер дәүер башы булып инер "Арт-Ҡоролтай-2021" сараһы үтте. Башҡортостан мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова алып барған пленар ултырышта Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәй мәҙәниәт министры урынбаҫарҙары Ольга Казакова, Ольга Ярилова, Рәсәй Халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова, CIOFF президенты Филипп Боссан, Башҡортостандан сенатор Лилиә Ғүмәрова ҡатнашты. "Артабан ҡайҙа табан йүнәлеш алыу һәм мәҙәниәтебеҙ хаҡында фекер алышыу өсөн бөгөн беҙ йылына бер тапҡыр Башҡортостанда, тап Өфөлә, төрлө дәүләттәр һәм Рәсәй субъекттары вәкилдәре менән осрашыу йолаһына нигеҙ һалабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.**




*Фольклориадаға тиклем 50 көн ҡалыуын сағылдырған арт-объектта башҡорт милли костюмындағы Рус Матрешкаһы урын алды.*

Шулай итеп, беҙҙә өр-яңы башҡорт мәҙәниәте форумы асылды. Форумдың атамаһы бик уңышлы, ҡолаҡҡа ятышлы икәнен күптәр билдәләне. Ул һуңғы осорҙа йәнләнеп киткән мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡаҙаныштарын барлап, бөтә ил алдына теҙеп ҡуйҙы һәм бынан һуң да беҙ ошо яулаған үрҙәрҙе, алға алған маҡсаттарҙы дауам итергә тейешбеҙ, тигән төп лозунг менән һуғарылды.

Унын сиктәрендә ойошторолған бер нисә форсайт-сессияларҙа ҡатнашыусы белгестәр мәҙәни донъябыҙға һәр яҡлап байҡау-ҡараш ташланы. Улар бөтә Рәсәй һәм донъя кимәлендәге алдынғы эш пландары, яңы һәм элекке ысулдарҙы уңышлы файҙаланырға өйрәнеү тураһында фекер алышты. Был мәҙәни йыйын-форум бынан һуң йыл һайын уҙғарыла торған ғәмәли майҙан, мәҙәниәт өлкәһендәге иң хәл иткес аҙымдарҙы, үҙгәреш-үҫеш тәртибен тотоусы ҡарарҙарҙы бергәләп ҡабул итеү һәм бойомға ашырыу юлдарын күрһәтеү үҙәге буласаҡ, тип билдәләнде. Унда профессиональ оҫталыҡ серҙәре, иң уңышлы практик асыштар һәм ижади эксперименттар иғтибар үҙәгенә ҡуйыласаҡ. Форум эшендә профессиональ спикерҙар, сәнғәт маһирҙары, хөкүмәт органдары вәкилдәре, дәүләт һәм йәмәғәт эше белгестәре һәм мәҙәни үҫеш менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләр ҡатнаша аласаҡ.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*МӨҺИМ МӘСЬӘЛӘ*

# ТУҒАН ТЕЛҺЕҘ КЕШЕ...

## тамырһыҙ ағас һымаҡ

**Республиканың мәғариф усаҡтарында белем биреү телен ирекле һайлау буйынса уҡыусыларҙың ата-әсәләренән (законлы вәкилдәрҙән) ғаризалар ҡабул ителә башланы. Ғөмүмән, беҙҙә дәүләт һәм туған телдәрҙе уҡытыу нисек ҡуйылған? Федераль дәүләт белем биреү стандарты төбәктәрҙә был йүнәлештә ниндәй мөмкинлектәр булдырған? Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры Айбулат Вәкил улы ХАЖИН менән әңгәмәбеҙҙә ошо һәм башҡа һорауҙарға асыҡлыҡ индерҙек.**



**Беренсе класҡа барасаҡ уҡыусыларҙың ата-әсәләре белем алыу телен һайлау хоҡуғы тураһында нимәләр белергә тейеш?**

- Рәсәй граждандары мәктәпкәсә йәштәге, дөйөм башланғыс һәм төп дөйөм кимәлдәге белемде туған телендә алыуға; Рәсәй халыҡтары телдәре араһынан туған телен, шул иҫәптән рус телен дә туған тел булараҡ өйрәнергә; Рәсәй Федерацияһы республикаһынын, беҙҙең осраҡта, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнергә хоҡуҡлы. Ата-әсәләр (законлы вәкилдәр) иң тәү сиратта бына ошо хоҡуҡтарға таянырға тейеш.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

✓ *Ғәҙелша шарлауығының түбәнендәге аҡлан тәртипһеҙ рәүештә аҡтарып сығылған. Ҡеүәтле техника эшләгән бында. Унда-бында тау-тау тупраҡ өйөмдәре. Һөрөлгән ерҙә иһә тош-тош урында соҡорҙар ҡаҙылған, улар бик күп.*



*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# ТӨРМӘ КЕШЕНЕ ТӨҘӘТӘМЕ?



**Күп йылдар холоҡ төҙәтеү ойошмаларында эшләү осоронда төрлө яҙмышлы, төрлө характерлы, төрлө сәбәптәр арҡаһында хөкөм ителгән кешеләр менән аралашырға тура килде һәм килә. Ошо тәжрибәмдән сығып, ҡайһы бер һығымта-күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашҡым килә.**

Беренсе тапҡыр хөкөм ителеүселәр, ғәҙәттә, үҙен ғәйепле тип иҫәпләмәй, язаның дөрөҫ түгеллеген иҫбат итергә тырыша икәнен беләм. Улар һәр ваҡыт кемдер арҡаһында янылыштым йәки башҡаса эшләргә мөмкин булмаған хәлдә ҡалдым, тип аҡлана. Бер аҙ ваҡыт үтеп, яҡынданыраҡ аралаша башлағас, улар асылып китә, ғәйепле икәнен таный, ғаиләһе, туғандары, балалары тураһында уйлауын, борсолоуын белдерә.

Эш урынымда оҙаҡ йылдар хөкөм ителеүселәр менән аралашыу һөҙөмтәһендә мин, кешене төрмәгә бикләп ҡуйып ҡына төҙәтеп булмайҙыр, тигән һығымтаға киләм. Ни өсөн? Сөнки кеше ошо системаға, мөхиткә килеп эләккәс, электән төрмәлә ултырғандарҙан яҡшыға өйрәнә алмай. Етмәһә, бында ярты ғүмерен төрмәлә ултырғандар ҙа етерлек һәм уларҙан ниндәй яҡшы ҡылыҡ өмөт итергә була һуң? Быны ошо кешеләрҙән беренсе тапҡыр ултырғандарҙы айырым тотоу дөрөҫ булыр ине, тигән фекерҙә мин. Унан һуң, элекке ваҡытта, завод-фабрикалар эшләгәндә, колониялар договор төҙөп, төрмәлә ултырыусыларҙы эшләтәләр ине. Ә хәҙер завод-фабрикалар юҡ, хөкөм ителеүселәрҙең буш ваҡыттары күберәк.

Ғөмүмән, кеше алдаусылар, үлтереүселәр, көсләүселәр араһына килеп ингәс, ниндәй яҡшылыҡҡа өйрәнергә мөмкин? Икенсенән, хөкүмәт төрмәләгеләрҙе лә ашатырға, кейендерергә, йоҡларға урын бирергә, йыуындырырға, сирләһә - дауаларға, мәктәптә уҡытырға, профессия бирергә бурыслы. Кеше бер нисә йылда ошо әҙергә өйрәнеп китә, ирекkә сыҡҡас, уҙаллы йәшәү мәсьәләһен нисек хәл итергә белмәй аптырап ҡала һәм тағы ла енәйәт ҡыла. Аҙаҡҡы ваҡытта ошондай ҡабат-ҡабат енәйәт ҡылыусыларҙың күбәйеүе борсолдора. Совет осоронда төрмә учреждениеһы етәкселәре, участковыйҙар, хакимиәт етәкселәре төрмәнән сыҡмаҫ элек үк кешенең ҡайҙа барасағы, ҡайҙа эшләйәсәге тураһында белешеп, тикшереп тора ине, ә хәҙер ундай тәртип тә юғалып китте.

Шуның өсөн, енәйәт ҡылғандарҙы бер нисә ай тикшереү изоляторында тотоп, ирекkә сығарһаң, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән, тип уйлайым. Мин бында ауыр енәйәт ҡылған кешеләр тураһында һүҙ алып бармайым. Аҙмы ни беҙҙә уҫал ниәт менән түгел, ә аңһыҙ рәүештә, яңылышлыҡ менән закон боҙғандар. Ундайҙарҙы ысынлап та төрмәләгә ауыр енәйәтселәр донъяһына барып эләкмәҫ борон ҡотҡарырға кәрәктер, файҙаһы күберәк булмаҫ инеме икән? Халыҡ араһында шундай лаҡап та йөрөй: кем төрмәнә бер тапҡыр еҫкәгән, ул төрмәһеҙ йәшәй алмай. Ошо хаҡта кемдәр нисек уйлай икән?

**Булат БАЙМОРАТОВ.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*



# ТАЛАЙҘАРМЫ ҺИНЕ, ЕРГЕНӘМ...

**Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы тигәндә, туған еребеҙҙең һутлы тупрағы, ҡарурмандары, бөркөт оялар мәғрур ҡаялары, йәнгә көҙрәт бирер изге тауҙары, иҫәпһеҙ йылға-күлдәре һәм, әлбиттә, уның ер аҫты байлыҡтары күҙҙә тотолалыр. Туған еркәйебеҙҙең ябай ғына ташы ла алтын- көмөшкә тиң, шулай булмаһа, ер аяғы-ер башынан килеп, туҡтауһыҙ ошо ҡәҙерле еребеҙ йөҙөн йыртып, йыртып, йыртып...**

**Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы тигәндә, туған еребеҙҙең һутлы тупрағы, ҡарурмандары, бөркөт оялар мәғрур ҡаялары, йәнгә көҙрәт бирер изге тауҙары, иҫәпһеҙ йылға-күлдәре һәм, әлбиттә, уның ер аҫты байлыҡтары күҙҙә тотолалыр. Туған еркәйебеҙҙең ябай ғына ташы ла алтын- көмөшкә тиң, шулай булмаһа, ер аяғы-ер башынан килеп, туҡтауһыҙ ошо ҡәҙерле еребеҙ йөҙөн йыртып, йыйырғыслап, ҡаҙып, соҡоноп-суҡынып эҙләнмәҫ ине ҡомһоҙ баҫҡынсылар - сит-яттар.**

Башҡорт балаһына Илаһыбыҙ үҙ өләшөнән бүлгән изге еребеҙгә ҡыҙыҡҡандар бер бөгөн түгел, быны беҙ ҡанлы тарих биттәренән яҡшы беләбеҙ. Башҡорт иленең бөтөн тарихы - еребеҙ именлеге өсөн көрәш ул. Сит-ят тарафынан ерҙе талау тарихы тағы ҡабатланамы? Ҡайҙа ҡарама - карьер ҙа соҡор, ә уның хужаларын эҙләп тә таба алмайҙар - улар Мәскәүҙә йә сит илдәрҙә. Мәҫәлән, мәғлүм булыуынса, апрель аҙаҡтарында Башҡортостанда булып киткән Росприроднадзор етәксеһе Светлана Радионова йылдар буйы саң-туҙанға сәсәп, ағыулы һауа һулап яфа сиккән Учалы районының Мансур ауылында ла булып, үҙ күҙҙәре менән күргәс, бындағы хәлдәрҙе "аҡылға һыймаҫлыҡ" тип аптыраны. Саңғалыҡ - илдәге иң бай милли холдинг карьеры булыуға ҡарамаҫтан, бында йылдар буйы бер ниндәй экологик саралар күрелмәгән. Әлегесә хужаларҙың исемдәре сайтта бар, ә үҙҙәре менән хатта Росприроднадзор башлығы ла бәйләнешкә инә алмай: һатыу итеү бүлеге телефоны ғына күрһәтелгән, ләкин улар бер ниндәй оператив мәғлүмәткә эйә булмай сыҡҡан. Быны шулай ашаған табаҡтарына төкөрөп ҡарай эре, бай компанияларҙың ҙур хужалары. Республиканың власть органдары бындай яуапһыҙлыҡҡа сик ҡуйырға тейеш тә бит...

Юғиһә, хәҙер теләһә кем килеп рөхсәтһеҙ-ниһеҙ беҙҙең ерҙәрҙе соҡой башланы. Былары алтын, хазина эҙләүсе айырым әтрәгәләмдәр. Яңыраҡ ҡына социаль селтәрҙә ҡот осҡос күренештең видеоһын һалдылар. Авторы - Талҡаҫ Иҫәнов (был псевдоним, күрәһең, ләкин эш унда түгел). Ул үҙе төшөрөп ебәргән күренештәргә аңлатма ла биргән. Ғәҙелша шарлауығының түбәнендәге аҡлан тотош тип әйтерлек тәртипһеҙ рәүештә аҡтарып сығылған. Күренеп тора: ҡеүәтле техника эшләгән бында. Унда-бында тау-тау тупраҡ өйөмдәре. Һөрөлгән ерҙә иһә тош-тош урында соҡорҙар ҡаҙылған, улар бик күп. Видео авторы әйтеүенсә, бында металл эҙләгестәр ҡулланып алтын юллағандар. "Ошондай уҡ күренеште Аҙнағол янында ла осраҡҡайным", - ти автор. Бындай ҡырағайҙарса ҡылыҡты бер кем күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Ә бит Ғәҙелша шарлауығы тәбиғәт ҡомартҡыһы, 1965 йылдан ул дәүләт тарафынан һаҡлана, шул иҫәптән уның эргә-тирә биләмәләре лә. Был ерҙәрҙә 270 төрлө үҫемлек, шул иҫәптән һирәк осрай торған реликт үҫентеләр бар. Әлеге вандалдар был тирәләге ҡиммәтле үҫемлектәр ерен аҡтарып һөрөп сыҡҡан. Икенсе миҫал: Әбйәлил районының Тирмән ауылында 4,5 гектар ерҙә законһыҙ рәүештә мәрмәр ҡаҙығандар. Был ҡырағайлыҡ ҡылынған ергә Россельхознадзор инспекторҙары тупраҡ уңдырышлылығын тикшереп йөрөгәндә осраҡлы килеп сыҡҡандар.

Ошо араларҙа ғына вандализмдың тағы бер осрағына Урал һырты буйлап 5 айлыҡ сәфәргә сығып киткән сәйәхәтсе Олег Чегодаев Ейәнсура районы биләмәһенең Ҡараморонтау һыртында тап була. Ул бында ер һөрөүсе тракторҙы һәм тау соҡоусы бер нисә эшсене күреп ҡала һәм эштең ниҙә икәнен аңлап, видеоға төшөрә башлай. "Был биләмәгә юл шымартып бөткәндәр, тимәк, улар бында бер бөгөн генә түгел. Ер ҡаҙырға рөхсәттәре менән ҡыҙыҡһына башлағас, эшселәр тиҙерәк бынан һыпыртыу яғын ҡараны", - тип яҙа сәйәхәтсе. Ул үҙенең аңлатмаһы менән видеояҙмаһын һәм фотоларҙы инстаграмға һалғас, Ейәнсура район хакимиәте башлығы Дәмин Юламанов ошо биләмәләге ауыл советы башлығы Хөрмәтулла Ҡотошов һәм участковый менән берлектә енәйәт ҡылынған урынға килеп тикшереү үткәрәләр. Законһыҙ таш сығарыу факты раҫлана. Әлеге ваҡытта полиция ғәйеплеләрҙе эҙләй...

Күренеүенсә, бөгөнгө көндә бындай закон боҙоусы "кара копателдәр" республикабыҙ ерҙәренә талпан кеүек йәбешкән. Уларҙың енәйәтсел эшмәкәрлегенә нисек юлды ябырға? Уларҙы енәйәт урынында тотоп, фашлап, яуаплылыҡҡа тарттырыу менән ниңә бер ойошма ла шөғөлләнмәй? Ҡарап тороп күрәләтә талатабыҙ ғәзиз еребеҙҙе. Был күпме дауам итер?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Тиҙҙән Башҡортостан халҡы М.П. Чумаков исемендәге Иммунобиологик препараттар әҙерләү һәм тикшереүҙәр ғилми үҙәге етештергән "КовиВак" препараты менән прививка эшләтә аласаҡ. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанға 367 834 доза "ГамКовидВак" һәм "ЭпиВакКорона" вакцинаһы килтерелгән. Бөтәһе 224 860 кеше прививка яһатҡан, ә 310 496 кеше вакцинаның беренсе компонентын алған. 20 майға республикала 37 218 кеше яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторған, уларҙың 89-ы - һуңғы тәүлектә.

✓Рәсәйҙә әсәлек капиталын ҡулланыуҙы киңәйтеүҙәре ихтимал. "Сығанаҡтарҙың мәғлүмәте буйынса, Рәсәй Федерацияһы вице-премьеры Татьяна Голикова Президентка ике йүнәлеш буйынса ҡағиҙәләргә төҙәтмә индереү башланғысы менән мөрәжәғәт итте: ғаиләләргә бала тыуғас та әсәлек капиталын шәхси өй һалыу һәм төҙөкләндереү өсөн файҙаланыу мөмкинлеге биреү (әлеге ваҡытта быны уға өс йәш тулғас ҡына эшләргә була); әсәлек капиталы лицензияға эйә булған шәхси эшҡыуарҙар күрһәткән белем биреү хеҙмәттәренә тотонорға рөхсәт итеү", - тиелә хәбәрҙә.

✓Йома Өфөлә "АРТ-Ҡоролтай" беренсе мәҙәниәт форумында Радий Хәбиров "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы буйынса бойороҡҡа ҡул ҡуйыуын белдерҙе. Көҙҙән башлап ауыл учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә 500 мең һумлыҡ тәүге 60 грант тапшырыла. Рәсәй Федерацияһының барлыҡ субъекттары муниципалитеттарында ошо дәүләт ярҙамы прогаммаһын бик көтәләр.

✓Башҡортостанда хаҡлы ялдағыларҙы "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге. Туризм" проекты сиктәрендә республика буйлап бушлай экскурсияларға саҡыралар. Әлеге көндә Торатау - Воскресенск ауылы; Ҡыҙыл шишмә; Красноусол курорты - Ташаҫты; Бөрө ҡалаһы; "Нарыҫтау" туристик базаһы - "Изге Ғәли" шишмәһе; "Святые кустики" ир-егеттәр монастыры йүнәлештәренә сәйәхәт итергә була. Проектта ҡатын-ҡыҙҙарға - 55, ир-аттарға 60 йәштән башлап ҡатнашырға мөмкин. Өҫтәмә мәғлүмәт өсөн телефон: (347) 235-84-37.

✓Башҡортостандың 9 районындағы мәктәптәр яңы уҡыу йылынан хәләл ризыҡ менән тәьмин ителәсәк. Шишмә, Дәүләкән, Архангел, Нуриман, Иглин, Балаҡатай, Благовар, Салауат, Миәкә райондарында уҡыусыларҙы йылы аш менән тәьмин итеүсе алты предприятие хәләл стандартына яраҡлы булыу тураһында сертификат алды.

✓ *Кисекмәҫтән, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәғариф системаһын яңынан тикшереп сығырға һәм заман шарттарын, ысынбарлыҡты иҫәпкә алып, уны совет мәктәбе файҙаһына үҙгәртергә кәрәк.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# ЙӘШТӘРЕБЕҘГӘ НИ БУЛҒАН,

## йәки Ҡаҙандағы фажиғә тураһында

**Ҡаҙандағы фажиғә Рәсәй мәғарифының бик күп проблемаларын асып һалды. Йәштәребеҙгә ниҙер булған. Ә бит нәҡ йәштәр менән эшләү һөҙөмтәләре йәмғиәтебеҙ артабан нисек һәм ниндәй юҫыҡта үҫеш алырын күрһәтәсәк.**



Бөгөн был фажиғәгә ҡағылышлы мәктәптәрҙә һаҡты көсәйтеү, ҡоралды һаҡсылар ҡуйыу, йөҙөрләгән видеокамералар, турникеттар, биометрия ҡорамалдары урынлаштырыу, синыфтарҙа уҡыусыларҙың мимикаһы һәм хис-тойғоларын контролгә алыу, социаль рейтинг аналогын индереү, ҡоралһыҙландырыу һылтауы менән хатта балалар магазиндарында уйынсыҡ ҡоралдар һатыуҙы тыйыу һәм башҡа темалар айырыуса ҡуйыртыла. Бында айырым ижтимағи төркөмдәрҙең ижтимағи-сәйәси, иҡтисади мәнфәғәте ҡайғыртылыуын асыҡ күреп була. Беҙгә тағы ла мәсьәләнең айышына төшөнөп, тамырынан юҡ итмәйенсә, "ел тирмәндәре" менән көрәшергә, яртылаш саралар күрергә тәҡдим итәләр. Ә бит был мәсьәлә күп яҡлы һәм йәмғиәтебеҙҙең башҡа даирәләренә лә ҡағыла.

2001 йылдың 11 сентябрендә донъяға килгән Илназ Ғәләүиев 2021 йылдың 11 майында Ҡаҙандың 175-се гимназияһында ҡот осҡос енәйәт ҡылды. Бынан дүрт йыл элек ул үҙе лә ошо белем усағында уҡыған. Киң мәғлүмәт саралары шунда уҡ беренсе мәғлүмәт таралды - 11 кеше үлтерелгән. Эшкә лә урынлашып өлгөрмәгән йәш кешегә кем ҡорал биргән? Бындай психотиплы егеттәрҙең Рәсәйҙәге деструктив көстәр эшмәкәрлегенә бәйле булыуы көн кеүек асыҡ бит. Мәҫәлән, ғинуар айҙары тирәһенән кем менәндер аралаша башлаған, "Ҡазан уҡсыһы"ның тәртибе үҙгәргән. Атап әйткәндә, ул уҡыуын ташлаған. Өлгәшмәгән өсөн колледждан ҡыуылған та февраль айында һунар билеты алған. Ҡағыҙҙәләргә ярашлы, ул быға тиклем 3 йыл дауамында һунарсылар ойошмаһы ағзаһы булырға тейеш тә бит. Шунан, үҙ-үҙен тотошо ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, психиатрҙан белешмә ҡағыҙы ла алыуға өлгәшкән. Ә 28 апрелдә һатып алынған шыма көбәкле төрөк винтовкаһына тип, кем был егеткә 40 мең аҡса биргән? Башта 4 май көнө 200 патрон, аҙаҡ өҫтәп тағы ла 150 дана һатып алыуы ла уның енәйәт башҡарыуға ныҡлы әҙерләнеүе хаҡында һөйләй. Ошо ваҡытта кемдер уның эргәһендә булып, йүнәлтмә биреп торған, тимәк. Буласаҡ енәйәтсе "Телеграмм" селтәрендәге шәхси каналында ла кешеләргә ҡарата нәфрәтә тураһында асыҡ яҙа, "биосуп" тип атай. Дүрт көн дауамында был мәғлүмәткә тирә-йүндәгеләре лә, ата-әсәләре лә иғтибар итмәгән... Был аҡылға һыймаған эшмәкәрлекте 2014 йылда Украинала кеше аңына тәьҫир итеү маҡсатында ҡулланылған психотрон һәм психотроп системалар менән бер рәттә "психосферное оружие" тип аталған күренеш менән генә аңлатырға булалыр. Үҙенең каналында ул "О, мин шундай аҡыллы, мин башҡаларҙан айырылам, мин Хоҙай" тип яҙа. Был фекерҙәр социаль селтәрҙәр, видео-уйындар һ.б. аша мейеһенә иплэп кенә һалыныуын, көсләп тағылыуын ул аңламай. Биосуп тураһында ла Рәсәй йырсыһы Элджейҙың "Suzuki" тигән музыкаль композицияһында йырлана. Был "психосферное оружие" тип аталған нәмәнең йәштәр аңына йоғонтоһоноң көсө уны ҡулланыуҙары тураһында белеү-белмәүҙән тора. Ә йәштәр белмәй.

Шулай ҙа мәсьәлә бынан ҡатмарлыраҡ һәм уны хәл итеү өсөн дә төпкәрәк төшөп уйларға кәрәк. Сөнки совет мәктәбен емереү, Болонья белем биреү системаһына ярашлы көсләп үҙгәртеп ҡороуҙар, "биосуп" һүҙе ғәҙәтигә әүерелгән, төрлө аҙғын күренештәр йәшерен һәм асыҡ пропагандаланыусы массовый көнбайыш мәҙәниәте, кешелекһеҙ компьютер уйындары, атыш-үлтерешкә ҡоролған башҡа төрлө симуляторҙар һ.б. кеүек алдан уйланылған саралар был кешенең тәртибенә һалынған. Социаль селтәрҙәрҙә лә төрлө деструктив төркөмдәр бихисап һәм уларҙың эшмәкәрлеген тыйып ҡуйырлыҡ бер генә лә әмәл юҡ.

Быйыл ғына ла Рәсәй ФСБ-һы Ҡазан теракты кеүек 3 осраҡты алдан иҫкәрткән. Мәҫәлән, 24 мартта Сочиҙағы лицейҙа теракт планлаштырылған, унан һуң Пенза һәм Мәскәү эргәһендәге Люберцы ҡалаһында ике үҫмер үҙ мәктәбен ҡыйратырға ниәтләгән. Ә 12 майҙа Амур өлкәһе Благовещенск ҡалаһында мәктәбен шартлатырға маташҡан 17 йәшлек үҫмер ҡулға алынған. Нигеҙҙә социаль селтәрҙәрҙең ентекле иғтибары аҫтында булған йәштәребеҙ менән ниҙер булған. Кисекмәҫтән дауалау кәрәк. Ҡаҙандағы теракт тураһындағы яңылыҡтар аҫтында ҡуйылған комментарийҙар араһында был вәхшиәрсә ҡылыҡты хуплап, яҡлап сығыш яһаусылар ҙа барлығы ҡурҡыта. Был йәштәр социумының ҡаты ауырыуы, уны тотош Рәсәй йәмғиәте ярҙамында дауалау кәрәклеге хаҡында һөйләй.

Беҙҙең Рәсәй йәштәренә, йәмғиәтенә һәм дәүләтенә ҡаршы мәғлүмәти һуғыш киң йәйелдерелгән, ул һәр беребеҙ аша үтә: ололарҙы ла, балаларҙы ла ситләп үтмәй. Социаль селтәрҙәрҙәге, телевидениелағы, музыкалағы, фильмдарҙағы ҡыйратыусы көстәр, уларҙан килгән агрессия һәм негатив тормошобоҙға ҡасан килеп инере тик ваҡытҡа һәм ситтән тороп баҫылған төймәгә бәйле. Үлтерешкә ҡоролған компьютер уйындары көн һайын йәштәр аңына, кеше үлтереүе еңел, тиген уйҙы һеңдерә. 2020 йылда Рәсәй ФСБ-һы илдәге 44 терактты киҫәтһә лә, бөтәһенән дә һаҡланып өлгөрөп булмай.

Был хәлдәрҙән һуң бик күп һорауҙар тыуҙы һәм уларға һыйымта яһап, шуны әйтергә була: дәүләткә чиновниктың шәхси яуаплылығына хоҡуҡ ҡулланып булған ғәмәл кәрәк. Кисекмәҫтән, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәғариф системаһын яңынан тикшереп сығырға һәм заман шарттарын, ысынбарлыҡты иҫәпкә алып, уны совет мәктәбе файҙаһына үҙгәртергә кәрәк. Балаларҙы фекерләргә, яңы белем үҙләштерергә, уҡырға өйрәтергә кәрәк. Чиновниктар яңы мәғариф системаһы өсөн шәхси яуаплылыҡ тойорға тейеш. Бынан тыш, Фурсенко әйтмешләй, мәғариф системаһын ҡулланыусылар түгел, ә Ижадсылар тәрбиәләү юлына кире бороу мотлаҡ. Йәштәр эшенә комплекслы ҡараш талап ителеүен дә хәтерҙән сығармайыҡ. Йәштәр сәйәсәте өлкәһендә дәүләттең ролен яңынан ҡарарға һәм тормошта бөтә яҡлап та сәләмәт быуын тәрбиәләүгә көстәрҙе йүнәлтеү зарур. Беҙгә киң мәғлүмәт сараларына цензураны кире ҡайтарырға һәм йәштәрҙе тура юлдан яҙҙырған, аҙҙырған нәмәләрҙе дәүләт ҡаҙнаһынан финанслауҙы туҡтатырға, тарихыбыҙҙы боҙоп күрһәткән, дәүләтебеҙҙе һәм ата-бабаларыбыҙҙы яманлаған Рәсәй фильмдарын төшөрөүҙе тыйырға кәрәк. Чиновниктарҙың яуаплылыҡ институтын кире тергеҙеү кәрәк булһа, дәүләт надзиратель һәм язаға тарттырыусы сифатынан ситләшергә, ә граждандар, киреһенсә, ҡулланыусыларҙан Ижадсы булырға ынтылырға тейеш. Бөгөн илдең империя элитаһын формалаштырыу буйынса эш башлауҙы маҡсат итеү ҙә мөһим. Ә шулай ҙа иң әһәмиәтлеһе шул: 25 йәше тулмаған йәштәргә ҡорал биреүҙе тыйырға кәрәк, хатта тик армияла йәки хоҡуҡ һаҡлау органдарында хеҙмәт иткәндәргә генә рөхсәт бирелһен. Шулай уҡ Рәсәй Президенты эргәһендә һәм федерация субъекттарында урындарҙа эшләгән эксперттар советы ойошторолһа ине. Уның эше һәр кем инеп ҡарай алырлыҡ "Рәсәйгә ҡаршы гибрид һуғыш тураһында" докладтар нәшер итеү, уларҙы таралыуҙан туҡтатыу һәм Рәсәй киләсәктә ниндәй һынланыш алырын күҙаллауҙан ғибәрәт булырға тейеш.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Башҡорт дәүләт университетының өлкән уҡытыусыһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2022 йылда Башҡортостандың Ғафури районында һәм Ағиҙел ҡалаһында ике яңы ҡояш электр станцияһы (ҠЭС) сафҡа индерелә. Республикала ошондай биш электр станцияһы әлеге көндә эшләй, уларҙың дөйөм ҡеүәте 69 МВт. Шуларҙың Хәйбулла, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Бөрйән райондарында урынлашҡандарын "Хевел" компанияһы төҙөгән, ә Стәрлебаштағы ҡояш электр станцияһын былтыр "Солар Системс" ҡулланыуға индергән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районындағы Талҡаҫ күленә махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе статусын бирергә ҡушты. Быға "Семенов рудниги" йәмғиәтенең Талҡаҫ күленән алыҫ түгел урында карьер асырға йыйыныуына бәйле Иҫән, Түбә, Һаҡмар, Темәс ауылдары халҡының муниципалитетҡа һәм республика властарына мөрәжәғәт итеүе сәбәп булған. Республиканың Экология министрлығы күл биләмәһендә рөхсәт ителгән эшмәкәрлек сиктәрен һәм режимдарын проектлау эшен башланы ла инде.

✓Өфөлә нигеҙ һалынған "Катын-ҡыҙ бәхете биләмәһе" хәйриә проекты тәүге тапҡыр тотош ил кимәлендә сыҡты. Ҡала ике көнгә Рәсәйҙең ҡатын-ҡыҙҙар баш ҡалаһына әүерелде. Сара 20 майҙа "Торатау" Конгресс-холында башланды. Беренсе көндә - ҡатнашыусылар өсөн эшлекле программа, икенсеһендә һаулыҡ һәм үҙеңде үҫтереү хаҡында лекциялар булды. Саралар Президент гранттары фонды һәм Башҡортостандың Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды ярҙамында тормошҡа ашырылды.

✓Башҡортостан аграрийҙары 17 майға яҙғы культуралар өсөн тәғәйенләнгән майҙандарҙың 78 процентын ашыуын сәскән, был 1 миллион 580 мең гектар. Шәкәр сөгөлдөрөн сәсеү тамамланған, 36 гектар майҙанда эштәр башҡарылған. Республиканың 13 районында һуң сәсәләторған культураларҙың береһен - ҡарабойҙай сәсеүгә төштөләр.

✓Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай экология мәғлүмәттәрен асыу тураһындағы закон проектын ҡарарға йыйына. Шул иҫәптән һауаның, тупраҡтың, һыуҙың бысраныуы, нурланыш торошо, ағыулы матдәләр һәм уларҙың сығанаҡтары, сәнәғәт ҡалдыҡтары менән эшләү, тирәяҡ мөхиткә насар йоғонтоно кәметеү буйынса күрелгән саралар тураһында мәғлүмәттәрҙе халыҡҡа асыҡ сығанаҡтарҙа урынлаштырыу мөмкинлеге тикшерелә. Дәүләт сере булғанда ғына асыҡлыҡ индереү тыйыласаҡ.

*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАР БАЙРАМЫНДА...

✓**22 майҙа, "Һуңғы ҡыңғырау" көнөндә, Башҡортостанда алкоголь һатылмай, тип хәбәр иттеләр республика Сауҙа министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.** Был тыйыуҙың магазиндарҙа алкоголь һатыуға ғына ҡағылыуы тураһында әйттеләр. Бындай сикләү дөйөм туҡланыу предприятиеларына ҡағылмай.Талапты боҙған өсөн штраф ҡаралған. Вазифалы кешеләргә - 20-40 мең һум, юридик шәхестәргә - продукцияны конфискациялау менән бергә йәки унһыҙ 100-300 мең һум. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, яңы йыл каникулдарында, Йәштәр көнөндә, Белем байрамында һәм һабантуйҙар уҙғарылған көндәрҙә лә Башҡортостанда иҫерткес эсемлектәр һатыу сикләнә.

✓**Парламенттың сираттағы пленар ултырышында республикала туризм эшмәкәрлеген көйләүсе ҡанунға үҙгәрештәр индереү тураһындағы закон проекты ҡаралыуы күҙаллана.** Атап әйткәндә, республика ҡануниәтендә туристик маршруттың хоҡуҡи статусын, шулай уҡ уның маҡсаттарын һәм ҡулланыу принциптарын нығытыу тәҡдим ителә. Закон проектын әҙерләгәндә туризм индустрияһы күҙлегенән уңышлы тип һаналған башҡа төбәктәрҙең, мәҫәлән, Алтай, Ҡырым, Яҡутстан, Краснодар крайы һәм башҡаларҙың уңышлы тәжрибәһе иҫәпкә алына. "Республикала туристарҙың яратҡан урындары бик күп. Популяр машруттар ҙа, бик билдәле булмағандары ла бар, әммә улар һаҡланыу тәьмин иткән һәм туристик инфраструктураны үҫтереүгә ярҙам иткән махсус социаль статусҡа эйә түгел. Беҙ бындай маршруттарҙы "законлаштырырға" һәм уларҙы Башҡортостандың туристик реестрына индерергә тәҡдим итәбеҙ, - ти парламент спикеры Константин Толкачев. - Күптән түгел Ирәкташ эргәһендә урманды ҡырҡыуға бәйле низағ шаһиты булдыҡ. Хәл-торош тап был урындың тейешле статусҡа эйә булмауы һөҙөмтәһендә килеп сыҡты. Урман әҙерләүсе урманды законлы рәүештә ҡырҡа, әммә туристар фекеренсә, ул республиканың матур урындарының береһендә урманды вәхшиҙәрсә ҡыйрата кеүек килеп сыға. Әгәр туристик маршруттар хоҡуҡи йәһәттән тейешенсә билдәләнһә, бындай хәлдәр башҡаса ҡабатланмаясаҡ".

✓**Республика поликлиникаларында коронавирустан 155 вакцинация пункты ойошторолған. Прививкаға "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында һәм регистратурала яҙылырға мөмкин.** Шулай уҡ Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында, "Мега", "Планета", "Башҡортостан" (Өфө), "СитиМолл" (Стәрлетамаҡ) сауҙа үҙәктәрендә биш мобиль пункт эшләй. Прививканы 19 апрелдән алты маршрут буйынса алыҫта урынлашҡан ауылдарға юлланған "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы барышында эшләтергә була. Бынан алда "Башинформ" агентлығы 14 майҙа Өфөлә прививка эшләткәндәр араһында акция башланыуын хәбәр иткәйне. Ҡатнашыу өсөн вакцинация пункттарының береһендә прививка яһатырға, үҙенсәлекле QR-код менән флаер алырға һәм уны "Сәләмәт Өфө" сайтында теркәргә кәрәк. Конкурста ҡатнашыусылар араһында 23 июндә "Вся Уфа" телеканалы эфирында ҡиммәтле бүләктәр, шул иҫәптән Өфөлә бер бүлмәле фатир, 10 смартфон уйнатыла. Акция 20 июнгә тиклем дауам итә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАШБАШТАҠЛЫҠМЫ?



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республикала ер аҫтын файҙаланыусылар эшмәкәрлеге һәм биләмәлә ер аҫтын файҙаланыу өлкәһендәге хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссия булдырыу буйынса ҡабул ителгән ҡарар тураһында һөйләне.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған шәмбелә Баймаҡта республика етәксеһе файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға арналған кәңәшмә үткәрҙе. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, район халҡы теге йәки был участканы эшкәртеү хаҡында унда техника ингәс һәм көтмәгәндә эшкәртеү эше башланғас ҡына белеп ҡала.

"Муниципалитеттар, власть органдары, контроль-күҙәтеү органдары һәм ер аҫтын файҙаланыусылар араһында үҙ-ара эш итеүҙе яйға һалырға кәрәк. Ер аҫтын файҙаланыу - эш урындары булдырырға тейешле мөһим иҡтисади эшмәкәрлек. Ләкин экологик нормалар үтәлмәгәндә ул бик һиҙгер. Шуға күрә беҙ ведомство-ара комиссия ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул иттек", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе төрлө ҡыҙыҡлы факттарҙың асыҡланыуын һөйләне. Учалы районында "Альтинвест" компанияһы бенефициарҙарының береһе - украин сәйәсмәне, хөкүмәттең элекке вице-премьеры һәм Юғары Раданың экс-депутаты, "санкция исемлеге"нә индерелгән Леонид Казаченко. Сит илдәрҙә йәки офшор зоналарында "ҡойроҡтарын йәшергән" компаниялар республика байлыҡтары менән ҡыҙыҡһына. Әйтәйек, "Златолит-Плюс" йәмғиәте Сейшел утрауында теркәлгән. "ИрәмәлБашресурс" "ярымофшор" компанияһын ойоштороусылар - Чехия бизнесмендары. "Иҫ киткес нәмәләр ҡылына, бер яҡтан, был законға ҡаршы килмәй. Әммә ошо аҡсаның ҡайҙа китеүе тураһында уйланырға сәбәп бар. Аҙна дауамында минә ведомство-ара комиссия булдырыу буйынса бөтә ҡарарҙарҙы әҙерләүегеҙҙе һорайым", - тип йөкләмә бирҙе Радий Хәбиров Хөкүмәт Премьер-министрына.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# БУШ ХӘБӘР БУЛДЫ

**БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев халыҡ араһында шау-шыу тыуҙырған хәбәр - төбәктәрҙе ерәләтеү мәсьәләһе буйынса аңлатма бирҙе.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 16 апрелдә Юғары Иҡтисад мәктәбе ойошторған түңәрәк өҫтәл барышында вице-премьер Марат Хөснуллин, Рәсәйгә 85 төбәктең кәрәге юҡ, уларҙың ҡайһы берҙәрен иҡтисади йәһәттән күрше төбәктәр менән берләштерергә кәрәк, тип белдергәйне. Һуңыраҡ ул үҙ һүҙҙәрен шәхси фекерем генә тип әйтһә, Хөкүмәттә иһә төбәктәрҙе берләштереү идеяһы ҡаралғаны юҡ, тип аңлатма бирҙеләр. Башҡортостан парламенты спикеры билдәләүенсә, беҙҙең республиканы күрше төбәк менән берләштереү "перспективаһыҙ һәм һөҙөмтәһеҙ" мәсьәлә ул. "Эреләтеү тәү сиратта иҡтисади ғәҙеллек һәм идара итеү маҡсаттарының ярашлылығы. 2000 йылдарҙа көсләрәк субъекттар составына 6 Рәсәй төбәге индерелгәйне һәм был дөрөҫ ҡарар булды. Әгәр төбәктең ышаныслы таянысы һәм үҫеш өсөн ресурсы юҡ икән, иҡтисади яҡтан көслөрәк күршеһе составына инеү уға тотороҡлолоҡ бирәсәк. Ил күләмендә бындай эреләтеү идара итеү тигеҙһеҙлеген бөтөрә, матур ҡаҙаныштарҙың тигеҙ бүленешен тәьмин итә. Ошо йәһәттән административ-территориаль үҙгәртеп ҡороуҙар ғәмәлдә үҙен аҡлай,- тине Константин Толкачев.- Ә инде беҙҙең күршеләр темаһына уйҙырмалар һис бер нигеҙһеҙ спекуляция ул. Беҙҙең төбәктә бөтөн субъекттар ҙа ярайһы хәлле генәләр, төшөнкөлөккә дусар биләмәләр юҡ. Милли-тарихи һылтанмалар ҙа нигеҙһеҙ. Эйе, беҙҙең республика тыуған йылдарҙа башҡорт халҡының бер өлөшө уның сиктәренән ситтә тороп ҡала. Ләкин шунан һуңғы бөтөн үҫеш логикаһы иҡтисад процесына буйһондорола. Бөгөн Башҡортостан да, беҙҙең күршеләр ҙә иҡтисади йәһәттән көслө, сәйәси яҡтан камил һәм үҙаллы, һәр береһенә хас милли-мәҙәни үҙенсәлектәре булған субъекттар. Башҡортостан, өҫтәүенә, халҡы һаны буйынса Волга буйы федераль округында иң эре субъект булып тора, ә Рәсәй буйынса - етенсе урында. Административ ҡоролошто үҙгәртеүҙең иҡтисади маҡсаттары юҡ икән, әлеге идеяның киләсәге бик томанлы, ә эҙемтәһе көтмәгәнсәрәк килеп сығыуы ла ихтимал. Шуның өсөн дә мин был темаға һүҙ ҡуҙғатыуҙы перспективаһыҙ һәм һөҙөмтәһеҙ тип иҫәпләйем".

# БАШҠОРТОСТАН ЙӨКӘЛӘРЕ...

**Республика Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт аппараты етәксеһе Илшат Тажетдиновтың Иглин районына күсмә сәфәре ваҡытында Башҡортостанда умартасылыҡты үҫтереү маҡсатында йүкә ағастарын күпләп ултыртыу мәсьәләһе лә ҡаралды.**

Һуңғы йылдарҙа умартасылар ошо төр ағастарҙың ҡырҡылыуына бик йыш борсолоу белдерә. Республикала ағастарҙың 20 процентын (1,1 миллион гектар) йүкә алып тора, был ил буйынса 35 процент. Бал алыу өсөн ошо ағастың булыуы төп шарт. Улар - илдә иң яҡшыларҙан һаналған һәм даими рәүештә халыҡ-ара, Рәсәй конкурстарында призлы урындар алған башҡорт йүкә балының нигеҙе. "Беҙҙә, йола булараҡ, урмандарҙы тергеҙеүгә ҙур иғтибар бирелә, - тине Илшат Тажетдинов. - Былтыр урман ултыртыу уны ҡырҡыуға ҡарағанда 1,3 гектарға күберәк булды һәм дөйөм алғанда 15 мең гектар тәшкил итте. Шул уҡ ваҡытта урман структураһын төрлө төр ағастарҙың күпләп үҫеү өлөшө буйынса ла иҫәпкә алырға кәрәк. Бында мин умартасыларҙың йүкә урмандарын һаҡлау һәм тергеҙеү позицияһы менән килешәм. Эре бизнестың умартасыларҙың теләгенә ҡолаҡ һалыуы ла ҡыуандыра. Былтыр, мәҫәлән, "Кроношпан" компанияһы инициативаһы буйынса теркәлгән умарталыҡтар эргәһендә - 3 мең, быйыл 10 майҙа үткән Халыҡ-ара "Хәтер баҡсаһы" экологик акцияһы сиктәрендә районда 5 мең йүкә ултыртылды. Апимондияның 47-се Конгресына әҙерлек алдынан да был бик мөһим. Акцияның киләсәктә лә изге һәм киң ҡулланылған традиция булып ҡалырына ышанам".

Республикала йүкә ағастарын һаҡлау буйынса саралар сиктәрендә умарталыҡтарҙан 3 километрҙа булған аралыҡта үҫентеләрҙе һаҡлау буйынса мониторинг алып барыла. Архангел, Ғафури, Иглин, Нуриман һәм Өфө урмансылыҡтарының урман хужалығы регламентында урманды яһалма тергеҙеүҙә ҡулланылған төрҙәр иҫәбенә йүкә лә индерелгән. Республикала иң ҙур ағас эшкәртеү компанияһы булып торған "Кроношпан" менән йүкә питомнигын һәм унда иң яҡшы генофонд булдырыу буйынса килешеү төҙөлгән. Киләсәктә йүкә ағасын ултыртыу күләмен йылына миллион төп үҫентегә еткереү бурысы тора.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы һыу инеү миҙгелен асырға әҙерләнә. Граждандарҙы яҡлау идаралығы водолаздары йылға төбөн тикшереү һәм таҙартыу эштәренә тотондо. "Әлегә биш ял итеү зонаһында эштәр башҡарылған", - тип хәбәр иттеләр ҡала идаралығынан. 1 июнгә тиклем Өфөлә йәйге ял өсөн 10 рәсми урын әҙерләү планлаштырыла. Пляждарҙы ҡуртымға алыусылар кафе, ҡорамалдар урынлаштыра, талпандарҙан, кимереүселәрҙән, серәкәйҙәрҙән эшкәртә.

✓Өфөлә 1,2 млрд һумлыҡ күп функциялы спорт комплексын төҙөү проектын тикшерҙеләр. Был эште Александр Семак мәрхәмәтлек фонды атҡарырға теләк белдергән һәм комплекс нигеҙендә шайбалы хоккей, фигуралы шыуыу, йөҙөү буйынса Олимпия резервы академияһынын булдырыуҙы күҙаллай. Әлегә уны Ҡашҡаҙан эргәһендә урынлаштырыу планлаштырыла.

✓Хәсәновтар ғаиләһе "Ғаилә фольклориадаһы-2021" ҡала фольклор сәнғәте фестивалендә еңде. Башҡортостанда Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылына һәм Бөтә донъя фольклор сәнғәте олимпиадаһына арналған сараға ҡатнашыусылар ғаилә фотолары, балалар менән берлектә ижади эш, милли кейем һәм әйберҙәрҙән торған күргәҙмә әҙерләне, жюри уларҙың таныштырыу һәм ижади сығыштарын да баһаланы. Нурзиә һәм Рөстәм Хәсәновтар быға тиклем 2020 йылда баш ҡаланың "Йәш ғаилә" конкурсында өсөнсө урын яулағайны.

✓Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығын билдәләү маҡсатында Мәскәүҙә ойоштороусылар комитетының беренсе ултырышы уҙҙы. Унда Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Алексей Оверчук, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. 2024 йылға Өфөнөң мөһим мәҙәни, спорт һәм инфраструктура объекттарын яңыртыу ҡаралды.

✓Бухартовтар йортон реставрациялау өсөн Өфө ҡалаһы халҡынан уның фотоларын ебәреүҙе үтенәләр. Ул 1902-1904 йылдарҙа төҙөлгән һәм 2020 йылда янғындан ҙур зыян күрҙе. Мәғлүмәттәрҙе info@archtamga.ru электрон адресына ебәрергә була.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ...

## мәктәп биләмәһендә генә!



**Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә уҙған ваҡиғаларға йомғаҡ яһалыу менән бер рәттән, алда торған бурыстар ҙа билдәләнде, ҡайһы бер мәсьәләләргә төҙәтеүҙәр индереү кәрәклеге лә асыҡланды.**

Мәҫәлән, "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын урынлаштырыу урыны буйынса әле һаман анығ ҡарар юҡ. Быға тиклем уны Еңеү паркына инеү урынында ҡуйыу планлаштырылһа, федераль концепцияға ярашлы расланған стеланың дәүмәле һәм нисбәте унда урынлаштырыу мөмкинлеген бирмәй. Шуға күрә әлегә өс урын: Ағиҙел йылғаһының яр буйы, УМПО ҡаршыһындағы майҙан һәм Калинин исемендәге парк ҡуҙаллана. Ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков өфөләрҙе стеланың урынын һайлау буйынса тауыш бирергә, шулай уҡ 2022 йылда төҙөкләндерелергә тейешле йәмәғәт территорияларын һайлауҙа ла әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы. Бының өсөн бары тик хакимиәттең рәсми сайтына инеп, тауыш бирергә генә кәрәк. Тауыштар ни тиклем күберәк, шул тиклем федераль бюджеттан ярҙам алыу мөмкинлеге лә арта.

Күрше Татарстанда булған фажиғәнән һуң Башҡортостан мәктәптәрендә һаҡты көсәйтеү бурысы ҡуйылғайны. Баш ҡаланың барлыҡ белем усаҡтарында ла тикшереүҙәр үткәрелгән. Мәктәптәрҙә хәүефһеҙлектең нисек тәьмин ителеүе менән хакимиәт башлығы урынбаҫары Гөлләрүә Ялсыкаева таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, бөгөн 398 белем биреү учреждениеһына видеокүҙәтеү, 390-ына инеүҙе күҙәтеүҙең электрон системаһы ҡуйылған. 114 мәктәптә арка формаһындағы тимер матдәне асыҡлаусы детектор урынлаштырылған, 112 дөйөм белем биреү ойошмаһында был процесс махсус тимер эҙләү ҡулайламаһы ярҙамында ҡулдан башҡарыла. Балалар баҡсаларында электрон йоҙаҡтар ҡуйылған, ҡайһы бер учреждениеларҙың ҡапҡаларында магнит йоҙаҡтар бар. Барлыҡ системаларҙың төҙөклөгө даими рәүештә тикшерелеп тора. Һаҡ хеҙмәтен махсус лицензияһы булған ойошмалар тормошҡа ашыра, улар белем биреү ойошмаларына сит кешеләрҙе индермәй, килеүселәр тураһында мәғлүмәт теркәлеп бара, биналарға сигнализация системалары ҡуйылған. Мәктәптәр һәм өҫтәмә белем биреү ойошмалары - тәүлек әйләнәһенә, балалар баҡсалары төнөн һаҡлана. Бынан тыш, белем биреү учреждениелары барыһы ла периметр буйынса ҡойма менән уратып алынған.

Мәғариф темаһын дауам иткәндә, тиҙҙән мәктәптәрҙә 9-сы һәм 11-се синыф уҡыусылары өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраясаҡ. Уны ойоштороу һәм үткәреүгә әҙерлек менән хакимиәттең Мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары Вадим Арыҫланов таныштырҙы. Һуңғы ҡыңғырау быйыл республика буйынса 22 майҙа үтәсәк. Байрам терроргә ҡаршы һәм санитар-профилактика саралары көсәйтелгән шарттарҙа ойошторолаясаҡ. БР Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, ата-әсәләр шәхесте раҫлаусы документы, балаларының документтары, шулай уҡ коронавирустан вакцинация эшләтеүҙе йәки организмда антиматдәләр булыуҙы раҫлаған документ нигеҙендә байрамға индереләсәк. Һуңғы ҡыңғырау көнөндә республика территорияһында тулыһынса алкоголь һатыу тыйыла. Шулай уҡ парктар һәм скверҙар был көндә айырыуса ентекле тикшереләсәк, йәғни байрам бары тик белем усағы территорияһында ғына буласаҡ.

Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылы сиктәрендә 17-22 майҙа Республика кардиология үҙәге ойошторған "Халыҡ сәләмәтлеге көнө" акцияһы үтә. Уның төп маҡсаты - йәмәғәтселектең иғтибарын йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларына йүнәлтеү, сәләмәтлек мәҙәниәтен формалаштырыу һәм сәләмәт тормошто пропагандалау. Был хаҡта хакимиәттән Халыҡтың сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров бәйән итте. Акция барышында Өфө ҡалаһының барлыҡ медицина ойошмаларында "Сәләмәтлек мәктәптәре" проекты эшләй, гәҙәттәгесә, "табип менән прогулка", башҡа бик күп саралар ойошторолаясаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# КИЛӘСӘК БИЛӘМӘҺЕ...



**Өфөлә йыл һайын "Киләсәк биләмәһе. Евразия йөрәгенән ҡараш" халыҡ-ара урбанистика форумы уҙғарыла башлай. Указға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.**

Документтан күренеүенсә, быйыл Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы тәҡдиме менән форум 26-27 августа "Бәләкәй ҡалалар һәм тарихи биләмәләр" Бөтә Рәсәй форумы менән бергә, ә 2022 йылдан 27 сентябрҙә ойошторола. Төп тема - "Ҡалаларҙың үҙгәрешен тиҙләтеү", тип белдерҙеләр ойоштороу комитетында. Форумда 2020-2021 йылдарҙа үҙгәреш кисергән ҡала мөхитен тикшереү планлаштырыла. Форумдың экспертары иҫәбендә - Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Марат Хөснуллин, Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирек Фәйзуллин, иҡтисади үҫеш министры Максим Решетников, фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков, мәҙәниәт министры Ольга Любимова, мәғариф министры Сергей Кравцов, Ростуризм етәксеһе Зарина Догузова, илдең Иҫәп палатаһы рәйесе Алексей Кудрин, ВЭБ рәйесе Игорь Шувалов, "ДОМ.РФ" йәмғиәтенең генераль директоры Виталий Мутко һәм башҡалар. Европа ҡалалары мэрҙары менән айырым секция планлаштырыла. Билдәле алып барыусылар Яна Чурикова, Наилә Аскер-Заде саҡырыла. Форум барышында "Лидер биләмәләр", "Үҙгәрештәр менән идара итеү", "Ҡалалар һәм таланттар", "Тотороҡло үҫеш һәм туризм" темалары тикшерелә.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МАШИНАЛЫЛАРҒА...

**Башҡортостанда транспорт һалымы буйынса яңы льготалар индерелде. Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары апрелдә пленар ултырышта тейешле закон ҡабул итте.**

Законда автомобиль хужаларының айырым категорияларына транспорт һалымы буйынса льготалар индерелгән йәки оҙайтылған. Атап әйткәндә, күп балалы ғаиләләр өсөн двигатель ҡеүәте 150-нән 200-гә тиклем ат көсөнә эйә булған автомобилдәргә транспорт һалымы 50 процентҡа кәметелгән. Ҡеүәте 150 ат көсөнә тиклемге автомобилдәр өсөн ишле ғаиләләр транспорт һалымы түләмәй. Газ-мотор яғыулығында эшләгән автомобиль хужалары өсөн транспорт һалымы буйынса льгота тағы өс йылға оҙайтыла. "Физик берәмектәр - газда йөрөгән автомобиль хужалары, газ-мотор яғыулығында эшләгән йөк машиналары булған ойошмалар, шулай уҡ газда йөрөгән автобустар менән даими маршруттарҙа пассажирҙар һәм багаж ташыу менән шөғөлләнгән ойошмалар транспорт һалымы суммаһынан 50 процент түләй, - тине парламент спикеры Константин Толкачев. - Өҫтөнлөктәр 2021-2023 йылдарға билдәләнә". Уның һүҙҙәренсә, ишле ғаиләләр өсөн льготалар социаль ярҙам сараһы булып тора, ә газда эшләгән автомобиль хужалары өсөн льгота республика автотранспортын экологик яғыулыҡҡа әүҙемерәк күсереүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. "Экологик яғыулыҡҡа күсеү - донъя тенденцияһы, - тип билдәләне Константин Толкачев. - Быны аңлатырға мөмкин: донъяла газ запасы күп, уның хаҡы күпкә түбәнерәк, ә газда эшләгән автомобилдәр бүлеп сығарған зарарлы матдәләр аҙыраҡ. Газ-мотор яғыулығындағы автопарктың өлөшөн арттырыу республикалағы экологик хәлде яҡшыртырға мөмкинлек бирер ине". Закон рәсми баҫылып сыҡҡан көндән көсөнә инә һәм 2021 йылдың 1 ғинуарынан һуң барлыҡҡа килгән хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә ҡағыла.

# ЭЛЕКТРОН ПАСПОРТ

**Башҡортостанда электрон паспорт 2023 йылда ғына индереләсәк. Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Дмитрий Чернышенко әйтеүенсә, яңы форматтағы документты Мәскәү халҡы 2021 йылдың 1 декабрендә тултыра башлаһа, төбәктәрҙә 2023 йылдың уртаһынан ғына мөмкин буласаҡ.**

Электрон паспорт граждандың фотоһы, исем-шәрифе һәм тыуған йылы яҙылған пластик карта төрөндә буласаҡ. Унда кешенең шәхси һәм биометрик, йәғни бармаҡ эҙе, йөҙө һәм йәшәгән урыны тураһында мәғлүмәт урынлаштырыла. Теләк буйынса смартфонға граждандың мобиль идентификаторы ҡушымтаһын ҡуйырға мөмкин. Уның ярҙамында почтанан посылка, авиа һәм тимер юлы билеты алырға була. Электрон паспортты фәҡәт теләк буйынса ғына алырға мөмкин. Был осраҡта ҡағыҙ паспорт ғәмәлдән сыға.

Чернышенко шулай уҡ 2020 йылдың 1 ғинуарынан инглән электрон хеҙмәт кенәгәһенең өҫтөнлөгө тураһында комментарий бирҙе. Мәҫәлән, унда хаталы йәки юридик яҡтан дөрөҫ булмаған мәғлүмәт яҙыу тыйыла, йәғни бөтә яҙыуҙар ҙа тик бер өлгөлә булырға тейеш. Ул дистанцияла эшкә урынлашыу процесын еңеләйтә, шулай уҡ пенсияға сығыуҙы ябайлаштыра - Пенсия фондына өҫтәмә документтар йөрөтөргә кәрәкмәйәсәк. Бөтә мәғлүмәт Рәсәй Пенсия фонды ресурстарында һаҡланасаҡ.

БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, 2021 йылдың 31 мартына төбәктә 42819 электрон хеҙмәт кенәгәһе тултырылған. 2020 йыл аҙағында был һан 27187 ине.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Миокард инфаркты

❖ Көн һайын алоэ йә каланхоэның 1-әр балғалаҡ һутын эсергә кәңәш ителә. Шулай уҡ юл япрағының (подорожник большой) көнөнә 10-12 тоҙланған йәки йәш япрағын ашау файҙалы.

❖ Миокард күҙәнәктәрен мумиёнан да яҡшыраҡ уңалдырған сара юҡтыр. Уны көнөнә 2 тапҡыр 0,15 грамм (шырпы башы дәүмәлдә) ашарға кәрәк. Ғәҙәттә, мумиёны тел аҫтына һалып имәләр. Уны шулай уҡ алоэ һуты менән бергә ҡабул итергә була. Был рәүешле ашағандан һуң дауалауы яҡшы.

❖ Ҡәһүә эсемлеге әҙерләп эсеү ҙә файҙалы. Бының өсөн 10 грамм татлы тамыр (корень солодки) һәм 20 грамм аҡтамыр (пырей ползучий) тамырҙарына ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға. Талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Һыуығансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Килеп сыҡҡан эсемлекҡә һөт йәки һөт өҫтөн ҡушырға. Бал өҫтәп, көнөнә бер тапҡыр эсергә.

## Күңел төшөнкөлөгө

❖ Күңел төшөнкөлөгөнән бер тигеҙ миҡдарҙа ромашка сәскәһен, бөтнөк үләне япрағын һәм валериана тамырын алырға. Йыйылманың 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5-10 минут тоторға һәм һөҙгәс теләгәнсә бал ҡушырға. Төнәтмәне иртәнсәк һәм кис йоҡлар алдынан эсергә. Сәй көсөргәнештән арындыра, әммә хәлһеҙләндермәй. Дауаланыу мөҙҙәте һәр кемдең үҙ ҡарамағында.

## Баш өйәнәге

❖ Баш өйәнәген (мигрень) дауалау өсөн бер ус мәтрүшкәгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәнә башты сайырға, шунан түшәккә ятып, кипкән мәтрүшкәнә еҫкәргә. Әйткәндәй, Швейцария тикшеренеүселәре артыҡ ябыҡ йәки үтә һимеҙлек тә баш өйәнәге тотоуҙың төп сәбәбе булыуы ихтималлығын асыҡлағандар. Шуға белгестәр буйға ҡарап, уртаса тән ауырлығын һаҡларға кәңәш итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Башҡорт теле республиканың дәүләт теле булараҡ уҡытырға тәҡдим ителә. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында ла Рәсәй республикаларында уларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу мөмкинлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынған.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Көнсығыш башҡорттары туҡыусылығы тураһында XX быуат башында Урал арьяғында С.И. Руденко һәм Д.Месарош йыйған әйберҙәр коллекцияһына ҡарап һүҙ йөрөтөргә була. 1959 һәм 1972 йылғы экспедициялар барышында Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты этнографтары Урал арьяғының көнсығышындағы туҡыусылыҡ тураһында өҫтәмә мәғлүмәттәр туплаған. Күтәреп һуғылған бороңғо таҫтамалдар һәм ашъяулыҡтар завод һәм ҡалаларға яҡын урынлашҡан ауылдарҙа йышыраҡ осраған. 1959 йылғы экспедициянан һуң Н.В. Бикбулатов былай тип яҙа: "Күтәреп һуғыу аҙ таралған булыуы, был алым менән эшләнгән әйберҙәр тәрә сағыштырмаса күп төгеллеге һәм һүрәте ҡатмарландырылмауы Урал арьяғы башҡорттарында күтәреп һуғыу алымы борондан ҡулланылмауы, ә һуңғы осорҙа төбәктең урыҫ халҡы йоғонтоһонда барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләй". Ул шулай уҡ ҡайһы бер күтәреп һуғыу традицияларының Урта Урал халҡы йоғонтоһонда таралыуы ихтималын да инҡар итмәй, сөнки XIX быуатта Урал арьяғы ҡатайҙары һәм әйләләр Урал артына күсенеп ултырғанға тиклем йәшәгән төбәктәре - Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышы менән бәйләнеш тотҡан.

Урал арьяғының көнсығышында биҙәкле туҡыусылыҡ йыш ҡына шаҡмаҡлы һәм буй һыҙатлы аласа әҙерләүҙән ғибәрәт булған. Күпселек осраҡта 36 һәм 42 сантиметр киңлектәге ҡылысылы урыҫ станоктарында һуҡҡандар. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында башлыса кизе-мамыҡ еп ҡулланылған, биҙәктәрен гәрез һәм нәҙек кенә йөн еп ярҙамында эшләгәндәр. Шаҡмаҡлы туҡыманы ашъяулыҡ өсөн (ике киҫәк бергә ҡушып тегелгән), икмәк һәм һауыт-һаба ябыуҙарын эшләгәндә ҡулланғандар. Ҡыҙыл ерлек (һирәк осраҡта аҡ та булған) аҡ, йәшел, күк, һары, ҡыҙғылт һары буй һыҙаттар менән ҙур шаҡмаҡтарға бүлгеләнгән. Был шаҡмаҡтар эсенә тура дүртмөйөш йәки ҡыя шаҡмаҡ фигуралар эшләнгән. Бер төҫтәге элементтар диагональ буйынса урынлашҡан.

Силәбе өлкәһе Мөхәмәтҡолой ауылынан (ВЭМ, кол. 79959) ерлеге ҡыҙыл булған шаҡмаҡ ашъяулыҡтың биҙәктәре аҡ, йәшел, күк, ҡыҙғылт һары төҫтәге йөн гәрездән эшләнгән. Был - шаҡмаҡтарҙы тултырып торған, йөҙө ентекле эшләнгән тура дүртмөйөштәр. Ике яҡтан "мөйөшлө йәйәләр" - ҡуҫҡарҙар менән ҡамалған, яҡтары дауамлы нескә ҡыя шаҡмаҡ төп һүрәт булып тора.



*Шаҡмаҡтары биҙәкле етен аласанан ашъяулыҡ (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы, Мөхәмәтҡолой ауылы). ВЭМ. XX быуат башы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*МӨҺИМ МӘСЬӘЛӘ*

# ТУҒАН ТЕЛҺЕҘ КЕШЕ...

## тамырһыҙ ағас һымаҡ

**(Башы 1-се биттә).**

**▸ Белем алыу теле тигәндә, нимә күҙ уңында тотола?**

- Белем алыу теле - уҡыусыларға белем һәм тәрбиә биреү процесы алып барылған тел, был осраҡта ул бер нисәү ҙә була ала. Беҙҙә уҡытыу Рәсәй Федерацияһының дәүләт телендә, йәғни рус телендә алып барыла, әммә уның менән бер рәттән, ата-әсәләрҙең (законлы вәкилдәрҙең) һайлауына ярашлы, балалар баҡсаһында, башланғыс һәм V-IX кластарҙа ҡайһы бер фәндәрҙе туған телдә уҡытырға мөмкин. Ата-әсәләрҙең (законлы вәкилдәрҙең) үтенесен ҡәнәғәтләндереү, мәктәп йәки балалар баҡсаһы тарафынан ғәмәлгә ашырыу өсөн түбәндәге шарттар кәрәк: дәрестә туған телдә алып барыу өсөн тейешле квалификацияһы эйә уҡытыусы йәки тәрбиәсе, туған телдә уҡытыласаҡ фәндәр буйынса әсбаптар һәм уҡыу кәрәк-яраҡтары.

Дәрестәрҙе билингвәль нигеҙҙә алып барыу мөмкинлеге лә бар. Был осраҡта күнекмәләрҙең күпмелер өлөшө - рус, күпмеһелер туған телдә эшләнә. Федераль дәүләт белем биреү стандарты уҡыу планының мотлаҡ өлөшөн тәшкил иткән фәндәрҙең йөкмәткеһен булдырғанда этномәҙәни, милли һәм төбәк үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға мөмкинлек бирә. Был бөтә фәндәргә ҡағыла, мәҫәлән, математика, сит ил теле булһынмы йәки музыка һәм рәсем дәрестәреме.

Бынан тыш, Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә, шул иҫәптән беҙҙең республикала ла, полилингвәль белем биреү ғәмәлгә ашырыла. Был йүнәлештең төп маҡсаты - бер нисә тел, мәҫәлән, туған тел, рус, сит ил телдәре ярҙамында уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән төбәктең, илдең, донъяның мәҙәни байлығы менән таныштырыу, уларҙы бер-беренә хөрмәт һәм милләтара татыулыҡ мөхитендә тәрбиәләү.

Туған телдә алып барылған уҡытыу һәм тәрбиә эшенең мөһимлеген бик яҡшы аңлайбыҙ. Туған тел - һинең халҡыңдың теле, ул һине алдағы быуындарың, улар тарафынан булдырылған рухи ҡиммәттәр менән бәйләй, этник һәм милли үҙенсәлек нигеҙе булып тора. Беҙҙәге уҡыу процесында "Туған тел", "Туған телдә әҙәби уҡыу" ("Туған әҙәбиәт") башланғыс, төп дөйөм һәм урта дөйөм белем биреү кимәлендә мотлаҡ уҡыу фәне булып һанала.

Дәүләт теленә килгәндә, был статус республикаларҙың Конституцияһы тарафынан билдәләнә. Башҡортостан Республикаһында башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле булып тора. Мәғариф тураһында федераль һәм республика законадарына ярашлы, Башҡортостан мәктәптәрендә башҡорт теле беҙҙең республиканың дәүләт теле булараҡ уҡытырға тәҡдим ителә. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында ла Рәсәй республикаларында уларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу мөмкинлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынған.

**▸ Ниндәй телде өйрәнеүгә ҡағылышлы ғаризалар ҡасан һәм нисек тапшырыла?**

- Белем биреү телен ирекле һайлау балиғ булмаған уҡыусыларҙың ата-әсәләренең (законлы вәкилдәренен) ғаризаларына ярашлы ғәмәлгә ашырыла. Был эш балалар баҡсаһына, мәктәпкә барғанда, V, X класҡа, бер белем усағынан икенсеһенә күскәндә башҡарыла. Балалар баҡсаһына барғанда бының "Балалар баҡсаһына электрон сират" мәғлүмәт сервисы аша һәм шәхсән эшләп була. Беҙҙәге мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары, буш урындар булған хәлдә, балаларҙы йыл дауамында ҡабул итә. Мәктәпкә барғанда йәки икенсе белем усағына күскәндә ғаризаны шәхсән, почта аша заказлы хат менән, мәктәптең электрон почтаһына хат ебәреп, дәүләт йәки муниципаль хеҙмәттәр сервисы аша тапшырырға мөмкин. Был эштең беренсе этабы 1 апрелдән 30 июнгә тиклем мәктәпкә ҡабул итеүгә беренсел йәки өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙаланған, шулай уҡ ошо белем усағына беркетелгән биләмәлә йәшәгән балалар өсөн үтә. Икенсе этап 6 июлдән 5 сентябргә тиклемге арауыҡта ойошторолоп, беркетелгән биләмәлә йәшәмәгән балаларға ҡағыла. Белем биреүҙең киләһе кимәленә күскән осраҡта ғариза дүртенсе сиректә үткән (апрель - июнь) ата-әсәләр йыйылышында шәхсән яҙыла.

**▸ Бөгөн башҡорт теле ҡайһы төбәктәрҙә өйрәнелә? Республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы был йәһәттән ниндәй ярҙам күрһәтә?**

- Республикабыҙ Рәсәй төбәктәрендәге белем биреү ойошмаларында туған башҡорт телен өйрәнеүгә һәр йәһәттән ярҙам күрһәтә. Уҡыу пландарына ярашлы, башҡорт телен Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Һамар, Һарытау өлкәләренең 45 мәктәбендә өйрәнәләр. Быйыл Рәсәйҙең алты төбәгендә туғыҙ башҡорт йәкшәмбе мәктәбен асыу буйынса проект тормошҡа ашырыла. Был башланғыс Башҡортостан Башлығының грантына лайыҡ булды. Әлеге төбәктәрҙәге уҡыу кабинеттары башҡорт теле, мәҙәниәте, башҡорт халҡының тарихы буйынса әсбаптар һәм стендтар менән тәьмин ителә, уларға ноутбуктар тапшырыла.

"Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһына ярашлы, йыл һайын Рәсәй төбәктәре мәктәптәренә башҡорт теле буйынса китаптар, уҡытыу һәм күргәҙмә әсбаптары һатып алына, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы белгеслеге буйынса бушлай һөнәри әҙерлек, әлеге көндә эшләп йөрөгән уҡытыусылар өсөн квалификация камиллаштырыу курстары ойоштоорола.

**Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА**
**әңгәмәләште.**

*ШАҢДАУ*

# "ҺЫУҺАҠ" БАБАЙҘЫ БЕҘ ҘӘ КҮРҘЕК...



**Минә 85 йәш, шулай булһа ла күп йылдар инде"Киске Өфө"нән айырыла алмайым: шәп гәзит! Әле бына уның 15-се һанында Хәлил Һөйөндөковтың "Һыуһаҡ" бабай кем ул, йәки Диуаналарға мәрхәмәтле булайыҡ!" тигән мәҡәләһен уҡығас, үҙемдең бала сағым иҫкә төшөп китте.**

Беҙҙең Ишбулды ауылында ла (Йылайыр районы) шул бабай йөрөнө бит ул. Минең иҫләүемсә, был Бөйөк Ватан һуғышы башланған йыл ҡыш булды. Беҙҙең ауыл бәләкәй генә ине, Йылайыр йылғаһы буйында ултыра, бер генә урамдан торҙо. Атайҙар, ағайҙар һуғышҡа китеп бөткөйне. Ауылда төп көс булып ике ҡарт та, үсмерҙәр генә ҡалды. Ана шул үсмерҙәрҙең икеүһе (уларға ни бары 10-11 йәш булғандыр) бер көн ике ҡанатлы бәләкәй ҡапҡаны саңаға бесән түшәп, шунда бер бабайҙы ултыртып, урам буйлап һөйрәп йөрөнөләр. Был бабай санала китеп барғанында бер туҡтамай "Һыуһаҡ, һыуһаҡ, һыуһаҡ!" тип ҡабатлап барҙы. Ашарыһа булған кешеләр уны өйҙәренә индереп, сәй эсереп сығарҙылар. Әсәйем мәрхүмә лә самауырын ҡуйып, бутҡа бешерҙе, ҡурмас ҡурҙы. Уның: "Сауап булыр, Хызыр Ильястыр был, бәлки",- тип һөйләнгәне иҫемдә. Бабайҙы һыйлап, малайҙарға ҡурмас биреп сығырҙы әсәйем.

Был, әйтеүемсә, һуғыш башланған ғына йыл булғандыр, тием, сөнки кешелә ризыҡ бар ине әле. Һуғыштың ҡалған йылдары аслыҡ көслә булды бит, ул саҡ кешелә, бәлки, был бабай ҡайғыһы ла булмаҫ ине. Бабайҙың кейеме хас та гәзиттә һүрәтләнгәнсә ине. Теүәтәйе өҫтөнән кейгән ҡама бүрегә бигерәк тә иҫтә ҡалған. Әсәйем һөйләүенсә, беҙҙә уны ҡорайыш тиҙәр, бындай бүректе хәлле кешеләр генә кейгән. Кәпәстең сите ҡиммәтле тире менән ҡаймаланған ине. Өҫтөндәге бишмәте иҫкерәк, йыртылған ерҙәре бар. Биленә кәзә ҡылынан һуғылған шарф быуған. Ә бына аяҡ кейеме иҫемдә ҡалмаған. "Һыуһаҡ" бабайҙы санала һөйрәп йөрөткән үсмерҙәр һуғыштан һуң әлеге көндә Рәми Ғарипов исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын, ә ул ваҡытта фронтовик балаларын уҡытҡан өлкә башҡорт интернат-мәктәбен тамамлап, институт бөтөрөп, диплом алғас, ауылыбыҙға эшкә ҡайттылар. Уларҙың береһе - Игликов Әмир Ғатау улы булып, икенсеһе Нәжерголов Айытбай Хөсәйен улы ине. Әмир ағай 30 йыл буйы совхоз директоры булып, ә Айытбай ағай тәүҙә уҡытыусы, аҙаҡ партком секретары булып эшләнеләр. Әлеге көндә улар, үкенескә күрә, беҙҙең менән юҡ инде... Теге саҡ "Һыуһаҡ" бабай уларға фатиха биргән: "Ҙурайғас, уҡып сығып, икегеҙ ҙә түрә булырһығыҙ", - тигән, тиҙәр. Әсәйемә лә бит рәхмәттәрен уҡып: "Оҙаҡ йәшәрһең, үҙ көсөң менән донъя көтөп торорһоң", - тигән һәм шулай булып сыҡты ла. "Һыуһаҡ" бабай әллә күрәҙәсе булдымы икән, тип уйлайым мин хәҙер йыш ҡына.

**Шәмсинур НӘЖЕРҒОЛОВА.**
**Йылайыр районы Юлдыбай ауылы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

13

# Ғаиләм-ҡәлғәм

22-28 май (һабанай)
2021 йыл
№21 (959)

МИН ШУЛАЙ УЙЛАЙЫМ!

# НИ СӘСҺӘҢ...

## шуны урырһың

**Әҙәм балаһы был донъяға гонаһһыҙ, бер саф йән эйәһе булып тыуа. Беренсе ауаз, тәү тапҡыр күҙ асыу - быны күргән ата-әсәнең, туған-тыумасаның ҡыуанысын һүҙ менән генә аңлатып бөтөп булмай. Әммә бала табыу - бер, уны тәрбиәләү - икенсе мәсьәлә.**



Һуңғы йылдарҙа йәш быуынды тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелһә лә, был мәсьәлә барыбер көнүҙәк булып ҡала килә. Аллаға шөкөр, үҙемдең балаларым үҫте, был тормошта үҙ юлын тапты. Мин ейән-ейәнсәрҙәремдең киләсәге өсөн борсолам. Беҙҙең быуын кешеләре өсөн ҡиммәт тип һаналған мәңгелек төшөнсәләр алмашынған ваҡытта йәштәрҙе нисек дөрөҫ тәрбиәләргә? Уларға нисек хеҙмәт һөйөргә, бер-береһенән көнләшмәҫкә өйрәтергә?

Көнләшеү тигәндән... Бөгөнгө йәш ғаиләләр балаларында үҙҙәре үк көнләшеү тойғоһо тәрбиәләй бит ул. Миҫалға балалар баҡсаһынан һуң сығарылыш кисәһенә әҙерлек ваҡытын ғына алайыҡ, сөнки һуңғы йылдарҙа ошо сараға айырыуса иғтибар бирелә башланы. Башҡаларҙан айырылмаһын тип, һәр ата-әсә һуңғы аҡсаһына йәки бурысҡа алып булһа ла, балаһын кейендерә, табын ойоштора.

Ошондай уҡ күренеш башланғыс кластан һуң да ҡабатлана. Урта мәктәпте тамамлағас ойошторолған сығарылыш кисәһе тураһында әйтеп тә тормайым. Ярай, етеш йәшәгән ғаиләләргә балаһына байрам ойоштороу бер ни ҙә тормайҙыр. Ә бына тулы булмаған йәки ауыл ерендә йәшәгән ғаиләләргә был ҡыйынғараҡ тура килә шул. Үҙе үҫтергән йәшелсәне йәки һөт һатып ҡына күпме генә аҡса эшләйһәндәр инде улар.

Сығарылыш кисәһенән һуң баланы ҡайҙа урынлаштырырға тип йүгерә башлайбыҙ. Юғары уҡыу йортона, әлбиттә. Башҡаларҙан ҡалышырға ярамай, тегенеке медҡа инде, минеке педҡа барһын... Коммерция бүлегенә булһа ла уҡытырға индерергә кәрәк. Балаларҙан, һинә ниндәй һөнәр оҡшай, кем булғың килә, тип һорау ҙа юҡ бит ул хәҙер. Уҡып бөткәс, эшләйме ул һөнәре буйынса, юҡмы, ул мөһим түгел. Иң мөһиме, юғары белемле булһын!..

Туй үткәреү ҙә үҙенә күрә ярыш сараһына әйерелде. Кредит алып булһа ла, теге йәки был кешенекенән артығыраҡ, матурыраҡ булһын тип үткәрә бит кеше хәҙер балаларының никах мәжлесен. Әҙерҙән-бәҙергә өйрәнгән йәштәр хәҙер беренсе ҡаршылыҡ тыуыу менән айырылышыу яғын ҡарай. Ата-әсәһе туйға алған бурысын да түләп бөтмәй, йәштәр айырылышып та өлгәрә...

Үҙемдең күҙ алдында әле яланаяҡ урам буйлап йүгереп йөрөгән, атай-әсәй эштә булыу сәбәпле, күпселек ҡартатай, ҡартәсәй тәрбиәһендә үҫкән бала сағым... Беҙ эшләп үҫтек, ғаиләлә лә, мәктәптә лә хеҙмәт тәрбиәһе ҙур булды. Хәҙерге һымаҡ, бер кем дә балаһын мәктәпкә етәктә йөрөтмәне, булһа, велосипедта елдерҙек, булмаһа, йәйәү. Ҡыҙыл галстуктарыбыҙҙы тағып, матур итеп йөрөй торғайныҡ. "Тимур һәм уның командаһы" девизы менән оло йәштәгеләргә ярҙам итергә йөрөнөк. Урамда нисә тапҡыр осраһа ла, һәр кеше менән иҫәнләшеп, сәләм биреп үтә инек. Ә хәҙерге балалар күҙгә ҡарап үтеп китһә китә, ә һаулыҡ һораша белмәй...

Мәктәптә дежур булыу, таҡта һөртөү, иҙән йыуыуҙың да бер ниндәй ауырлығы булманы. Ә хеҙмәт дәрестәре, ысын мәғәнәһендә, тормош һабағы булды. Субботниктарҙа ҡатнашыу ҙа һәр кем өсөн мотлаҡ ине. Уҡыуҙан ҡайтҡас, өйҙә лә картуф, сөгөлдөр утау кеүек әллә нисә төр эш көтә ине. Башҡаларҙан артта ҡалмаҫ өсөн район һабантуйына ла бармай, утау утап ҡала инек. Колхоз эшенә лә йөрөнөк. Мин үҙем дөйөм хужалыҡ бесәненә 5-се кластан һуң сыҡтым. Минә ғүмер биреп, тормошҡа дөрөҫ ҡараш тәрбиәләгән өсөн атай-әсәйемә, уҡытыусыларыма, үҙем йәшәгән заманға рәхмәтлемен...

Әйе, хәҙерге заманда балаларға тәрбиә биреү ҡатмарлашты. Һәр уҡыусының ҡулында телефон, уҡытыусының әйткәне оҡшамаһа, видеоға төшөрөп, таратырға ла мөмкиндәр. Педагог ҡына түгел, ата-әсә лә балаһын үҙе теләгәнсә тәрбиәләй алмай хәҙер. Миҫалға республиканың көньяҡ районлары-ның береһендә биш-алты йыл тирәһе элек булған ваҡиғаны килтергем килә. Атай кеше, ҡырҡты үткән уҙаман, төҙөлөш ойошмаһында алдынғы водитель булып эшләй, әсәй - дауахана хеҙмәткәре. Ситтән ҡараһаң, бына тигән ғаилә кеүек ине. Етенселәме-һигеҙенселәме уҡып йөрөгән улдарының насар юлға баҫыуы уларҙың тормошон селпәрәмә килтерҙе. Бер төндә үҫмер төнгө 2-ләрҙә иҫерепме-тилерепме өйөнә ҡайта ла, атай-әсәйенең йоҡо бүлмәһенә инеп, ашарға таптыра. Атаһы уны тәүҙә тынысландырырға, йоҡларға һалырға тырыша, тик улы ҡоторғандан-ҡотора. Атаһы түҙмәй, үҫмерҙең сикәһенә усы менән сәпәй, унаһы караватҡа йығыла ла йоҡлап китә. Әсәй кеше иһә, ниңә балаға һуҡтың тип, ыҙғыш ҡуптара. Иртәгәһенә ҡатын улы менән хоҡуҡ һаҡлау органдарына килә, ғариза яҙа. Һөҙөмтәлә - атай шартлы рәүештә өс йылға хөкөм ителә. Үҫмер подвалдарҙа йөрөүен, өйгә һуң ҡайтыуын дауам итә, тик атаһы ғына уға ҡаршы бер нәмә лә әйтә алмай, сөнки өс административ протоколға эләкһә, был осраҡта ғаиләлә тауыш сығарһа, өс йылға төрмәгә ултыртыуҙары билдәле. Ир түҙмәне, айырылышты, ғаилә тарҡалды. Теге үҫмер ҙә "кеше" булманы... Шуның өсөн атай-әсәйгә тәрбиә эшендә берҙәм булырға кәрәк, ә үрҙә атап кителгән ғаиләләгә ҡыҫала, суртан һәм аҡҡош кеүек түгел.

Балаларҙы артыҡ йәлләү ҙа ярамай. Үҙ иркенә ҡуйыу ҙа яҡшыға илтмәй. "Ҡыҙың булһа, ҡырҡ ерҙән тый" тигән бик аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Улды ла тыйырға кәрәк, үҙ ихтыярына ҡуйырға ярамай.

Күреп тораһығыҙ: ил буйынса күпме оло кеше ҡарттар йортонда көн күрә. Ә бит күптәренең балалары иҫән-һау, етеш тормошта йәшәй. Ә күпме бала етемдәр йортонда, уларҙың да күбеһенең ата-әсәһе имен-аман. Тормошобоҙҙон ошо кире күренешенең сәбәбе күп осраҡта эскелек менән бәйле. Эскелек арҡаһында балалар зәғиф тыуа, ғаиләләр тарҡала, енәйәт, үҙ- үҙенә ҡул һалыу, авария, башҡа төрлө фажиғәле үлемдәр һаны арта. Күп ауырыуҙарға ла спиртлы эсемлек сәбәпле булыуы билдәле.

Бер-ике йыл элек республикала эскелеккә ҡаршы көрәш йәшерен алкоголле эсемлектәрҙе һатыусыларҙы асыҡлауҙан, уларҙы яуаплылыҡҡа тарттырыуҙан башланғайны. Көмөшкә һатыусы беренсе тапҡыр эләкһә - 30 мең, икенсегә тотолһа - енәйәт эше ҡуҙғатырға, тигән яуаплылыҡ саралары бөгөн ҡағыҙҙа ғына ҡалған һымаҡ. Әле булһа көмөшкә һатып тотолғандар 2-3 мең штраф түләп ҡотола. Һатҡан кеше һатты һәм һатасаҡ, сөнки был енел юл менән байыуҙың иң таралған ысулы. Өйҙән һыра, араҡы һатыуҙы тыйған закондар эшләмәй. Йыш ҡына ҡулына һыра шешәһе тотоп йөрөгән үҫмерҙәрҙе күрергә тура килә. Һыранан-араҡыға, көмөшкәгә күсеүгә ярты аҙым. Үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙың да күбеһе иҫеректәр бит.

Ниңә яҙам мин быларҙы? Өлкәндәр, беҙҙең быуын иҫән саҡта йәштәрҙе, балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләргә өндәргә ине ниәтем. Ҡолаҡ һалыусылар булырмы икән?

**Мират РЫҪҠОЛОВ.**
**Мәләүез районы.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ



# БАЛАЛАРҘЫ...

## сәләмәт саҡтарында яратығыҙ

**Ҡайһы бер ғаиләләрҙә йыш ҡына шундай күренеш күҙәтелә: балалары ауырый башлаһа, ата-әсәләре уларҙы ҡулдарынан төшөрмәй, өрмәгән ергә ултыртмай, бөтә теләктәрен үтәргә тырышалар. Ә инде һауыҡҡас бөтәһе лә кире үҙ урынына ҡайта: ҡабаттан үҙҙәренең көндәлек эштәренә сумып, балаларына бер йылы һүҙ ҙә әйтергә ваҡыт тапмайҙар. Иғтибар итегеҙ: балаларҙы ауырыған ваҡытта яраталар, сәләмәт ваҡыттарында - юҡ. Был дөрөҫ тәрбиәме?**

- Ауырыған ваҡытта балаң янында булаһың инде... Ә башҡа ваҡытта улар менән сөсөлдәшеп ултырырға беҙҙең ниндәй ваҡыт булһын, ти? Беҙ эшләмәһәк, уларҙы кем кейендерә лә, кем ашата? Шулай уҡ беҙҙең дә ял иткебеҙ килә...- тип ебәрә ундай ата-әсәләр.

Дөрөҫ, хәҙер шундай заманда йәшәйбеҙ: әгәр ҡайҙалыр эшләмәһәң, бөтә ғаиләң ас ултырырға мөмкин. Ләкин шуны ла онотorға ярамай: балаларҙың көн һайын ашағыһы, уйнағыһы килгән һымаҡ, ата-әсәләренән дә көн һайын һөйөлгәләре килә. Улай ғына түгел, яратылыу теләге - йәш балаларҙа өҫтөнлөк иткән тәбиғи ихтыяждарҙың береһе ул. Икенсе төрлө әйткәндә, йәш үҫентеләргә ҡояш йылыһы нисек кәрәк булһа, бәләкәй балаларға ла ата-әсә мөхәббәте шул тиклем үк кәрәк.

Әгәр баланы ауырыған ваҡытта ғына яратһаң, нимә була һуң? Әлбиттә, шул ваҡытта ғына баланың ата-әсә мөхәббәтенә булған ихтыяжы ҡәнәғәтләндерелә. Артабан был күренеш йыш ҡабатлана башлаһа, ул шартлы рефлексҡа әүерелеп китәсәк: баланың яратылғыһы килә икән - ауырый башлай. Башта ауырыуҙары еңел үтеп китер. Ләкин күпмелер ваҡыттан һуң улар тәрәнгә тамыр ебәрә башлар. Һәм балалар ысынлап та ауырыуға әйләнәсәк. Хатта ғүмерҙәренә етерлек ниндәйҙер хроник ауырыуҙар менән дә сирләп китергә мөмкиндәр.

Шуға, балаларҙы сәләмәт ваҡыттарында яратырға кәрәк. Ауырымаған саҡтарында ата-әсәләренең мөхәббәтен тойһон улар. Ул илаһи тойғо менән көн һайын "ҡойонһондар". Шулай уҡ арҡаларынан тупылдатып һөйгән ваҡытта, "минең улым имәндәй ныҡ бит ул" йәки "ҡалай сәләмәт булып үҫеп килә", тигәнерәк һүҙҙәр әйтеп ебәрһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы.

Ә инде ауырып китәләр икән, әлбиттә, уларҙы дауаларға, тәрбиәләргә, күҙәтеп торорға кәрәк. Тик мөхәббәтте һиҙҙерергә ярамай, хис-тойғоларҙы ҡыйын булһа ла йәшереп торогоҙ. Иң мөһиме: балаларҙың аңында, сәләмәт кешеләр генә мөхәббәткә лайыҡ булалар икән, тигән ҡараш формалашырға тейеш. Бына шул ваҡытта төрлө ауырыуҙарға ҡаршы балаларҙа физик кимәлдә генә түгел, ә аң һәм психологик кимәлдә лә иммунитет барлыҡҡа килер. Йәғни, мөхәббәт йылыһы теләгән йәне төрлө яҡлап тәнен һаҡларға тырышасаҡ. Шуға бик һирәк ауырыйҙар. Сирләп китһәләр ҙә тиҙ генә аяҡҡа баҫырҙар...

Шулай итеп мәҡәләмдең аҙағында тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: балаларҙы сәләмәт саҡтарында йышыраҡ яратырға тырышығыҙ...

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**уҡытыусы.**

✓ *Йыш ҡына беҙ балаларҙы түгел, ә киреһенсә, улар беҙҙе тәрбиәләй икән дә баһа, тигән фекергә киләбеҙ. Мәҫәләң, Ильяс улыбыҙҙың ҡаҙаныштары, уңыштары менән беҙ ҙә үҫәбеҙ, камиллашабыҙ, яҡшыраҡ булырға тырышабыҙ.*

# БЕҘ ГЕНӘ БАЛАЛАРҘЫ

## балалар ҙа беҙҙе тәрбиәләй

**Донъяла глобалләшеү процесы әүҙем барыуына ҡарамаҫтан, үҙенең милли бөтөнлөгөн, милли асылын һәм милли матурлығын ҡурсыған, хәстәрләгән кешеләр бик күп арабыҙҙа. Шөкөр, башҡортлоғон, башҡорт рухын һаҡлаған йәш ғаиләләр ишәйеүе айырыуса ҡыуаныслы. Өфө районы Шамонино ауылында йәшәгән Лилиә һәм Илнур МӘХМҮТОВТАР - шундайҙарҙың береһе. Мәғлүм булыуынса, улар 1 март - Башҡорт ғаиләһе көнөндә Стәрлетамаҡта ойошторолған "Етегән" байрамында "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсының йомғаҡлау этабында ҡатнашып, Башҡортостандың татыу ғаиләләре сафын тулыландырҙы. Күптән түгел улар менән яҡындан танышырға, редакцияға саҡырып әңгәмәләшергә, уларҙың бәхет серҙәре менән уртаҡлашырға насип булды.**

**Һәр йыйлғаның үҙенең инеше, һәр бөйөк эштең башланғысы була. Һеҙҙең ғаиләнең ойошоу тарихы ла барҙыр. Һеҙ ҡасан бер-берегеҙҙе тап иттегеҙ һәм иң тәүҙә икенсе яртығыҙҙың ниндәй ҡылығы әсир итте, ниндәй сифаты иҫтә ҡалды?**

**Илнур:** Башҡорт дәүләт университетында Лилиә - юридик, мин математика факультетында уҡып йөрөгәндә өсөнсө курста таныштыҡ. Дөрөҫөрәге, беҙҙе таныштырҙылар. Был көн бөгөнгөләй иҫтә. Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығында эшләп алғайным. Шунда бүлектең фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәге директоры урынбаҫары Әлфиә Тимербай ҡыҙы һәләтле балалар өсөн Ғафури районында ойошторолған "Йәйләү" лагерында эшләргә тәҡдим итте. Мин бер һүҙһеҙ ризалаштым. Вожатыйҙар араһында буласаҡ кәләшемдең әхирәте Эмилия ла бар ине. Ул шунда уҡ үҙенең дуҫ ҡыҙы менән таныштырыу тураһында ҡолаҡҡа шыбырҙағайны. "Йәйләү"ҙән ҡайтҡас, вожатыйҙар менән аралашыу дауам итте, бергәләп төрлө сараларға, башҡорт дискотекаларына йөрөнөк. Лилиә менән дә "Сәләм, студент!" дискотекаһында беренсе тапҡыр осраштыҡ. Иң беренсе, әлбиттә, матурлығы, баҫалҡылығы иғтибарҙы йүлап алды. Осоп-ҡунып йөрөгән ҡыҙҙарҙан ныҡ айырыла ине ул.

**Лилиә:** Минең иғтибарҙы, тәү сиратта, Илнурҙың тыйнаҡлығы, тәртиплелеге йәлеп итте. Ыҫпай ғына кейенеп йөрөй торғайны. Бер ваҡытта ла урамда футболка, трико менән күрмәнем уны. Матур итеп үтекләнгән күлдәк-салбарҙа йөрөүе, ипле, эргә-тирәһендәгеләргә ихтирамлы булыуы оҡшаны. Шулай дуҫлашып киттек, тик ҡыҙ-егет булып түгел, ә дуҫтарса. Башҡорт йәштәре өсөн ойошторолған сараларға бергә йөрөнөк.

**Һеҙ быйыл республиканың иң матур ғаиләләренең береһе булып танылдығыҙ. Ир һәм ҡатын булырға, ғүмүмән, ғаилә тигән үҙ дәүләтегеҙҙе нисек ҡорорға кемдән өйрәндегеҙ? Үҙегеҙҙең атай-әсәй өлгөһөмө, әллә китаптарҙан уҡып белдегеҙме?**

**Илнур:** Лилиә юғары уҡыу йортонда магистратураны 2009 йылда, ә мин 2010 йылда тамамланыҡ. Икебеҙ ҙә бер йыл эшләп, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡас ҡына өйләнешергә, ғаилә ҡорорға ҡарар иттек. Ҡайһы бер йәштәр кеүек, бергә йәшәп, берберебеҙҙең ата-әсәләренә барып, ҡунаҡ булып йөрөү күренеше лә булманы беҙҙең. Мин Күгәрсен районынан, Лилиә - Әбйәлил районы ҡыҙы. Никах уҡытырға барғанда буласаҡ ҡайнымды, ҡәйнәмде, уларҙың йортон, ғаиләһенен беренсе тапҡыр күрҙем. Ата-әсәйҙәрҙең ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары менән танышыуы ла, никах тураһында һөйләшеүе лә тик телефон аша булды.

**Лилиә:** Илнур миңә 2011 йылдың 31 октябрендә тәҡдим яһаны. "Икенсе йыл кәбисә йылы, өйләнергә ярамай, шуға күрә быйыл ғаилә ҡорабыҙ", - тине. һөйләштек-килештек тә, атаәсәйҙәргә хәбәр иттек, улар туған-тыумасаны йәлеп итеп, никах мәжлесенә әҙерләнә башланы, халҡыбыҙға ғына хас туй йолаларын барланы. Йола тотҡан - бәхетле булған, тигән әйтем бар бит башҡорттоң, унан тайпылырға ярамай, ике яҡтан да ошо хәкиҡәтте белгән, уға таянған кешеләр ине атай-әсәйҙәребеҙ. Шуға күрә лә бар традицияларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үтәргә тырыштылар. Ара йыраҡ булғас, ҡыҙ һоратыу йәки ҡыҙҙың ҡулын һорап килеү йолаһы үтәлмәгәс, уны никах көнөндә атҡарырға булдыҡ.

Иң тәүҙә ҡулына гөлләмәләр тотоп, Илнур инде. Никахҡа әҙерләшергә тип минең туғандарым йүгереп йөрөй. Әсәйемә оҡшап торған ике һылыуы ла шунда. Илнур сәскә гөлләмәһен тотоп, тәүҙә бер апайыма, шунан икенсеһенә килә. Шунан ғына әсәйемдә абайлай һәм ҡулындағы сәскәһен һоноп, атайым менән әсәйемдең ризалығын ала.

**Илнур:** Туй ике яҡта ла булды. Ноябрҙә никах уҡыттыҡ, 10 декабрҙә - ҡыҙ яғында, 17-һендә беҙҙә байрам иттек. Бер автобус булып тәүҙә Күгәрсендәр, аҙаҡ әбйәлилдәр килде. Шулай туйыбыҙ боронғоса бер аҙнаға һуҙылды. Бер урында ғына үткәреү тураһында уйламанылар ҙа. Ололар ҡыҙ йәшереү, килен төшөрөү, йыртыш йыртыу, һыу юлын күрһәтеү кеүек бар йоланы башҡарып, туйҙы ике яҡта ла үткәрергә теләне. Был туйҙы әле һаман булһа күңелле ваҡиға итеп һөйләйҙәр. Ике яҡтың да ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, ҡоҙа-ҡоҙасалары шул тиклем дуҫлашты, хәҙер яҡын туғандар кеүек аралашып йәшәйҙәр. Шулай итеп, ҙур ғаилә барлыҡҡа килде.

**Һеҙ икегеҙ ҙә ауыл балаһы, ҡала ерендә йәшәргә хәл иткәнһегеҙ. Был мәсьәләлә ниндәй ауырлыҡтар булды, яраҡлашыу нисек үтте?**

**Лилиә:** Туйға төшкән аҡсаны әләф-тәләфләмәй генә баш ҡалаға килгәс тә үҙебеҙҙең мөйөшөбөҙҙө булдырыу хаҡында уйлай башланыҡ. Матди хәлебеҙ бер бүлмәле фатирға ғына етә, ә беҙ ҙурыраҡ майҙан тураһында хыялланабыҙ. Шунан ҡалаға яҡын ауылдарҙан йорт эҙләй башланыҡ. Бер көндө Шамонинола йәшәгән хеҙмәттәшем үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ауылды бик оҡшаттыҡ. Йорт һатылмайһы икән тип, иғландарҙы ҡарай башланыҡ һәм, бәхетебеҙгә, тиҙҙән аҡсабыҙ еткән һәм иң мөһиме, икебеҙҙең дә күңеленә оҡшаған йортҡа юлыҡтыҡ. 2012 йылдың майында күсеп, күптән ошонда йәшәгән кешеләр кеүек тырышып донъя көттөк тә киттек. Баҡса ултырттыҡ. Икебеҙ ҙә шуны күреп үҫтек бит инде: атай менән әсәйем дә, ҡайным менән ҡәйнәм дә бик эшсән кешеләр, ғаилә, балалар тип өҙөлөп торалар. Беҙгә лә шулай кәрәк тип, йәшәнек тә киттек.

**Үҙегеҙҙең балаларҙы тәрбиәләү алымдары хаҡында һөйләһәгеҙ ине. Һеҙҙең ғаиләлә бигерәк тә шәжәрәгә, милли аш-һыуға, башҡортса йәшәү рәүешенә игтибар биреләүен шәйләнек. Балалар һеҙҙең тәрбиә алымдарына ылығамы?**

**Илнур:** Беҙ, әлбиттә, иң беренсе, балаларыбыҙҙың сәләмәт, бәхетле, тәүфиҡлы булып үҫеүен теләйбеҙ. Шулай уҡ уларҙың башҡорт булып үҫеүе, үҙенең милләте, тарихы, мәҙәниәтен белеүе, ғорурланыуы ла беҙҙең өсөн бик мөһим. Шуның өсөн уларға тейешле мөхит булдырырға, уңайлы шарттар тыуҙырырға, ҡыҙыҡһыныуҙарын дәртләндерергә тырышабыҙ.

Оло улыбыҙ Ильяс Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында 1-се класта уҡый. Уртансыбыҙ Арыҫланға 5, ҡыҙыбыҙ Асылгә 2 йәш тулды. Балаларыбыҙҙың башҡортса һөйләшеүенә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Халҡыбыҙ йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәү рәүешен һендерергә, илһөйәрлек хисен бирергә тырышабыҙ, сөнки ошо ватансылыҡ, патриотик тойғоһоҙ булмаһа, кеше ни тиклем уңышлы булмаһын, бәхет хисен тулыһынса татымаясаҡ. Уға барыбер нимәлер етмәгән кеүек тойоласаҡ.

**Лилиә:** Бер ата-әсәнән тыуһа ла, бер үк мөнәсәбәт, тәрбиә күрһә лә, балалар бер-береһенән бик айырыла икән. Бына, мәҫәләң, Арыҫлан бар йәһәттән ағаһын ҡабатларға, уға оҡшарға тырышһа ла, бөтөнләй икенсе бала. Ҡылыҡ-фиғеле лә, яратҡан шөғөлдәре лә, ҡыҙыҡһыныуҙары ла, донъяны танып-белеүе лә башҡаса. Ильяс бәләкәйҙән тик башҡортса һөйләшә, башҡорт донъяһы менән ҡыҙыҡһыныуы ҙур булды. Ҡустыһы ла

**Илнур:** Нәҫел-нәсәбебеҙ менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башлауыбыҙ ҙа Ильяс улыбыҙ менән бәйле булды. Балалар баҡсаһына йөрөгәндә тәрбиәсеһе "Шәжәрә" конкурсында ҡатнашырға тәҡдим итте. Ҡартатайымдың аянысла яҙмышы хаҡында үҙем белгәндә һөйләнем. Хәлле донъя көткән ғаиләгә ҡулаҡ мөһөрө тағып, ағалы-ҡустылы ҡартатайымдың дүрт туғанын агас ҡырҡырға ебәрәләр. Унан ҡартатайым ғына иҫән ҡайта. Хәләл көсө менән тапҡан бөтә мөлкәте тартып алынып, бер нәмәһеҙ ҡайтһа ла, ауырлыҡтарҙы, заман һынауҙарын үткәндә күңеле ҡатмаған, ҡасан да булһа тормошо яҡшырыуына, бәхетле булыуына өмөтләнеп, ең һыҙғанып, буш урында донъя көтә башлауы тураһында һөйләүем улымды нык тетрәндерҙе. Ул артабан ҡыҙыҡһына башланы, уның менән бергә беҙ ҙә эҙләндек, өйрәндек, тикшерҙек.

**Лилиә:** Балаға ҡағылышлы нәмәләргә беҙ икебеҙ ҙә бик яуаплы ҡарайбыҙ. Балаларҙың береһе балалар баҡсаһынан йәки мәктәптән ҡайтып, теге йәки был сара үткәрелә, тип әйтһә, шунда уҡ улдарыбыҙҙың йөҙөнә ҡыҙыҡлыҡ килмәһен тип, әҙерләнә башлайбыҙ. "Ғаиләм - ҡәлғәм" конкурсында ҡатнашырға тәҡдим иткәстәре, сараның положениеһы менән танышып, "Ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлаусы" номинацияһын һайлап, әҙерләнергә тотондоҡ. Был тема беҙгә бик яҡын. Бында ғаилә тарихын да, шәжәрәне лә, башҡорт милли кухняһын да индерергә була. Ә былар беҙҙең балалар өсөн береһе лә ят түгел: ете быуын олатай-өләсәйҙәрен беләләр, көн дә тиерлек бишбармаҡ ашайҙар, балалар баҡсаһына йөрөгәнсе тик башҡортса ғына һөйләшә ине, хәҙер урыҫса ла һупалай. Үҙебеҙ ҙә аңламайыраҡ ҡалдыҡ. Балалар баҡсаһы тәрбиәһе инде.

Тәрбиә тураһында уйланғанда йыш ҡына беҙ балаларҙы түгел, ә киреһенсә, улар беҙҙе тәрбиәләй икән дә баһа, тигән фекергә киләбеҙ. Мәҫәләң, Ильяс улыбыҙҙың ҡаҙаныштары, уңыштары менән беҙ ҙә үҫәбеҙ, камиллашабыҙ, яҡшыраҡ булырға тырышабыҙ. Ул бик үҙенсәлекле, оло аҡыллы малай. Шулай, бер көн киске аш ашап ултырғанда ул беҙгә: "Әсәй, атай, әйҙәгеҙ, кискеһен китап уҡыу традицияһын булдырайыҡ", - тип тәҡдим итте. Шул көндән алып беҙҙең ғаиләлә йоҡларға ятыр алдынан китап уҡыу йолаһы барлыҡҡа килде. Йышыраҡ ул уҡый, беҙ тыңлайбыҙ. Баланың уҡыу мәҙәниәте лә, тиҙлеге лә үҫә барыуына ҡыуанабыҙ ғына. Бала тәрбиәләүҙә ниндәй ҙә булһа әҙер формулабыҙ юҡ, хәл-ваҡиғаға ҡарап, беҙ уларҙы йә улар беҙҙе тәрбиәләй.



# ТҮГЕЛ,

## икән дә…

сәк-сәк, ҡымыҙ, буҙа кеүек башҡорт халҡының традицион ризыҡтары, эсемлектәрен дә беләләр.

Ғөмүмән, көндәлек тормошта йәшәү рәүешебеҙ, үҙ өлгөбөҙ нигеҙендә башҡортлоҡто бирергә тырышабыҙ. Миҫалға башҡорт халҡының орнаменты тураһында аңлатыуыбыҙҙы ғына әйтеп үткем килә. Бөтәбеҙгә лә орнамент төшөрөлгән футболка һатып алғайныҡ, Ильяс улыбыҙ уның нимә аңлатҡанын һораны. Уға борон һәр ырыуҙың үҙенең биҙәге, тамғаһы, ораны булыуы хаҡында һөйләп бирҙек. Хәҙер ул музейға барһа, уларҙың нимә икәнлеген белмәй аптырап йөрөмәй.

**Илнур:** "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәр конкурсына әҙерләнгәндә халҡыбыҙҙың мәшһүр ҡобайырының мәғәнәһен яңынан астым, тиһәм, арттырыу булмаҫ, моғайын. Ильяҫҡа, әлбиттә, ятлау еңел генә бирелмәне. Уның һәр һүҙен, юлын урыҫсаға тәржемә итеп, аңлатҡас ҡына, көнөнә өсәр-дүртәр юл ятланы. Ул дүрт йәштән тхэквондо менән шөғөлләнә. Ағаһына ныҡ оҡшарға тырышҡас, Арыҫланды ла ошо секцияға биргәйнек, өс күнекмәнән һуң йөрөүҙән баш тартты. Теләмәгәс, уны көсләп йөрөтөүҙән ни файҙа. Бала булһа ла, ул, тәү сиратта, кеше бит. Үҙенең кисерештәре, донъяға, эргә-тирәһенә ҡарашы булған бәләкәй генә кеше. Күңел ятмаған эш булһа, ни тиклем генә тырышып эшләһәң дә, фәтүә булмаған кеүек, бала ла күңеле ятҡан нәмә менән шөғөлләнергә тейеш. Ә бына оҡшағас, футболға ҙур теләк менән йөрөй. Бынан тыш, икеһе лә Алина һәм Роберт Хәмиҙуллиндар етәкселегендәге Шамонино ауылындағы "Дарман" бейеү ансамблендә шөғөлләнә, өҫтәмә инглиз телен өйрәнәләр. Ильяс йәнә шашка менән дә ҡыҙыҡһына.

▸ **Төрлө кимәлдәге ғаилә конкурстарына сығырға ла форсат табаһығыҙ. Шулар тураһында ла һөйләгеҙ әле. Был осраҡта кем кемде өгөтләй, әллә берҙәм хәл итәһегеҙме?**

**Лилиә:** Күберәк мин ҡотортам, шикелле. Илнур тыңлай, аҙаҡ ойоштороуға бөтә көсөн, тырышлығын һала. Улай тиһәң, ҡатнашҡан бөтә конкурстарҙы ла тиерлек балаларҙың тәрбиәселәре, уҡытыусылары тәҡдим итте. "Ғаиләм - ҡәлғәм" конкурсында тәүҙә мәктәп этабында, аҙаҡ Өфө ҡалаһы һәм республика кимәлендә Стәрлетамаҡта үткәрелгән "Етегән" байрамында ҡатнаштыҡ. Был сараға алдан етди әҙерләндек. Үҙебеҙ, шөғөлөбөҙ, балалар тәрбиәләүгә ҡарашыбыҙ тураһында видеофильм төшөрҙөк. Ғаилә, мәхәббәт, тоғролоҡ тураһында йырҙар, матур шиғырҙар өйрәндек. Унда ҡатнашҡан бөтә ғаиләләр ҙә бик матур, талантлы, татыу ине. Һоҡланып ҡараныҡ. Үҙҙәренең олатай-өләсәйҙәренең, атай-әсәйҙәренең һоҡланғыс татыу ғаиләләре тураһында ғорурланып һөйләнеләр. Ошондай тәрбиәүи саралар хәҙерге заман балалары өсөн бик тә фәһемле һәм ҙур әһәмиәткә эйә. Төрлө райондарҙан килгән иң матур ғаиләләр менән танышыу, дуҫлашыу. Әле булһа аралашып торабыҙ. Ҡатнашыуын ҡатнаштыҡ, әммә беренсе урын булыр, ҙур бүләккә эйә булырбыҙ, тигән уй башыбыҙға ла инеп сыҡманы. Тәүҙә уҡытыусының, улыбыҙҙың һүҙен йыҡмайыҡ, йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәйек, тип, мәктәп кимәлендәге сараға әҙерләндек. Унда еңеп сыҡҡас, Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайы ойошторған баш ҡала кимәлендәге конкурста лә һынатмаҫҡа тырыштыҡ һәм төп призға лайыҡ булдыҡ. Республика кимәлендә ҡатнашырға саҡырғас, баш тартманыҡ инде. Әле "Йыл ғаиләһе" бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашырға ла баҙнат итеп торабыҙ, видеоролик төшөрөп ебәрҙек.

▸ **Үҙегеҙҙең хеҙмәт иткән өлкә тураһында ла һөйләп китһәгеҙ ине. Ошондай матур ғаилә аҫрағанда, балалар үҫтергәндә матди хәл дә арыу булырға тейеш бит инде. Бөгөнгө заманда балаға өҫтәмә белем биреүгә лә, шулай уҡ ял итеүгә лә матди сығымдар кәрәк. Был мәсьәлә нисек хәл ителә?**

**Илнур:** Лилиә - Башҡортостан Республикаһы Ветеринария идараһында юрист булып эшләп, декрет ялына сыҡты. Мин - Үҙәк һайлау комиссияһы белгесе. Әлбиттә, ике яҡтан да атай-әсәйҙәр ныҡ ярҙам итә. Ағас тамыры менән көслө булһа, кеше туғандары менән ҡеүәтле, тиҙәр бит. Тамырың ни тиклем тәрән булһа, йәшәү көсөң дә шул тиклем ныҡлы була. Туғандар ярҙамы тәрән тамырҙан килгән рух кеүек. Бар көстән дә өҫтөнөрәк. Ите-майы, ҡорото, ҡымыҙы, йәшелсәһе, емеш-еләге тигәндәй - барыһы ла килеп тора.

**Лилиә:** Ғаилә ялын, балалар байрамдарын ойоштороуға ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Туғандарҙы, дуҫтарҙы саҡырабыҙ. Тематик тыуған көндәр үткәрәбеҙ, был йәһәттән балалар үҙҙәре бик әүҙем, улар идея бирә, беҙ бойомға ашырабыҙ. Республиканың матур урындары буйлап сәйәхәт итергә яратабыҙ. Бөтә Башҡортостанды урап сығып барабыҙ, тиһәң дә була. Миәкә районында Нарыҫтауҙа, Күгәрсендә Мораҙым тарлауығында, Әйәрлетауҙа, Баймаҡта Талҡаҫта, Әбйәлилдә Яҡтыкүлдә, шулай уҡ Белоретта, Ғафуриҙа булдыҡ. Тыуған республикабыҙ буйлап йөрөү балаларға ла бик оҡшай.

▸ **Киләсәккә хыялдар тураһында ла һөйләшеп үтәйек. Балаларҙың ниндәй һөнәр һайлауын теләйһегеҙ? Ниндәйерәк килендәр, кейәүҙәр тураһында хыялланаһығыҙ?**

**Илнур:** Хыял тигәнебеҙ - шул маҡсат инде. Маҡсатыбыҙға килгәндә, улар байтаҡ беҙҙең. Балаларға яҡшы тәрбиә, белем биреп, сәләмәт итеп, күркәм кешелек сифаттарын күндереп, үҙаллы тормош юлына лайыҡлы баҫтырыу - беҙҙең төп бурыс.

**Лилиә:** Шулай уҡ күберәк ил күрһәтке килә балаларға. Бәләкәйҙән илебеҙҙең, республикабыҙҙың ҙурлығын, гүзәллеген күреп, төрлө халыҡтар мәҙәниәтен белеп үҫһәләр, уларға шәхес булараҡ формалашырға еңелерәк булыр, тип уйлайбыҙ. Балалар төрлө яҡлап үҫешһен, сағыштырыу һәләтенә эйә булһын, ижад итһен, гәмле, сәмле булһын өсөн уларға һәр ваҡыт яңы хис, яңы тойғо кисереү кәрәктәр. Бөгөнгә заманда бигерәк тә. Шуға күрә балаларыбыҙға һәр халыҡтың матур йолаларын, мәҙәниәтен күрһәтергә, өйрәтергә теләйбеҙ. Апрелдә Төркиәлә ял итеп ҡайттыҡ. Арыҫлан менән Асель сит илдә йөрөгәнен бик аңламаһа ла, Ильяҫҡа бик оҡшаны. Был илдең төрлөлөгөнә, күркәмлегенә хайран булып ҡайтты.

Балаларыбыҙҙың киләсәктә ниндәй кеше булып китеүендә, ниндәй һөнәр һайлауында беҙҙең роль бик ҙур. Күптән түгел улдарыбыҙҙың тешен дауаларға йөрөткәйнек. Шунан алып икеһе лә стоматолог һөнәренә ғашиҡ. Ильястың стоматолог-хирург булғыһы килә, ә Арыҫлан терапевт булырға хыяллана. Хәҙер үк уйлап йөрөйбөҙ - уларҙы ошо йүнәлештә өҫтәмә белем алыу сараларын табырға кәрәк! Был йәһәттән гимназияла "Мин буласаҡ химик", "Мин буласаҡ биолог" тигән түңәрәктәр бар. Теш дауалаусы булырға теләгәстәр, медицина институтына инеү өсөн был кластан тыш сараларға йөрөргә кәрәк буласаҡ, тигән уртаҡ фекергә килдек.

**Илнур:** Улдарыбыҙға, әлбиттә, иң яҡшы килендәр, ҡыҙыбыҙға иң яҡшы кейәү эләгеүен, үҙебеҙгә тиң генә, үҙебеҙгә оҡшаған ғына, яҡын туғандар булып йәшәй торған үҙ милләтебеҙҙән булған ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ғына насип булыуын әле үк теләп йөрөйбөҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һоҡланғыс ғаилә, һоҡланғыс кешеләр... Күҙҙәр генә теймәһен. Йәштәрҙең бер бөтөн, бер йән булып, мөхәббәтле тормошта йәшәгәндәренә һоҡландыҡ та, бөгөнгө глобалләшеү заманында ҙур ҡалала башҡорт рухлы ғаиләләр булыуы менән ғорурландыҡ та. Күркәм фиғелдәре, лайыҡлы тормоштары, эштәрендә лә, йәмғиәттә лә, ғаиләлә лә үҙҙәренең өлгөһөндә балаларын тәрбиәләгән Мәхмүтовтар кеүек бер-береһе, балалары, туғандары өсөн өҙөлөп торған ғаиләләр күберәк булһын ине.**

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

АТА-БАБАЛАР ҠАНУНЫ

# ЙӘШЕРЕНДЕҢ ҮҘ ХИКМӘТЕ



**Беҙҙә ҡырҡ тыйыу аҫтында үҫтерҙеләр. Бөгөн генә ул бөтә нәмә шарран-яран асыҡ - интернет селтәренә береһен-береһе уҙышып нимә ашағанын, эскәнен, кем менән ҡайҙа булғанын һалалар. Батшалар йәйәү йөрөй торған ер менән мунса ғына ҡалып бара, ҡалһа.**

Йәшерен, тигәндәй, өләсәйем беҙгә бөтә нәмәне кешегә һөйләп бармаҫҡа, күрһәтмәҫкә, хатта тәҙрәнән урамдан үтеп-сүткәнде ҡарамаҫҡа, күҙәтмәҫкә ҡушып тәрбиәләне. Гонаһ була, тине. Әсәйем уҫал булғас, беҙ уға үҙебеҙ сер сисмәнек. Ошаҡлашһаҡ, үҙебеҙҙе һыҙырҙы, юҡ-бар хәбәр менән башты ҡатырмағыҙ, тип ҡырт киҫте. Шуға беҙ эш боҙһаҡ та, урамда "хәл асыҡлағанда" танау ҡанатһаҡ та, хатта йәрәхәтләнһәк тә, унан барыһын да йәшерҙек. Туғыҙ бала өсөн туҡһанға ярылһа, йөрәге туҙып бөтәр, тыпылдап туҡһанына китеп ултырмаҫ ине.

Эйе, йәшерендең үҙ хикмәте барҙыр. Ошо турала тағы бер нисә миҫал килтерәйем әле. Мәҫәлән, элек тә мал, ҡош-ҡорт иҫәбен алалар ине. Иҫләйем: ололар уларҙың башын гел кәметеп яҙҙырҙы. Ҡолғанала саҡта ҡәйнәмдең малдарын да, ҡош-ҡортон да булғанынан кәм итеп яҙҙырғаны күҙ алдымда. Был йәшереү ышанмаусанлыҡтан киләләр, тейем, сөнки элек бит малың бармы-юҡмы, тип һорамағандар, ит, һөт, май, йомортҡа, йөн һ.б. йөкләмәһе һалғандар. Бар, һин уны үтәмәй ҡара - Хөкүмәт апаның хөкөмө ҡаты!

Башҡорт күп нәмәһен йәшереп йәшәгәнен йәшәй-йәшәй аңланым. Яңыраҡ Дәүләтбай ағай Рәхмәтуллин хаҡында мәҡәлә яҙҙым. Ул үҙенең ауыр бала сағынан бер эпизод һөйләне: айыу бер аттың яурын башын йәрәхәтләгәс, йәйләүҙә уны һуйырға мәжбүр булалар. Шул замандағы бер аҡыллы ветеринар был "ҡырын эш"те хужаларға әйттермәй, көтөүҙә өс баш йылҡы малы артыҡ йөрөй, ти. Аҡылмы? Аҡыл! Былай ҙа өй йылыһын күрмәй, боланут өйрәһе һөрпөлдәткән ас көтөүсе малайҙар ит ашап бер туя.

Илдә болғауыр заманда - репрессия йылдарында Ҡыпсаҡ тарафтарынан "халыҡ дошманы" мөһөрө баҫылған кеше булмай, сөнки ул төбәктә үҙебеҙҙең ошаҡсылар булмай сыға, тиҙәр. Һоҡланғысмы? Һоҡланғыс!

Яңыраҡ авторыбыҙ Юлай Садиҡовтың архив мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп яҙған хәбәре тетрәндерҙе: рәүиз яҙмаларынан күренеүенсә, Яңы Мөсәт, Ғәлиәкбәр ауылдары кешеләре Мөсәт (Иҫкеһе) ауылы кешеһе исеме аҫтында "йәшенеп" йәшәгәндәр, йәғни, шул осорҙоң аҡыллы башҡорттары һәр йән башына һалынған яһаҡтан (оброк) тыш, һалым (налог) түләгән (Рәсәй ҡаҙнаһына), ошолай итеп ҡатлы-ҡатлы һалымдарҙан имен булыу өсөн бер ауыл кешеләре икенсе ауыл эсенә йәшерелгән. Тәүәккәллекме? Тәүәккәллек! Яҙманан күренеүенсә, был хәл бер ауыл менән генә булмаған. Борон кеше уҡымышһыҙ, наҙан булған, тип әйтеп ҡарағыҙ инде хәҙер.

Атайым һунарсы булды. Шул сәбәпле ер-һыуҙы, ундағы бөтә тереклекте яҡшы белде. Яҙын сәскә атыуына ҡарап ҡайҙа ниндәй еләк-емештең күп булырын тоҫмаллап, беҙҙе матасына тейәп алып барыр һәм беҙ ағас еләген (ҡурай) хатта фләгәләп йыйып алып ҡайта инек. Ул ошондай ниғмәтле ерҙәрҙе сит кешегә әйттермәне. Бер мәл ауылдың бер һунарсыһы көмөшкәгә алданып, ошондай еләклекте урыҫтарға күрһәткән, йәғни һатып эскән. Ошоноң өсөн атай аҙна буйы асыуланып, енләнеп йөрөнө...

Райондың бер ауылын беләм: кешеләре шул хәтлем шәп йәшәй, сөнки унда ошаҡ-мошаҡ, йәшерелергә тейешлене ғәмгә сығарыу юҡ. Өлгөмө? Өлгө!

Йәшерен, тигәндәй. Боронғо ҡатын-ҡыҙ , ауырға ҡалһа, был хаҡта хатта ғаилә ағзалары белмәгән. Күҙ тейеүҙән, һоҡ тейеүҙән йәшергәндәр буласаҡ сабыйҙы. Күҙ тейеү хаҡ. Был турала динебеҙҙә дәлилдәр күп. Ошоно белә тороп, хәҙер бөтә ғәм интернет селтәре өсөн йәшәй. Шунан йөрөйҙәр сабауыллап, мулла, өшкөрөүсе-төкөрөүсе эҙләп.

Яңыраҡ бер хәҙис уҡып ултырҙым. Тик уның ышаныслымы-юҡмы икәне хаҡында бәхәстәр ҙә бар. Уның мәғәнәһе ошолайыраҡ: берәй эшкә тотонор булһағыҙ, был хаҡта һәр кемгә йәүкәләп бармағыҙ, сөнки һәр эштән көнләшеүселәр бар...

Йәшерен нәмә йәшерен булырға тейештер ул. Сит-ят күҙҙән, ҡолаҡтан һәм башҡаһынан. Бигерәк тә хәҙерге заманда. Тәбиғәткә күҙ һалһаң да, иң аҫыл, ҡиммәтле нәмәләр йәшерен бит: диңгеҙҙәге ҡабырсаҡ эсендәге мәрйен, ете ҡат ер аҫтындағы ҡиммәтле мәғдән (алтын, көмөш). Аллаһы Тәғәлә лә күп нәмәне йәшергән: йомалағы доға ҡабул була торған сәғәттең (мәлдең) нәҡ ҡасан булырын, Ҡәҙер кисенең нәҡ ҡайһы көндә булырын һ.б.

Үтатма, шар асыҡлыҡ барыбер үтә шәп нәмә түгелдер ул, тигән һығымтаға килдем. Йәшерен нәмәлә лә ҙур хикмәттәр ята - бая алда яҙып үткән тарихтар халҡыбыҙҙың быуаттар буйы йыйған аҡыл ҡумтаһынан һибелгән бөртөк хазина ул. Йәшерелергә тейешлене йәшерәйек, йәмәғәт. Йәшерерлеге ҡалһа...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы "Таң" гәзите хәбәрсеһе.**

✓ "Алыҫтағы ҡояш нығыраҡ йылыта" тигән аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Яратҡан кешеләр араһында ла ара һәм ваҡыт булырға тейеш. Шулай булғанда, киреһенсә, уларҙың хистәре йылыраҡ, нығыраҡ була.



ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА



# ИРҘӘР КЕМДЕ ЯРАТА?

**Ҡатын-ҡыҙ ниндәй була? Йәш һәм йәш түгел. Тәүгеләре тормош көтөргә йәр эҙләһә, икенселәре күп йылдар инде - кейәүҙә. Йәштәр үҙҙәренән өлкәнерәктәрҙең тотороҡло тормошо өсөн көнләшеп ҡараһа, Бальзак йәшендәгеләр, киреһенсә, матур күлдәген кейеп, һөйгән егете менән осрашыуға ашыҡҡан ҡыҙ ваҡытын һағына...**

Һуңғы ваҡытта йыш ҡына йәш парҙарҙың мөхәббәте оҙаҡҡа һуҙылмай. Хатта ҡайһы бер ҡыҙҙарҙың егеттәр менән мөнәсәбәте аҙна-ун көнгә лә етмәй. Көслө хистәр менән башланып киткән мөхәббәт тарихы бик тиҙ тамамлана. Был осраҡта ҡыҙҙарҙың күбеһе сәбәпте көслө заттан эҙләй. Яҡшы яҡтарына ҡарағанда, киреһен күберәк таба. "Үҙеңдең яртыңды тапҡансы, йөҙ тәлмәрйеңде үберге тура килә", - ти инглиз халҡы. Беҙҙең башҡорт халҡында ла ошо юҫыҡтағы әйтем бар: "Бер һөйгәнем арҡаһында алтмыш һөймәгәнде һөйөрмөн". Бәхеткә юл еңел булмай ул, еңеллек эҙләргә ярамай.

Йәштәрҙең танышыу менән көнө-төнө бергә булыуҙары ла мөнәсәбәттәрҙең тиҙ һыуыныуына булышлыҡ итәләр. Бында сама белмәү ныҡ ҡамасаулай. Ҡыҙҙар үҙ ваҡытын тулыһынса егетенә бағышлай, осрашыу мөмкин булмаһа, иртәнән кискә тиклем телефондан аралаша, минут һайын яратыуын, һағыныуын белдереп, смс-тар яҙа. Бына шулай йәштәр бөтә ваҡытын бергә үткәрә һәм бер-береһенән тиҙ арый. Йәһүд халҡы шулай ти: "Көслө утҡа ҡуйылған кәстрүл тиҙ ҡайнап бөтә". Кеше тойғолары менән дә шулай. "Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа", ти беҙҙең халыҡ.

Бер-береһенән ялҡып киткәс, артабан йәштәр бер аҙ ял итеп алырға уйлай. Ваҡытын бушҡа сарыф итергә теләмәгән ҡыҙҙар башҡалар менән мөнәсәбәт ҡора башлай. Быны бөгөнгө замандың һөҙөмтәһе тип әйтергә урын бар, сөнки ваҡыт тиҙ үтә, бөтә нәмәгә өлгөрөргә кәрәк, ашыҡмаһаң, һуңлап ҡуйыуың да ихтимал...

"Алыҫтағы ҡояш нығыраҡ йылыта" тигән аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Яратҡан кешеләр араһында ла ара һәм ваҡыт булырға тейеш. Шулай булғанда, киреһенсә, уларҙың хистәре йылыраҡ, нығыраҡ була.

Оло ҡатындар быны аңлай. Шуға ла улар тәүлек әйләнәһенә яратҡан кешеһенең муйынына аҫылыныуҙан ҡаса. Һөйөүҙән тыш, яратҡан шөғөл дә, эш тә булырға тейеш. Бер аҙ яңғыҙ ҡалып, уйҙарыңды тәртипкә килтереү ҙә яҡшы. Һөйгән кешеңде яратҡан әйберҙәренән, мауығыуҙарынан тартып алырға, унан бөтә ваҡытын һиңә арнауын талап итергә ярамай. Унан ғына хистәр нығынмай. Көслө зат һеҙҙең уға мөнәсәбәтегеҙҙе белһен, әммә донъя яулауын дауам итһен. Икенсе яртығыҙҙы нығыраҡ тоторға теләһәгеҙ, дилбегәне бушатығыҙ. Уны ҡыҫҡа арала тоторға теләгәндәр, киреһенсә, юғалта. Бына шундай ҡатын-ҡыҙҙы ир-егет нығыраҡ ярата.

НЕСКӘ ТЕМАҒА ҺӨЙЛӘШЕҮ

**Кистәрен клубҡа сығып, гармун тартып, егет-ҡыҙҙарҙың ҡара-ҡаршы таҡмаҡ әйтешеүе һымаҡ йолалар хәҙерге ауыл йәштәре араһында күҙәтелмәй. Ундай күренештәрҙе сәхнәләге бәғзе бер спектаклдәр аша ғына ҡарап беләләрҙер. Әммә бына ошондай ваҡыттар, ысынлап та, була торғайны бит. Илле йылдар самаһы элек магнитофон уйнатыу тигән нәмә лә бөтөнләйгә тиерлек булманы. Шул саҡтағы бер-береңә шаян таҡмаҡ әйтешеүҙәрҙе йыш ҡына иҫкә алам.**

# КӘЛӘШЕҢДЕҢ "ҠЫҘ БУЛМАУЫ" НАСАРМЫ?



...Һеҙҙең яҡҡа килгән саҡта -
Һикһән һигеҙ ыстанса.
Һөйһәң -һөй, йә һөймәһәң - юҡ,
Һөйөүселәр бесконца!

Егеттәрҙең туҡталғанын көтөп кенә торғандай, шул уҡ көйгә ҡыҙҙар үҙҙәренең "сәнскеле" таҡмағын әйтеп ташлай:

Киймә итек, кей сабата
Сабата шәп атлата!
Һөймә ҡыҙҙы, һөй бисәне -
Бисә ҡаймаҡ ашата...

"Ҡаймаҡ ашата" тигәндәй, гүзәл заттарыбыҙҙың ана шул категорияһы хаҡында бер аҙ фәлсәфәгә төшөп китмәксемен. Бала сағымдан олораҡ ағайҙарҙың "ҡыҙ", "ҡатын", уларҙың айырмаһы тураһында үҙ-ара һөйләшкәнен ишеткеләй торғайным, әммә уға артыҡ иғтибар иткәнем дә булманы. Үҫмерлек, егетлек йылдары килгәс тә "Ни өсөн бәғзе берәүҙәр ошо мәсьәләгә баҫым яһай икән?" тип хатта ғәжәпләнә лә инем. Бәлки, әхлаҡи яҡтан формалашып етмәгәнгәлер, әллә икенсе сәбәп менәнме, инде өйләнер ваҡытым еткәс тә мине бындай һорау бер ҡасан да борсоманы. Өйләнгән саҡта кәләшең үҙ ғүмерендә тәүгә һиңә кейәүгә сығамы, әллә ҡасандыр ул башҡа кеше менән никахта булғанмы, минең өсөн барыбер һымаҡ ине.

Ошо турала сурытып алайыҡ әле. Халыҡта "Дөйә үлгәнсе "Тоҙ, тоҙ...", ә ирҙәр - "Ҡыҙ, ҡыҙ..." тип барып үлә..." тигән ярым шаян әйтем йөрөй. Шулай уҡ "Урау булһа ла - юл яҡшы, һуҡыр булһа ла - ҡыҙ яҡшы" тигән мәҡәл дә бар. Күптәр "ҡыҙ" булыу - уның сафлығының, әхлаҡи яҡтан тотанаҡлығының күрһәткесе, тип һанай. Ифрат дөрөҫ фекер. Ислам дине рухында үҫкән боронғо өләсәйҙәребеҙ, ысынлап та, ошо мәсьәләгә ныҡ иғтибар иткән. Ҡыҙҙарыбыҙ ҙа никахҡа ҡәҙәр үҙҙәренең ана шул "ҡыҙ" статусын һаҡлай торған булған. Никахһыҙ бәйләнештәргә ҡарата, үҙ исеме менән атап әйткәндә, зина ҡылыуға шәриғәт ҡануны шаҡтай ҡаты. Әгәр ҙә, берәүҙәрҙең зина ҡылыуы иҫбатланды икән, әле никахта тормаған егет менән ҡыҙға күпмелер мәртәбә таяҡ менән һуғылыу, ә инде никахлы кешеләргә башҡалар менән енси бәйләнеше өсөн таш менән бәреү ҡарала. Мосолман илдәрендә бындай яза әле лә ғәмәлдә. Был илдәрҙә зина ҡылыу һымаҡ кире нәмәләр юҡ кимәлдә булыуы шуның менән дә аңлатылылыр (Шул уҡ ваҡытта, иғтибар итеү кәрәк: зинаны иҫбат итеү еңел генә эш тип уйлау ярамай. Уның өсөн, шәриғәт ҡануны буйынса, дүрт мосолман кешеһенең шаһитлығы мотлаҡ. Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесында бына ошо мәсьәләне ифрат та ентекле итеп аңлата хәҙрәт. Әлеге дүрт шаһит булмай тороп, кешене зинасы тип табыу дөрөҫ түгел. Ә ялған шаһитлыҡ ҡылған өсөн шаһиттың үҙенә яза биреү "лазым"лығы хаҡында ла иҫкәртә дин әһеле). Илебеҙ закондарында бындай гонаһ өсөн яза ҡаралмаған, әммә боронғо традиция буйынса фекерләүсе күпселек гүзәлдәребеҙ шулай ҙа тормошҡа сыҡҡансы, үҙҙәренең намыҫын һаҡлау яғында. Иң беренсе нәүбәттә, зинаның оло гонаһ булыуы хаҡында уйланыу дөрөҫтөр. Әммә хәҙерге заманда дини рухта тәрбиә алмаған бәғзеләрҙең "Был хәҙер модала түгел" тип һанағандары ла бар. Тик ундайҙар һирәктер шулай ҙа, тип уйлайым.

Әле мин, кемдер әйтмешләй, "ҡыҙҙар тикшерергә" йыйынмайым. Ниндәйҙер гонаһы өсөн нәфис заттарыбыҙҙы әрләү йә яманлау ҙа уйымда түгел. Эш уға ҡалһа, ир-ат өсөн дә бер ниндәй ташланма ҡаралмаған бит. Ни өсөндөр, ошо мәсьәләгә ҡағылышлы күптәр тик гүзәл заттар хаҡында ғына һүҙ алып барыусан, әммә йәш кейәүҙең "малайлығы"н тикшереүселәр юҡ кимәлендә. Бәғзе бер халыҡтарҙа хатта тәүге никах кисе үткәс, "башҡалар күрһен", тигән ниәт менән, йәш килендең түшәген тышҡа сығарып элеп ҡуйыу йолалары булыуы хаҡында ла ишеткәнем бар. Минеңсә, былай уҡ шаштырыуҙар - артыҡ. Ә бит бер нисә ҡатын алырға рөхсәт ителеүенә ҡарамаҫтан, шәриғәт ҡанундарына ярашлы, ир-егеттәр ҙә никахһыҙ бәйләнеш мәсьәләһендә Аллаһ Тәғәлә алдында берҙәй яуаплы, йәғни, бында "көслө зат"тың өҫтөнлөгө юҡ...

Тормош тигән нәмә ифрат ҡатмарлы, һәр саҡ беҙ уйлағанса ғына бармай шул. Башҡа күпселек кеүек үк, мин дә халҡыбыҙҙың "теләһә ҡалай" тормош алып барыуы яҡлы түгел (әғүҙү билләһ). Әммә, бер аҙ стандартһыҙыраҡ юҫыҡта фекерләп, "ә шулай ҙа..." тип, һүҙемде артабан дауам итмәксемен. Халҡыбыҙҙа "Дүрт аяҡлы аттың да абыныуы бар" тигән әйтем йөрөй. Никахлашырҙан тәүҙәрәк ҡатын-ҡыҙ, әлеге әйтмешләй, "хаталанып" өлгөргән икән, тигән вариантты алып ҡарайыҡ. Шундай ҡатын-ҡыҙға өйләнергә ҡарар иткән егет кеше (йә ир), минеңсә, был мәсьәләлә дөрөҫ фекерләргә тейеш. Яңы тормош башлаған йәш ғаилә башлығы ҡатын-ҡыҙҙың бына ошо физик хәленә ҡарағанда, уның башҡа сифаттарын өҫтөнөрәк ҡуйырға тейештер, тип уйлайым. Йәш кәләш элек башҡа берәү менән рәсми никахта торғанмы, әллә, хәҙергесә әйтмешләй, "граждан" никахында булғанмы, хәҙер инде ул тәүбәгә килеп, өр-яңынан тормош башларға ҡарар иткән, тип аңларға тырышыу кәрәктер, минеңсә. Тәүге ире менән күпмелер йәшәп тә, унан ҡыйырһытылып, хатта бер-ике бала менән айырылырға мәжбүр булған һәм башҡа берәүгә тормошҡа сыҡҡан ҡатындарҙы ла беләм. Иң тәү сиратта кешелеклеге юғары булған бындай ҡатын-ҡыҙ, яҡшы ир-егеткә тап килһә, уның менән һин дә мин таты́уы йәшәп алып китә. Үҙен яратҡан яңы хәләл ефетенә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, уға ғүмерлеккә тоғро булып та ҡала. "Ҡыҙ түгел" булыуы ғына әле кәләштең насар икәнлеген аңлатмай, тимәксемен. Кемдер әйтмешләй, ҡасандыр "өйрәнгән" булыуына ла ҡарамаҫтан, етди ниәт менән тормош ҡорған бындай ҡатын-ҡыҙ бынамын тигән хужабикә, ғүмер буйы яҡшы ҡатын була ала. Хатта ҡыҙ килеш кейәүгә сыҡҡан бәғзе берәүҙәргә лә ҡарағанда...

Ябай ғына булмаған был тормошта һәр саҡ, әлеге әйтмешләй, һис нәмәгә ҡарамаҫтан, "ҡыҙ - яҡшыраҡ" тип, шаблон буйынса ғына фекерләү ярамай, тимәксемен. Ғәҙәти түгелерәк юҫыҡта фәлсәфәләүсе был мәҡәләм менән мин саф ҡыҙҙарыбыҙҙы һис кенә лә кәмһетергә йыйынмайым. Киреһенсә, уларҙы данлап, әммә шул уҡ ваҡытта, төрлө "ҡытыршылыҡтар" аша үтеп, артабан кешеләрсә йәшәргә тырышып ятҡан ҡатындарыбыҙҙы ла яҡлашыуға йүнәлтелгән уйым. Һәр кешенең дә донъяла бәхетле ғүмер иткеһе килә, һәммәбеҙҙең быға хоҡуғы бар. Аллаһ Тәғәлә тәүбәләрҙе ҡабул ҡылыусы һәм Ул - ғәфү итеүсе. Ир-егетме ул, ҡатын-ҡыҙмы, ҡасандыр йәшлек менән ебәргән хаталарыбыҙ, ҡылған гонаһтарыбыҙ өсөн Раббыбыҙ алдында тәүбә ҡылып, артабан инде дөрөҫ юлды табырға, Уға ғына баш эйеп йәшәй башларға ынтылырға тейешбеҙ.

Бергә йәшәү дәүерендә "һин миңә сыҡҡанда ҡыҙ түгел инең" йә иһә "мин һинең беренсең түгел" тип, бер-береңде кәмһетергә, ғәйепләргә тырышыуҙар ғаилә тормошон бер ҡасан да яҡшыға алып бармай. Шуға күрә лә, өйҙә бына ошо мәсьәләне һис кенә лә күтәреү ярамай. Ниндәй генә асыулы булыуыңа ҡарамаҫтан! Тик шул саҡта ғына тормошоғоҙ бәхетле булыр, ин шәә Аллаһ.

Һүҙ аҙағында әлеге "бисә ҡаймаҡ ашата", тигәне лә бушҡа әйтелмәгәндер. Бер аҙ "донъя күргән" ҡатын-ҡыҙҙың, әлбиттә, тормош тәжрибәһе лә, ир-атҡа ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә белеүе лә юғарыраҡ кимәлдә булыуы ихтимал. Был - ғәжәп түгел. Уның "ҡаймаҡ ашатырға" хәленән килеүенең дә бер ниндәй насар яғын күрмәйем. Кейәүҙә булып айырылған гүзәлдәребеҙҙе "икенсе сорт" йә яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән тип һанарға ашыҡмайыҡ. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*✓ Майҙан уртаһына өс ҡурайсы сығып баҫты. Улар, күңелдәрҙе елкендереп, бөтә даланы шыңғырҙатып, бейеү көйө уйнап ебәрҙе. Был минутта Макаевтың һылыу аты яуға ҡаршы сабырға теләгән төҫлө тыпырсынырға тотондо.*



# ДОН ДАЛАҺЫНДА

Сәйфи ҠУДАШ



## VI. ГРУША АҒАСЫ ТӨБӨНДӘ

Өсөнсө ноябрь. Көньяҡтың ҡояшлы йылы көнө. Алда ҡом сәхрәһе кеүек түшәлгән һәм офоҡҡа барып терәлгән һарғылт дала йәйелеп китә. Күптән ямғыр күрмәгән, борҡолдап торған саңлы оло юл. Артында саң өйөрөлдөрөп, беҙҙең машина шул юлдан алға саба: беҙ башҡорт атлылары дивизияһының подполковник Макаев Ғариф иптәш командирлыҡ иткән бер часына Башҡортостан халҡының ҡайнар сәләмен һәм наказын тапшырырға китеп барабыҙ.

Машинала барған кешеләр бер нисә минуттан буласаҡ шатлыҡлы, шуның менән бергә тулҡынлы һәм һағыныулы осрашыуға сабырһыҙланып ашҡына. Күҙҙәр, барып туҡталасаҡ урынды эҙләп, алға ҡарай.

Һарылыҡ менән ҡапланған Дон далаһы, тынлыҡҡа күмелеп, көҙгө ҡояш аҫтында йымылдап, йәйелеп ята: юлдың һул яғында - дала уртаһында теҙелеп ултырған бесән эҫкерттәре, сәхрәһендә маһайып торған мөһабәт ҡара пирамидалар һымаҡ, ҡусҡыллանып күренә. Уң яҡта - комбайн менән урылған баҫыуҙарҙа һалам күбәләре теҙелеп ята.

Дала юлында бушлыҡ һәм тынысылыҡ, һирәк-мирәк осраған һыбайлыларҙан башҡа, бер кем юҡ. Был һыбайлыларҙы беҙ шатлыҡлы, асыҡ йөҙ менән сәләмләп ҡаршы алабыҙ һәм, яулыҡтар болғап, оҙатып ҡалабыҙ. Дон далаһында, йылдам башҡорт аты өҫтөндә ыҡсым хәрәкәт яһап, уйнаҡлап килгән осҡор башҡорт егеттәре беҙҙең иғтибарҙы үҙҙәренә биләп ала. Ул егеттәрҙең әле күптән түгел генә гитлерсы бандиттарҙы ҡырып йөрөүҙәре хәтергә төштө һәм тиҙҙән тағы ла дошман өҫтөнә арыҫландай ташланасаҡтары күҙ алдына баҫып, күңелде ғорурлыҡ солғап алды.

Дала тын. Шул тәрән тынлыҡты ҡалтыратып, көнбайышта көслө күк күкрәгән һымаҡ булып, артиллерия канонадаһы гөрһөлдәй. Ләкин был гөрһөлдәү алыҫ тылдан фронтҡа барған һәм хәрби булмаған кешеләр өсөн генә яңылыҡ булып тойола. Шуға күрә быға беҙҙән башҡа кешеләр, һис бер ишетмәгән кеүек, бөтөнләй иғтибар ҙа итмәй. Ә беҙҙең иптәштәр, туп тауышы нығыраҡ үкергән һайын, бер-береһенә ҡарашып, "Ишетәһеңме?" тигән төҫлө итеп, йылмайышып ҡуя.

Бер ҡалҡыулыҡты үтеү менән беҙҙең алда, һул яҡтағы иңкеүлектә, өҫтө зәңгәр төтөн менән ҡапланған ҡыуаҡлыҡтар күҙгә ташланды. Беҙҙең машина, ҡапыл боролоп, оло юлдан сыҡты ла, шул ағаслыҡҡа ҡарай йүнәлде.

Урман ситендә Макаев һәм уның урынбаҫары Сәйетғәлин иптәштәр беҙҙе ҡосаҡлап ҡаршы алды. Беҙ инде улар менән әллә нисәнсе тапҡыр шулай ҡосаҡлашабыҙ, әллә нисә тапҡыр ҡулдарҙы ҡыҫышабыҙ. Ләкин һәр бер күрешкән минут беҙгә һаман да беренсе тапҡыр осрашҡан төҫлө булып тойола. Сөнки улар беҙҙе тыуған илдән, тыуған ата-әсәләрҙән, һөйөклө ҡатындарҙан, мөхәббәтле ҡыҙҙарҙан, йөрәккә иң яҡын балаларҙан туғанлыҡ сәләме, тәмле бүләктәр менән халыҡтың ҡайнар мөхәббәтен алып килгән өсөн ҡосаҡлай, үбә. Беҙ уларҙы ҡандарын, йәндәрен ҡыҙғанмайынса ватаныбыҙҙы, беҙҙең бәхетле гүзәл тормошобоҙҙо оккупанттарҙан һаҡлағанлыҡтары, гитлерсы эттәрҙе аяуһыҙлыҡ менән үлтереүҙәре өсөн ҡосаҡлайбыҙ һәм үбәбеҙ.

Беҙ ҡырмыҫҡа ояһы һымаҡ хәрби тормош ҡайнаған ҡыуаҡлыҡтар араһына килеп индек. Беҙҙең алдыбыҙҙа, бәләкәй аҡлан ситендә, киң ҡоластарын йәйеп ултырған ҡарт груша ағасы аҫтында, башҡорт ғәҙәтенсә, ҡунаҡтар өсөн ергә плащ-палаткалар йәйеп һәм мендәрҙәр ҡуйып әҙерләнгән һәм яңы ғына ҡырҡылған ҡайын ағастары менән кәртәләп алынған урын тора ине. Частың подразделениелары хәрби тиҙлек һәм хәрби ҡаты тәртип менән беҙ урынлашҡан аҡланды әйләндереп алды. Командирҙың һаулыҡ һорауына ҡайтарылған яуап тауышы, бер ауыҙҙан сыҡҡан кеүек булып, һауа тынлығын уйып алды. Тынлыҡ тағы ла ҡуйыра төштө.

Бына шунда, Дон далаһының күпте күргән, күпте ишеткән ҡарт груша ағасы төбөндә беҙ дошман өҫтөнә ыласындай ташланырға ярһып барған башҡорт егеттәренә тыуған илдең мөхәббәтен һәм сәләмен тапшырҙыҡ. Бына шунда частың боецтары исеменән һөйләгән Сәйетғәлин, Әлмөхәммәтов, Байғужин, Абдуллин һәм Макаев иптәштәр, ил алдында, Сталин алдында ант иткән тел менән, Башҡортостан халҡының вәкилдәренә боевой вәғәҙә бирҙе. Бына шунда, тыуған илдән бүләк һәм сәләм алған башҡорт егеттәренең бүләккә һәм сәләмгә яуап итеп, мылтыҡтарын, автоматтарын һәм ҡылыстарың тағы ла нығыраҡ ҡыҫа тотоп, ата-әсәләрҙең хаҡы өсөн, ҡатындарҙың, ҡыҙҙарҙың хыянатһыҙ мөхәббәте өсөн һәм Иҙел буйынан Дон буйына килгән татлы балды биргән сәскәләрҙе үҫтергән тыуған изге тупраҡ өсөн бер табан да артҡа сикмәҫкә, еребеҙгә аяҡ баҫҡан немец эттәренең аҙаҡҡыһына тиклем ҡырып бөтөрөргә һүҙ биргәнлектәрен күрҙек беҙ. Украина халыҡ шағиры Павло Тычинаны Киевҡа, Белоруссия халыҡ шағиры Якуб Коласты Минскиға ҡайтарырға ант иткәндәрен ишеттек беҙ.

Майҙан уртаһына өс ҡурайсы сығып баҫты. Улар, күңелдәрҙе елкендереп, бөтә даланы шыңғырҙатып, бейеү көйө уйнап ебәрҙе. Был минутта подполковник иптәш Макаевтың һылыу аты, үҙ хужаһының телен аңлаған кеүек ярһынып, ер тырнарға һәм үҙен бәйләп ҡуйған ҡарт имәнде йығып, ирекке, ебәк ялын туҙғытып, яуға ҡаршы сабырға теләгән төҫлө тыпырсынырға тотондо. Ихтимал, был урында бер ваҡыт граждандар һуғышы геройы Григорий Котовскийҙың аты ла шулай, аҡ бандалар өҫтөнә ташланырға ярһып, тыпырсынғандыр... Ихтимал, бер саҡ был груша ағасы төбөндә, аҡ бандаларға ҡаршы атакаға китер алдынан, ҡыҙыл казактарҙың командиры Александр Пархоменко ла шулай, бөҙрә сәсен йәшергән папахаһын ҡырын һалып, ер һелкетеп бейегәндер. Ә бөгөн бында - иртәгә йәки иртәгә һуңға - гитлерсы бандалар өҫтөнә ташланырға төйнәлгән башҡорт егеттәре һәм уларҙың командиры Макаев башҡорт халыҡ артисткаһы Бәҙәр Йосоповаға ҡаршы төшөп, атлыларға хас бер еңеллек менән, дәрт менән ҡанатланып бейей. Уларға ҡушылып, бөтә боецтарҙың йөрәктәре, ҡолас йәйеп торған груша ағастары һәм бөтә Дон далаһы бейей.

Ҡояш, засадаға ашыҡҡан боец һымаҡ, офоҡҡа төшөп бара. Макаев иптәш сәғәтенә ҡараны, өс ҡурайсы Салауат маршын уйнай башланы. Батыр аталарының героик традицияларын намыҫ менән һаҡлаусы бөйөк Салауат улдары тыуған ил өсөн, Сталин өсөн данлы походҡа сығырға аяҡҡа баҫты.

- Хәйерле, данлыҡлы, еңеүле юлға, иптәштәр! - тинек беҙ уларға.

## VII. ДУМБЫРА

Өсөнсө ноябрҙең кисендә М. М. Шайморатов беҙҙе башҡорт атлы дивизияһы ингән подразделениеның гвардия командиры Борисов менән осраштырҙы. Мәжлестә беҙҙең өсөн иң ҡыуаныслы хәл гвардия генерал-майоры Борисов иптәштең башҡорт атлы дивизияһы тураһындағы һүҙҙәре булды. Ул үҙенең ҡыҫҡа телмәрендә:

- Башҡорт атлы дивизияһы боевой һәләтлелек яғынан беҙҙең подразделениелағы дивизиялар араһында алдынғы дивизия булып һанала. Ул быны үткән боевой хәрәкәттәр ваҡытында бик яҡшы күрһәтте. Киләсәк бойҙарҙа ла күрһәтәсәк, - тине һәм шул хаҡта Башҡортостан халҡына белдерергә ҡушты.

Үҙен һәм үҙенең эшен маҡтауҙы һис бер яратмай торған генерал-майор М. М. Шайморатов иптәш командирлыҡ иткән дивизияға ҡарата юғары командование исеменән әйтелгән был һүҙҙәрҙе бик борсолоп тыңланы тыңлауын. Ләкин бында ул ни тиклем ябайлылыҡ күрһәтмәһен, был минутта башҡорт егеттәренең күкрәктәрендәге ордендар, сафлыҡ менән йылмайған йөҙҙәр төҫлө, балҡып яна ине.

Дивизияның Фәйзи Ғәскәров тарафынан ойошторолған һәм Аҙнабаев етәкселек иткән йыр һәм бейеү ансамбле ҡунаҡтарға бик матур концерт бирҙе, ә концерттың аҙағы халыҡ бейеүҙәре кисәһенә әйләнеп китте. Был концертта кешеләрҙең иғтибарын ҡырғыҙ Малдыбаевтың думбыраһы һәм ул думбыраның тыуыу тарихы үҙенә тартты. Ул думбыра ниндәй ҙә булһа берәй музыка ҡоралдары мастерскойында эшләнмәгән, әлбиттә. Улай ғына ла түгел, уны Алатау итәгендәге ҡырғыҙ ауылындағы бер думбырасы йәки Тянь-Шань йәйләүҙәрендәге бер чабан ҡулы ла яһамаған. Ул фронтта, ут эсендә тыуған. Йәш думбырасы Малдыбаев башҡорт атлы дивизияһына килеү менән уйламаған һәм көтөлмәгән бер күренешкә осраған. Ул тәү башлап үҙенең боевой иптәштәре буласаҡ башҡорт егеттәре янына килеп ҡушылғанда улар, "Буранбай"ҙы тыңлап, тәрән моңға күмелеп ултырған һәм хәл йыйған бер саҡ булған. Малдыбаев моңға солғанған был күңелле минуттың тынлығын һәм шиғриәтен боҙорға теләмәгән. Аяҡ остары менән генә баҫып, бер ситкә барып ултырған да, үҙенә бик яҡын яңғыраған, хатта үҙ халҡының яратып йырлай торған, дала кеүек киң, диңгеҙ һымаҡ тәрән моңло көйҙәрен хәтерләп, ҡурай моңонең көслө ихтыярына еңелеп, тын ҡалған.

Башлап ишетеүенә ҡарамаҫтан, ҡурай Малдыбаевтың тойғоларын, уйҙарын биләп алған да, уны әле Тянь-Шань тауының мөһабәт тынлыҡтары ҡосағына илтеп ташлаған, әле туптар шартлап ярылған һәм үлем үкергән фронттың дәһшәтле һуғыш ҡырына килтереп баҫтырған. Уның күҙ алдына килеп, киң ҡырғыҙ далалары йәйелеп ятҡан. Уның ҡолаҡтарына шул далаларҙағы елбер аҡ сәсле ҡылғандарҙың тулҡынланып ыжылдау тауыштары ишетелгән.

Шул минутта ул, үҙенең һөйгән думбыраһын алып, соңҡолдатып уйнарға һәм уға ҡушылып:

*- Басынан Алатаудың*
*күс киләде,*
*Артынан ике тайлак*
*бус киләде,*
*Айырылыу туған илдән*
*жаман икән,*
*Мөлдөрәп ике күздән*
*жас киләде, -*

тип йырларға теләгән, ләкин булмаған.

Ҡурайсы уйнауынан туҡтаған. Шунан һуң пулемётчик, сержант Малдыбаев, башҡорт егеттәре менән танышып, боевой семьяның яҡын бер члены булып киткән. Унан һуң күп көндәр үткән. Ҡурайсылар һөжүмгә, атакаға китер алдынан Салауат маршын уйнап, боецтарҙың рухтарын күтәргән. Дошманды ҡыйратып, бойҙан сыҡҡас, "Ҡарабай"ҙы йәки "Перовский"ҙы тартып бейеткәндәр. Ә Малдыбаев, ҡурайҙы күргән һәм тыңлаған һайын, үҙенең думбыраһын һағынған.

Малдыбаевтың был кисерештәрен иптәштәре бик тиҙ аңлаған, һәр кем думбыра яһар өсөн кәрәкле материалды табыу сараһына керешкән. Осраған бер таҡтаны алып ҡайтҡандар. Ләкин Малдыбаев улар табып килтергән таҡта һәм ағастарҙың береһен дә яратмаған. Был хәл ҡайһы бер боецтарҙы Малдыбаевтың думбырасы булыуы тураһында шиккә төшөрә башлаған. Бер ваҡыт Малдыбаев, материал һайлап, бик наҙлана башлағас, бер боец торған да:

- Беҙҙең башҡорт халҡының "Көйө килмәгәнден бейегеһе килмәй", тигән бер мәҡәле бар. Һин, ҡустым, шуның һымаҡ ҡыланмайһыңмы икән?.. Ҡайын таҡтаһы таптыҡ, ул ярамай. Йүкә таҡтаһы килтерҙек, уны яратманың. Килтермәгән ағас ҡалманы, берәүһе лә оҡшамай. Инде һиңә ожмах ағасы кәрәкме, әллә булмаһа! - тигәс, Малдыбаевтың биттәренә борсолоу сыҡҡан һәм күҙҙәренән осҡон бөркөлгән:

- Ғәфү итегеҙ, жулдастар, мин һеҙҙе шаяртырға ла теләмәнем һәм алдарға ла уйламаным. Ҡырғыҙ алдашырға яратмай, урынһыҙға шаярмай. Башҡорттоң шулай тигән мәҡәле булһа, ҡырғыҙҙың: "Кара таштан дым сыҡмаҫ, моңһоҙ жандан моң сыҡмаҫ", - тигән мәҡәле бар. Һәр бер ҡош бер төҫлө йырламай, һәр бер ағас бер төрлө шыңғырҙамай. Дүмбыраны һандуғастай сутылдатыу, күтәрсендәй гөрләтеү һәм тутый ҡоштай соңҡолдатыу өсөн алма ағасының таҡтаһы кәрәк бит уға. Үҙегеҙ беләһегеҙ, алма ағастарының төптәренә, алйырҙан кеүек, немецтар оялап алған. Етмәһә тағы, улар бөтә алма баҡсаларын ҡырҡып, нығытмаларға һалған, - тип көрһөнгән.

Боецтар уны тынысландырған һәм алма ағасы таҡтаһы табып бирергә вәғәҙә иткән.

Июль числоһынын бер ҡараңғы төнөндә боецтарҙың бер төркөмө, немец нығытмаһына шыуышып барған да, тауышһыҙ ғына часовойҙы йәһәннәмгә ебәргән. Унан граната бәйләмдәре ырғытып, нығытманың аҫтын-өҫкә килтергәндәр. Бына шунан алып ҡайтҡан улар бөгөн Малдыбаев ҡулында соңҡолдаған думбыра яһалған алма ағасы таҡтаһын.

**(Дауамы. Башы 19-20-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАЛҠЫН ҺАУА ФАЙҘАЛЫ

■ Америка ғалимдары билдәләүенсә, һалҡын һауа сәләмәтлеккә файҙалы. Тышта саф һауала йәйәү йышыраҡ йөрөргә кәрәк, сөнки ҡышҡы һауала кислород 30 процентҡа күберәк һәм тиреғә ыңғай йоғонто яһай. Был шөғөлдө кискелеккә, урамда машиналар әҙерәк йөргән мәлгә ҡалдырырға кәңәш итә ғалимдар. Йөрәк-ҡан тамырҙары, баш ауыртыуы менән яфаланыусыларға ла саф һауа кәрәк.

■ Томат һәм ликопенға бай башҡа продукттар ир-егеттәрҙе инсульт хәүефенән һаҡлай, тип белдерә Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары. Улар инфаркт һәм инсультҡа килтереүсе сәбәптәрҙе нинდәй матдәләр түбәнәйтеүен асыҡлаған. Һынауҙар 12 йыл дауам иткән, унда 46-65 йәшлек 1031 ир-егет ҡатнашҡан. Был ваҡыт эсендә 67 кешелә инсульт булған. Ғалимдар ҡан составындағы ликопен күләме буйынса ир-егеттәрҙе дүрт төркөмгә бүлгән. Инсульт иң түбән ликопенлы төркөмдә иң күбе булып сыҡҡан. Ликопен - йәшелсә һәм емештәргә ҡыҙыл төҫ бирә торған матдә. Ул томаттарҙа, дөрөҫөрәге, томат һутында һәм пастаһында күп.

■ Әгәр ҙә һеҙ оҙаҡ йәшәргә һәм үҙегеҙҙең йәшегеҙҙән йәшерәк күренергә теләһәгеҙ, селенға бай ризыҡтар менән туҡланығыҙ. Немец ғалимдағы иҫбатлауынса, тап ошо микроэлементтың аҙ булыуы яман шеш үҫеше хәүефен барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ организмда ҡартайыу процестарын тиҙләтә. Берлин клиникаһының экспериментал эндокринология институты ғалимдары менән Брауншвейгтағы Техник университет белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡандағы селенопротеин аҡһымы башҡа аҡһымдар бүленеүҙә гүр роль уйнай. Һуңғылары организмды ирекле радикалдарҙан һаҡлай, шуға ла селенопротеиндың түбәнәйеүе шунда уҡ насар эҙемтәләргә килтерә. Шулай уҡ ирекле радикалдарҙан һаҡланмаған организм тиҙ ҡартая. Бөгөнгө көнгә селен сығанағы булып аҙыҡ-түлек тора, уларға йомортҡа һарыһы, спаржа, бәшмәк, кукуруз, бразиль сәтләүектәре инә.

■ Груша һомғолораҡ булырға ярҙам итә, ти Америка ғалимдары. Луизиана университеты белгестәре билдәләүенсә, кем даими рәүештә груша ашай, уларға һимереү янамай. Грушаның составында клетчатка, С витамины, магний, калий, баҡыр күп. Шуға ла был емеш шәп диетик ризыҡ, ти улар.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйыҡайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимөк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ЭШЛӘМӘГӘН ЭШТӘРЕ ЮҠ!

**Үҙкурсаланыу ваҡытында йәмғиәтебеҙҙең иң әүҙем ағзалары - ағинәйҙәр ҙә осрашыуҙарҙы туҡтатып тороп, аралашыуҙы ватсаптағы, "Бәйләнештә"ге төркөмдәрҙә генә дауам итергә мәжбүр булғайны. Бына хәҙер аҡрынлап үҙ яйына ҡайта уларҙың аралашыуҙары. Бөтә булған һаҡлыҡ сараларын күҙәтеп, милли кейемдәрен кейеп алып, матур саралар үткәрә башланы беҙҙең Учалы ағинәйҙәре лә. Ул сараларҙың барыһы ла фәһемле һәм мөһим - милли кейемгә, милли ризыҡтарға, милли йолаларыбыҙға арнала улар. Ә бына Наурыҙ ауылында үткән сарала иһә... ер-һыу атамалары тураһында һөйләнелде һәм был темаға ағинәйҙәрҙең дә битараф булмауын, улар иғтибарынан ситтә ҡалмауын раҫланы. Был аңлашыла ла, сөнки ер-һыу атамаларында - халҡыбыҙҙың, төбәгебеҙҙең тарихы, асылы, булмышы сағыла бит.**

## Тарих һөйләйҙәр

Билдәле, республика ағинәйҙәре бик күп эштәргә башланғыс һалды. Шул уҡ башҡорт милли кейемдәрен, шулай уҡ сарыҡ, ҡата кеүек аяҡ кейемдәрен тегеп-тергеҙеп кейеп, биҙәүестәрен эшләп тағып йөрөү ғәҙәтен дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға улар йоҡторҙо бит. Шуның менән бергә кәнитмешебеҙҙә кәрәкмәгән һымаҡ тойолған кейеҙ баҫыу, ҡорама, сергетыштар ҡороу, аҫалы балаҫ һәм торпошалар һуғыу кеүек кәсептәр ҙә күп тарафтарҙа ағинәйҙәр тарафынан аяҡҡа баҫтырылды. Унан һуң, беҙҙә булған башҡа йәмәғәт ойошмалары балалар менән эшләгәне булдымы икән? Ә беҙҙең ағинәйҙәр балалар баҡсаларында ла, мәктәптәрҙә лә өләсәй роленә инеп, әкиәттәр һөйләй, йомаҡтар ҡоя, "Өләсәйем һандығы" тигән уйындар ойоштора, тарих һөйләй...

Эйе, бар нимәлә эше, ҡыҫылышы бар ағинәйҙәрҙең. Бына әле тағы бер инициативаға юл башлап тора учалылар: ер-һыу атамаларын өйрәнәләр. Был бик тә көнүҙәк проблема икәнен билдәләп, һиҫкәндереп тә еберҙе әле улар. Ысынлап та, ер-һыу атамаларыбыҙ күҙ алдында боҙола ғына түгел, урыҫлаштырыла. Быға тиклем ундай хәл булдымы ни? Хәҙер юл буйҙарындағы атамалар ҙа русса ғына яҙыла бит. Шүлгән - Каповаға, Төйәләҫ - Худолазга, Ирәкташ - Инйәр зубчаткаларына, Яҡтыгүл - Банное булып киткәненә көйөнә инеҡ. Хәҙер вағыраҡ, ауылдар кимәлендәге атамалар ҙа үҙгәргәненә шаһит булабыҙ. Шуның менән тарихи хәтер ҙә юғала, сөнки балаларға һөйләүселәр, аңлатыусылар ҙа бөтөп бара. Бына шуға ла Учалы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары бынан бер нисә йыл элек үк бик ваҡытлы тәҡдим күтәрҙе: ауылдарыбыҙ тирәһендәге барлыҡ атамаларҙың исемлеген төҙөйөк, легендаларын да иҫкә төшөрәйек. Был эш ҡайһы бер ауылдарҙа башланды ла инде.

Ошо турала һөйләшеү өсөн был юлы Наурыҙ ауылы ағинәйҙәре (етәксеһе Миннур Байгарина) райондың бер нисә ауылы ағинәйҙәрен, крайҙы өйрәнеүселәрҙе ҡорға йыйҙы. Район һәм ауыл биләмәһе хакимиәттәре вәкилдәре, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесенең сәләмләүенән һуң, уҡытыусы-ветеран Динә Кәримова телмәр тотто: "Халҡыбыҙҙың бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди: "Археологияны, ауыҙ-тел ижадын, топонимияны, гидронимдарҙы, антропонимдарҙы барыһын бергә комплекслы өйрәнеү генә тулы тарихи һығымталар яһарға мөмкинлек бирә", - тигән. Был ысынлап та шулай. Наурыҙ ауылы, мәҫәлән, 1776 йылда рәсми документтарҙа теркәлгән. Уға тиклем ауыл булмаған тигән һүҙ түгел был. Башҡорт ерҙәре ғәйәт ҙур булған. Малдары артынан бик ҙур территорияла күсеп йәшәгән халыҡ. Һәм атамаларҙы ла башҡорт халҡы үҙе ҡушҡан. Тарихсы Роза Буканова яҙыуынса, "урыҫтар башҡорт ерҙәренә 1604 йылда ғына, Аҡ батша башҡорттарҙан хәҙерге Табын ауылы янында тоҙ сығарыуға рөхсәт алғас ҡына күсенә башлай". Тимәк, урыҫса ерһыу атамалары беҙҙең ләғәткә күптән түгел генә килеп ингән, уларҙың бер ерлеге лә юҡ. Тик үкенесле: элекке башҡорт атамаларын урыҫсаға алыштырыу күренештәре ишәйә бара: Ҡотой ауылы янындағы Оло тары - Маяҡ, Оҙонгор һырты - Бригадная гора, Баҡшай тауы - Кандалинка булып китте..."

Артабан Динә Хәтип ҡыҙы Наурыҙ ауылы тирә-яғындағы ер-һыу атамаларын һанап китте: "Ауылыбыҙ янындағы тауҙар - Боғасты (Бүгәс тау), Бәркөтоя, Яйыҡ арьяғында Ҡапсығай ( ҡаҙаҡ барымтасыларының ҡабат сығай тип һуғышҡа өндәүенән ҡалған), Кәркәбар (кәркә - йети- ҡар кешеһе, тигәндән), Йөндөтау (енле тау булырға тейеш), Әүәле бил, Бәпес түбә, Әбейъяр, Өйташ, Күбәташ,Осоғуҙәк (пәрейе бар), Ҡеҙәғайын түбәһе, Тайып түбәһе, Шаҡым һаҙы, тағы әлә күпме атамаларҙан исемлек төҙөнөм. Ауылдың һүрәтле картаһын төҙөп, ошо атамаларҙы теркәп ҡуйһаҡ, йәштәр, балалар хәтерендә нығыраҡ уйылыр ине, тигән тәҡдимем бар..."

Башҡа ауыл ағинәйҙәре лә ер-һыу атамалары исемлеген төҙөү буйынса алып барылған эштәре менән уртаҡлашты һәм Динә Хәтип ҡыҙының ауылдың һүрәтле картаһына ошо атамаларҙы теркәп ҡуйыу тураһындағы тәҡдимен хупланы. Һәр ауыл тирәһендәге атамаларҙан китап сығарырға тигән пландары менән дә уртаҡлашты. Ҡыҫҡаһы, Учалы ағинәйҙәре был мөһим эшкә тотондо. Был бик актуаль тема һәм тәҡдимдәр башҡа райондарҙың ерһөйәрҙәре, илһөйәрҙәре, крайҙы өйрәнеүселәре ҡолағына ла инер, моғайын. Сөнки был беҙҙең райондың ғына түгел, тотош Башҡортостандың, хатта башҡорттар күпләп йәшәгән күрше өлкәләрҙең дә проблемаһы. Һәм, әлбиттә, иң тәүҙә был эшкә ағинәйҙәр тотонор тигән өмөт тә бар. Әлеге ҡорҙа ҡатнашҡан аҡһаҡалдарҙың береһе Закир Ғарипов:"Ирҙәрҙән бик булмаҫ бындай бурыстарҙы атҡарыу. Ағинәйҙәр ярҙам итһен, улар тотонһон инде был бик ваҡытлы күтәрелгән эшкә. Ә беҙ ярҙам итеп йөрөрбөҙ", - тип көлдөрҙө көлдөрөүгә. Ә шулай ҙа беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәребеҙ, аҡһаҡалдарыбыҙ менән йәнәш тороп эшләргә, киреһенсә, беҙ улар артынан эйәрергә хыялланабыҙ...

## Ал алъяпҡыстарым, гөл алъяпҡыстарым

Бөгөн беҙ алъяпҡысты аш-һыу булмәһендә ашарға яраштырғанда, һауыт-һаба йыуғанда кейелә торған әйбер тип кенә беләбеҙ. Унан һуң, сығарылыш уҡыусылары - ҡыҙҙар, йыл аҙағында, тантаналы һуңғы линейкала ап-аҡ алъяпҡыс кейеп, бер ҡанатланып йөрөп алалар. Шулай ҙа алъяпҡыс та бай ғына тарихлы бер кейем икәнен, халҡыбыҙ тормошонда мәлендә алыштырғыһыҙ булыуын иҫкә төшөрөп алдыҡ әле ошо арала.

Өйҙә "бикләнеү" осоронда онлайн аралашыуға күстек бит инде. Беҙҙең "Ағинәй" ойошмаһында ла аралашыу ошо форматта дауам итте. Март айында Көсөк-Маяҡ ағинәйҙәре ошо мәҡәлә исеме аҫтында конкурс иғлан иткәйне. Шарты буйынса, үҙең әҙерләгән алъяпҡысты кейеп, яҙма эшләп, "Бәйләнештә"ге "Учалы ағинәйҙәре" битенә һалырға тейеш ине. Шулай итеп, 22 оҫтабикә һәм алтышар кешенән торған 4 коллектив 52 алъяпҡыс тәҡдим итте. Иң тәүге булып сығыш яһаусылар Мәсҡәү унғандары булды. Һәр береһе өр-яңы алъяпҡыс быуған ағинәйҙәр матур ғына белешмә лә бирҙе: "Борон ҡатын-ҡыҙ алъяпҡысһыҙ йөрөмәне. Йәйләүҙә ҡорот ҡайнатып, ҡымыҙ бешеп мәж килгәндә алъяпҡыс алыштырғыһыҙ кейем булды. Йәш килендәр ғоманлы саҡта алды бөрмәлерәк алъяпҡыс кейеп йөрөнө. Ҡайны-ҡәйнә алдында уңайһыҙ булмаһын өсөн дә, сит-ят күҙҙән һаҡланыу өсөн дә бындай алъяпҡыс уңайлы булған. Йәш балалы әсәләр алъяпҡыс түшен иркенерәк тә, киңерәк тә итеп тегеп кейгән. Бала имеҙгәндә лә унайлы, түшкә лә йылы. Ә мин элегерәк апайым бүләк иткән алъяпҡысҡа оҡшатып, ике кеҫәле итеп тектем. Аҫҡыс-маҙар, ҡулъяулыҡ, ваҡ-төйәк һалыу өсөн кеҫәләре бик унайлы булған. Ҡунаҡ ҡаршылағанда хужабикәләге баҙлап торған биҙәкле алъяпҡыс та инеүсенең ҡаршын етешмәгәнерәк, өлгөрмәгәнерәк ерҙән аралабыраҡ тора ул", - тип, һәр алъяпҡысҡа бына шулай ҡыҫҡа, әммә тос ҡына мәғлүмәт тә һалынғайны.

"Боронғоға эйәреп" исемле номинацияла Ғәлиәхмәрҙән Рәшиҙә Ғибаҙуллина хаҡлы рәүештә еңеүсе булды. Бер ҙә иренмәй генә ауылдарындағы 91 йәшлек әбейҙән һөйләтеп тегеп алған булған ул алъяпҡысын. Алъяпҡыстың өҫкө өлөшө түште лә, арҡаны ла тотош ҡына ҡаплап, иң башы бик үк киң булмаған әберкә менән биҙәлә. Һуғыштан һуңғы ауыр осорҙа, юҡсылыҡта магазинға тауар килһә, алъяпҡыслыҡ ҡына тауар алып, те-

✓ *"Үҙ ризыҡтарыбыҙҙан яҙмайыҡ, беләктәрегеҙгә, йөрәктәрегеҙгә көстө үҙ ризыҡтарығыҙҙан ғына ала алаһығыҙ, магазин кәштәһендәге файҙаһыҙ тәм-томға алданмағыҙ", - тигән өгөт-нәсихәтен дә еткерергә онотманы.*



геп, ашҡа ла, эшкә лә кейеүҙәрен һөйләп ала әбей.

Наурыҙҙан Миннур Байгарина үҙебеҙҙең тыуған яҡты өйрәнеү музейында күргәндең күсермәһен теккән. Төҫө лә, итәк осондағы ике буй таҫмаһы ла нәҡ музейҙа ҡул тирмәне тартып ултырған ҡатын кейгән алъяпҡыс инде. Һәр саҡтағыса, Бөйҙө ағинәйҙәре бер иштән боронғоса итеп, заманында әсәйҙәре кейгән алъяпҡыстарға оҡшатып тегеп сығыш яһаны. Илсенән Роза апай ҙа был сараны алъяпҡыслы әсәһен иҫенә төшөрөүе менән әһәмиәтле булды, тип һөйләп, күңел ҡылдарын тибрәтеп ебәрҙе. Уның үҙе ижад иткән шиғыры, хәтирәләргә төшөрөп, тыңлаусыларҙың керпектәренә күҙ йәштәре лә элде.

Сигеүле алъяпҡыстар - үҙе бер бай хазина. Балбыҡтан Рәзилә Ибраһимованың элмәле сигеү һалынған күҙ яуын алырлыҡ алъяпҡысына, Финзирә Солтанованың ҡара төҫлө туҡыманан бик оҫта нағышланғанына һәр кем һоҡланды. Илтабандан Венера Йосопова апайҙың да бер төҫтән, зәңгәр мулине менән генә, бик үҙенсәлекле биҙәк һалып сиккән апаҡ алъяпҡысы зауыҡлы килеп сыҡҡан. Еңгә бүләге, ҡәйнә бүләге булған алъяпҡыстар менән бергә инде 80 йәште уҙған ҡомартҡы ла осраны. Был ҡомартҡы Мәҫкәүҙән Тәғзимә Шәкирйәнованың һандығынан булып, ошоларҙы бәйән итте: "1921 йылғы әсәһе 14 йәшендә аҡтан тегеп, түшенә, итәк осона йәшел һәм ҡыҙыл төҫлө еп менән сигеп, матур биҙәк һалған." Бындай алъяпҡыстар, әлбиттә, ҡәҙергә генә кейелгән.

Ойоштороусы булараҡ, Көсөк-Маяҡ ағинәйҙәре етәксеһе Гөлсирә Ғарипова сараны йомғаҡлап, алъяпҡыстар тарихына ла туҡталды: "Алъяпҡыс та - бик бай тарихлы кейем. Тәүге теркәлгән мәғлүмәттәр 1208 йылға ҡарай. Ул боронғо мысыр һүрәттәрендә үк күренә. Дәүләт хеҙмәтендә эшләүселәрҙең алдына бөрмәләп бәйләп ҡуйылған тире йә ҡамыш һабаҡтарынан яһалған япма тағылған. Боронғо Рәсәйҙә лә, башҡорт халҡында ла алъяпҡыс ҡатын-ҡыҙҙың эш кейеме генә түгел, ә ҡупшы кейемдәр һанына ла ингән. Башҡорт ҡатындары, ғәҙәттә, ҡара йә кер күтәрмәле туҡымаға биҙәктәр сигеп теккән. Алъяпҡыс, уңдырышлыҡ билдәһе лә булып, төрлө йолаларҙа ҡулланылған. Бәләкәс балаларҙы алъяпҡысҡа төрөп йөрөтөү яҡшыға юралған, бәхетле оҙон ғүмер теләү билдәһе һаналған. Башҡорт халҡында алъяпҡыс көнкүреш эштәрендә генә түгел, ҡайһы бер төбәктәрҙә ҡупшы кейем элементы булараҡ та танылған. Өләсәйҙәребеҙҙе, әсәйҙәребеҙҙе иҫкә төшөрһәк, улар бит алъяпҡысһыҙ йөрөмәне. Бөтмәҫ йорт эштәрендә алъяпҡыһыҙ мөмкин дә түгел инде. Күршеһенән йомошҡа алған әйберен дә, магазиндан һатып алғанын да шул алъяпҡыс итәгенә һалып алып ҡайталар ине беҙ үҫкән заманда ла әле. Беҙҙең ауылда Муса Мортазиндың йорт музейында тимерсе алъяпҡыһы, еңгә бүләге, әсәйҙәрҙең ҡомартҡылары һаҡлана..."

## Талҡан байрамы

Килмәк ауылы ағинәйҙәре район ағинәйҙәрен, шулай уҡ Белорет районы ағинәйҙәрен дә милли ризығыбыҙ - талҡанға арналған байрамға йыйҙы һәм ҡыҙҙырылған ҡурмастың тел йоторлоҡ ризыҡҡа әйләнгәнсе үткән юлын төрлө йола күренештәре менән күҙ алдына баҫтырҙы.

Заманында йылына ике тапҡыр, яҙын һәм көҙөн, ҡатын-ҡыҙ бергә йыйылып, туҡлыҡлы ла, һаулыҡ өсөн дә шифаһы баһалап бөткөһөҙ талҡан эшләп алыр булған. Бына шул йоланы атҡарған сәхнә күренешендә ҡатын-ҡыҙҙар тәүҙә талҡан эшләү өсөн әҙерләнгән бойҙайҙы сүп-сарынан таҙарттылар, елгәрҙеләр. Күмәк эш - өмә барышында балалар ҙа ҡатнашты, белмәгәнен өйрәнде. Бойҙайҙан башҡа һоло, арпа, арыш кеүек башаҡлы үҫемлектәрҙең дә талҡан эшләү өсөн яраҡлы булыуы тураһында әйтеп үтелде. Балалар әсәйҙәре менән бергә ҡыҙыу әшәк өҫтөндәге табала болғай-болғай бойҙай бөртөктәрен ҡыҙҙырҙы. Ҡыҙҙырылған ҡурмасты тәмләү үҙе бер тамаша булды балалар өсөн. Хәҙер бит ҡурмас яһау ҙа онотолған, шуның менән бергә телебеҙҙән "ҡурмас" һүҙе лә төшөп ҡалып бара.

Бына иҙәнгә балаҫ йәйелде, уның өҫтөнә ҙур ашъяулыҡ түшәлде һәм ҡул тирмәне килеп ултырҙы. Йор ғына һүҙле еңгә балаларҙы ошо тирмән тирәһенә ултыртып: "Инде тирмән тартабыҙ, кемегеҙ яҡшыраҡ әйләндерер икән тирмәнде?" - тип, күңелдәренә сәм һалды. Әлбиттә, һәр кем шәп булырға теләй. Әммә, тирмән тартыу бик еңел дә түгел икән әле. Бына ни өсөн бергәләп башҡарғандар икән ҡурмас тартыуҙы. Алмаш-тилмәш эшләгәндә эш еңел эшләнә шул. Тирмән тартҡан арала талҡандың файҙаһы, борон алыҫ юлға йә һунарға сыҡҡанда, яуға киткәндә лә уның алыштырғыһыҙ ризыҡ булыуы, хатта ир-егеттең сыҙамлылығын усына эҫе ҡурмас һалып һынауҙары тураһында ла, ел, һыу тирмәндәре булыуы хаҡында ла һөйләне еңгә. Тартылған ҡоро талҡанды киндер тоҡсайҙарҙа, туҙҙан яһалған һауыттарҙа оҙаҡ ҡына һаҡлап булыуы тураһында ла әйтергә онотманы. Йорт хужаһы тирмән эргәһендәге апһынынан (килендәшенән) бик ҡәнәғәт ине был мәлдә. Шулай булмай ни, эш араһында балаларға ла ни тиклем оҫталыҡ дәрәсе биреп өлгөрҙө бит. Унан инде ҡәйнә кеше тартылған ҡоро ондоң бер өлөшөн шәкәр, бер өлөшөн тоҙ ҡушып ыуып, майлап баҫырға күрһәтмә бирҙе. Шул арала балаларына талҡандың байрам өҫтәленең йәме, бишектуй, һырғатуй, ҡарғатуй, кәкүк сәйе ҡорҙарында борондан ҡуйыла торған ризыҡ булыуын да әйтеп үтте. "Үҙ ризыҡтарыбыҙҙан яҙмайыҡ, беләктәрегеҙгә, йөрәктәрегеҙгә көстө үҙ ризыҡтарығыҙҙан ғына ала алаһығыҙ, магазин кәштәһендәге файҙаһыҙ тәм-томға алданмағыҙ", - тигән өгөт-нәсихәтен дә еткерергә онотманы.

Балалар өсөн дә, йыйылған ағинәйҙәр өсөн дә бай мәғлүмәтле сара ойоштороп, ағинәйлек бурысын атҡарҙы килмәктәр. Талҡан - ул тере ризыҡ, тигән идея һалынған сарала ҡатын-ҡыҙҙың һомғоллоғо, сәсенең ҡуйы йылҡылдап тороуы ла, яугирҙың яраһы тиҙерәк уңалыуы ла - талҡан мөғжизәһе булыуы еткерелде йыйылыусыларға. Талҡандан бал, көнбағыш майы, ҡырылған алма ҡушып яһалған маска эшләтеүселәр ҙә булды сара һуңында. Татлы талҡандың төрлөһө ҡуйылған сәй өҫтәле артында ла йәнле аралашыу дауам итте. Юлдаш ауылынан килгән Мәрйәм Әнәс ҡыҙы килмәктәргә рәхмәтен күңелендә шундуҡ яралған шиғыр юлдары аша еткерҙе. Барыһы ла - йылы осрашыу, файҙалы сара, күргәҙмәләге ҡул эштәре сағылыш алған ине был юлдарҙа.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА.**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**



Наурыҙҙағы йыйында.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БАШҠАЛАРҘЫ ҠЫҘЫҠҺЫНДЫР

Һиндә тойғо һәм эмоция, ғорурлыҡ һәм хәстәрлектәр бар. Әммә ул башҡаларҙа ла бар. Кешеләр менән ыңғай аралашыу булһын өсөн, уларҙы ҡыҙыҡһындыр. Үҙ-үҙеңде раҫлау өсөн иҫкәрмәләр яһап йәки иҫ китерлек тарихтар һөйләп, аҡыллы булып күренергә маташырға кәрәкмәй. Бының өсөн әңгәмәсең менән эскерһеҙ аралашырға ғына кәрәк.

Шуны иҫеңдә тот: аралашыу ике яҡлы. Кемдер һөйләй, ә икенсеһе тыңлай. Кешенең иғтибарын үҙеңә йәлеп итмәйенсә, үҙеңде тыңларға мәжбүр итә алмаясаҡһың. Һине түгел, ә уларҙы ҡыҙыҡһындырған әйберҙәр тураһында һөйләмәйенсә тороп, иғтибар яулай алмаясаҡһың. Кешеләрҙе бигерәк тә нимә ҡыҙыҡһындыра һуң? Улар үҙҙәре! Улар үҙенең эштәрен һәм киләсәккә пландарын, үҙе булған урындарҙы, үҙе менән булған ваҡиғаларҙы тикшерергә теләй. Ошо турала бер ваҡытта ла иҫеңдән сығарма.

Үҙе тураһында һөйләүҙән тыш, кеше үҙ фекерен белдерергә ярата. Ҡайһы берҙә үҙе күҙ алдына ла килтермәгән әйбер тураһында һөйләһәләр, бигерәк тә ҡыҙыҡ килеп сыға. Бик һирәктәр генә тәғәйен бер мәсьәлә буйынса үҙ фекерен белдерә алмауын таный. Ғөмүмән, үҙеңде уратып алыусыларҙың фекере менән килешмәйенсә тороп, дуҫтар табып булмай.

Ҡайһы берәүҙәр башҡалар тураһында ләстит һатыуҙан йәм-ғәм таба. Һүҙҙәре бөтөнләй нигеҙһеҙ булһа ла, улар үҙ фекерен әйтеп ҡалыуҙы мотлаҡ тип тоя. Шул ваҡытта әңгәмәсеңә ҡаршы килмәй, тикшергән кешенең яҡшы сифаттарын айырып күрһәтә белергә кәрәк. Уның фекерләүенә йоғонто яһай алмаһаң да, был тактика һөйләшеүҙе ыңғайыраҡ ағымға күсерәсәк.

Шулай уҡ кешеләр эшмәкәрлектең төрлө өлкәһендә хәбәрҙар булыуҙары хаҡында һөйләргә ярата. Бында темалар сикләнмәгән, һәм һин яҡшылап тыңлап, күп нәмәгә өйрәнә алаһың.

Һуңғы сиратта, кеше һинең турала ла күберәк белергә теләй. Улар һинең ауырыуың, эшең йәки тормошҡа кире ҡарашың тураһында тыңларға теләмәй. Шундай саҡта үҙ һүҙеңә ҡолаҡ һал әле - күберәк үҙ исемеңдән һөйләйһеңме икән? Улайһа, "мин"де "һеҙ" һәм "һин"гә алмаштыра башла. Әңгәмәсеңдең һинең эштәрең тураһында һораша башлауын көт, шул саҡта ғына ул һине тыңларға әҙер, тигәнде аңлата.

Үҙеңде насар тойғанда, зарланмаҫҡа тырыш. Зарланыу ғәҙәтеңә инеп китһә, был һинең үҙеңә иғтибар йәлеп итергә маташыуың була. Йыш зарланып, һин кешеләр өсөн ауырыу символына әйләнәһең, һәм улар һинән ҡаса башлаясаҡ.

Киреһенсә, рухландырғыс әйберҙәр тураһында һөйләшегеҙ. Шуны бел: һәр кем сәләмәт, ыңғай ҡарашлы кешеләр менән аралашырға теләй. Кәйефең ҡырылып торһа ла, кешегә күрһәтмә. Башҡаларҙың кәйефен күтәреп, үҙеңдең хәлеңде лә яҡшыртасаҡһың бит.

Ыңғай аралашыу концепцияһы шулай уҡ кеше серен һаҡлай белеүҙе лә үҙ эсенә индерә. Һәр һүҙеңде урынына ҡарап, уйлап һөйлә. Ышаныслы булыу - ул үҙе бер һәләт.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 24 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Это не навсегда". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Плохой хороший человек". К 80-летию Олега Даля. [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Одиннадцать+". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**5.00 Историческая среда. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Все ходы записаны". К 70-летию Анатолия Карпова. [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мальчики + девочки". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Анатомия сердца". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Две остановки сердца". К 80-летию Николая Олялина. [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Созвездие муртазинцев". Гала-концерт в честь юбилея знаменитого педагога Миляуши Муртазиной. [12+]**
**1.15 Х/ф "Отель "Эдельвейс". [12+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 28 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.05 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.55 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
23.15 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Изабель Юппер: Откровенно о личном". [16+]
1.10 Х/ф "Давай займемся любовью". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.30 Д/ф "Этюд с натуры". [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 3.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Д/ф "Последняя высота". [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "В тумане". [12+]**
**2.15 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 29 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.15 Д/ф Премьера. "Плохой хороший человек". К 80-летию Олега Даля. [12+]
14.15 Х/ф "Женя, Женечка и "Катюша". [0+]
15.45 Сегодня вечером. [16+]
18.05 Чемпионат мира по хоккею-2021. Сборная России - сборная Швейцарии. Прямой эфир из Латвии.
20.40 Время.
21.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.10 Х/ф Премьера. "Крестная мама". [16+]
1.00 Д/ф "Улыбка для миллионов". Ко дню рождения Арины Шараповой. [12+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Автограф. [12+]**
**12.00 Үткән гүмер. [12+]**
**12.30 Колесо времени. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Юбилейный концерт народного артиста РБ Фарваза Урманшина. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "О, счастливчик!" [16+]**
**2.15 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 30 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Медсестра". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "Доктора против интернета". [12+]
15.00 Концерт Кристины Орбакайте. [12+]
16.30 Д/ф Премьера. "Кристина Орбакайте. Главная роль". [12+]
17.40 Победитель. [12+]
19.15 "Dance Революция". Новый сезон. [12+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Т/с Премьера. "Налет-2". [16+]
0.05 Д/с "В поисках Дон Кихота". [18+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 Репортаж с вручения премии Ядгара Баширова в с.Мурапталово Куюргазинского района. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Кумысный путь". [6+]**
**15.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 80-летию образования Союза композиторов РБ посвящается... Концерт НОНИ. [12+]**
**19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.15 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**0.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "Белые росы. Возвращение". [12+]**
**2.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 май "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**28 май "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**29 май "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+
**30 май "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бәпәй-спектакль. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**29 май "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 14.00 0+
**"Етем тәлкө"** (О. Штыряева). 16.00 0+
**30 май "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 май "Донъя халыҡтары йырҙары"** концерт. 6+
**82-се иждад миҙгелен ябыуға "Ҙур концерт"**. 6+
**27 май "Күңелдә яҙ!"** татар композиторы Р. Яхин иждадына артнаған концерт. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һиҗри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (12) дүшәмбе | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 25 (13) шишәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (14) шаршамбы | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 27 (15) кесе йома | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 28 (16) йома | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:04 | 21:34 | 23:04 |
| 29 (17) шәмбе | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |
| 30 (18) йәкшәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер кисәк кенә лә ер юҡ.*
*(А. Грюн).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЙОМАҠ ӘЙТӘМ, ЙОМАҠ ӘЙТӘМ, УНЫ СИСКӘН СОС БУЛЫР...




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**20-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡоҙа. Ҡоҙағый. Ҡыҙ. Бажа. Балдыҙ. Ҡәйнә. Инәй. Апһын. Атай. Набат. Ул. Ҡеүә. Ағай. Еңгә. Орск. Әҙ. Раа. Көҙ. Ығыш. Ҡайны. Әсә. Еҙнә.

**Вертикаль буйынса:** Ҡайнаға. Ҡәйенбикә. Әсетке. Ҡаҙ. Өләсәй. Бриг. Ҡоҙаса. Әр. Уҡ. Ала. Ат. Алйот. Апай. Арыш. Наян. Борай. Йоласы. Ҡусты. Дары. Ҙур. Ҡәйнеш.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ҺАРЫ УМЫРЗАЯ



**Һары умырзаяны (адонис, йәки горицвет весенний) табиптар йөрәк үләне тип атай, сөнки ул күберәген ҡан әйләнеше хроник ауырыуының еңелсә формалары, йөрәк неврозы, вегетатив нервы системаһы функцияһы боҙолоуы, йөрәк эшмәкәрлеген һүлпәнәйткән йоғошло ауырыуҙар кеүек төрлө йөрәк сирҙәрен дауалағанда ҡулланыла.**

Йөрәк сирҙәрен дауалау өсөн ысулдар бихисап, әммә уртаҡ ысул былай әҙерләнә: төнәтмә өсөн 200 мл ҡайнар һыуға 5-6 грамдан да артыҡ булмаған һары умырзая үләне алына һәм уны көнөнә 3 тапҡыр 1-әр, бик һирәк осраҡта 2-шәр ҡалаҡ эсергә кәрәк. Һары умырзая үләне сәскә атҡан мәлендә әҙерләнә: тупраҡтан 5-10 см өҫтәрәк өлөшөн ҡайсы менән ҡырҡып алырға, тамырын зыянларға ярамай. Йыйылған үләнде күләгәлә, ҡоро урында йыш-йыш әйләндереп киптерергә кәрәк. Кипкән үләнде ҡағыҙ ҡапта йәки быяла һауытта һаҡлағанда шифаһы оҙаҡҡа етә.

Һары умырзаяның күптәргә билдәһеҙ үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, ул наркомандарҙың кокаин йоғонтоһонда тәне тартышҡанда яҡшы дауа. Үләндең төнәтмәһен эсереү үлемдән ҡотҡара. Был дауа шулай уҡ камфора һәм пикротоксин матдәләренән килгән тартышыуҙы иҫкәртә. Ғөмүмән, тән тартышыуы йәки көҙән йыйырыуының сәбәптәре төрлө булырға мөмкин һәм бына бер ябай дауаланыу ысулы.

**Тартышыу.** 1 ҡалаҡ яңы киптерелгән һары умырзая үләненә 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға һәм ҡараңғы урында 2 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Төнәтмәне көн һайын яңынан әҙерләргә кәрәк, сөнки ул тиҙ генә әсей һәм шифаһын юғалта.

**Тын ҡыҫылыу (ҡаты йүтәлдән).** 1 балғалаҡ үләнгә ярты стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Хәл яҡшырғансы дауаланырға.

**Миозит (скелет мускулдарының елһенеүе).** 7 грамм киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Мускулдар ауыртҡанда (быуындар һыҙлағанда ла ярай), көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Иҫкәрмә:** күренеүенсә, һары умырзаяның тәьҫире бик көслө булғанлыҡтан, дауаланғанда бик аҙ миҡдарҙа ҡулланыла. Уның ярҙамында тиҙ арала һауығырға иҫәп тоторға ярамай. Ҡан баҫымының күтәрелеүенән (гипертония) яфаланған кешеләргә һары умырзаяның дауаһы килешмәй. Унан әҙерләнгән төнәтмәләр бала төшөүгә килтерә, шуға йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға ҡәтғи тыйыла. Шулай уҡ йөрәктең атриовентрикуляр блокадаһы, брадикардия, ҡандың ойошоусанлығы юғары булғанда был үлән менән дауаланырға ярамай.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ҠОМАҠ, ТАЛПАН...



**Башҡортостанда үткән аҙнала ғына сысҡан биҙгәге менән ауырыуҙың дүрт осрағы теркәлгән, тип хәбәр итте республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәктең Роспотребнадзор идаралығы начальнигы Анна Казак.**

"Быйыл кимереүселәр һаны артыуын күҙәтәбеҙ һәм быға барыһының да иғтибарын йүнәлтәбеҙ. Беҙ граждандарҙы һәм эшҡыуарҙарҙы йыл да кимереүселәргә ҡаршы комплекслы саралар күрергә кәрәк булыуы хаҡында иҫкәртеп торабыҙ", - тип билдәләне баш санитар табип.

Кимереүселәрҙән янаған хәүефтән тыш, республикала көндән-көн талпан ҡаҙалыуға бәйле мөрәжәғәттәр һаны арта. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, Башҡортостандың медицина учреждениеларына 1015 кеше килгән. "Үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә талпандарҙың 0,5 проценты вируслы талпан энцефалиты, ә 18,8 проценты талпан боррелиозын йөрөтә. Тимәк, күпселеге кешелә Лайм ауырыуын барлыҡҡа килтереүсе боррелиялар сығанағы булып тора", - тине Анна Казак.

Белгес шулай уҡ талпан вируслы энцефалит һәм Лайм ауырыуын йоҡтороусылар әлегә республикала теркәлмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Башҡортостанда талпандарҙан һаҡланыу маҡсатында барлығы 1700 гектар ер эшкәртелгән, Өфөлә - 800 гектар тирәһе.

**Әйткәндәй...** Сысҡан биҙгәгенә ҡаршы вакцинация юҡ, шуға күрә унан хәүефһеҙлек сараларын күреп кенә һаҡланып була. Ауырыу тән температураһы юғары булыуы менән билдәләнә, ул 40 градусҡа тиклем барып етергә мөмкин. Баш ауырта, ҡалтырата, күңел болғана, дөйөм хәлһеҙлек тояһың. Бит, елкә тирәһендә тире ҡыҙарып сығырға мөмкин. Был сиргә күреү һәләтенең насарайыуы, аңдың буталыуы ла хас. Ауырыған кешене беренсе билдәләре күренеү менән мотлаҡ дауаханаға урынлаштырырға кәрәк. Үҙ аллы дауаланыу ҡәтғи рәүештә тыйыла.

Талпан вируслы энцефалиты үҙен 2-3 көндән һуң ғына һиҙҙерә. Зарарланған кешенең хәле ҡапыл насарая, тәүге билдәләре киҙеүҙе хәтерләтә: кеше өшөп ҡалтырана, мускулдары һыҙлай, температураһы юғары күтәрелә, тәне ҡыҙара. Артабан энцефалиттың төрөнә ҡарап, ул еңелсә үтергә лә, арҡа һәм баш мейеһенә зыян килтерергә лә мөмкин. Талпандан боррелиоз йоҡтороуҙың да эҙемтәләре хәүефле. Был осраҡта ауырыу үҙен шунда уҡ һиҙҙермәй, организмда таралып, баш мейеһенә күскәндән һуң тире, быуындар, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервы системаһына зыян килтерә.

АФАРИН!

# КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ...

## беҙҙең майҙан булһын "Арт-Ҡоролтай"



(Башы 1-се биттә).

Быйылғы Арт-Ҡоролтай июлдә үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһына бағышланды. Был тарихи ваҡиғаға 50 көн ҡала. Ошо сәғәт һуғыуын сағылдырған арт-объект асылып, был иҫтәлекле мәлде Бөтә донъя фольклориадаһының илсеһе, тигән юғары дәрәжәгә лайыҡ булған билдәле йырсы, рус халыҡ ижадын үҫтереүгә бөтә көсөн һалған һәм был йәһәттән күптәргә өлгө булған Надежда Бабкина етәкселегендәге концерт сәләмләне.

Форсайт-сессияларҙың береһе - Башҡортостан Республикаһының Халыҡ ижады үҙәге әҙерләгәне "Төбәктәр тәжрибәһе. Матди булмаған мираҫты һаҡлау һәм үҫтереү" тип аталды. Үҙәктең генераль директоры Артур Әлибәков йыйынға үҙенең бик күп фекерҙәштәрен һәм коллегаларын саҡырғайны. В.Д.Поленов исемендәге Рәсәй Халыҡ ижады йорто етәксеһе Тамара Пуртова "Арт-Ҡоролтай" эшенә уңыштар юраны һәм: "Бары тик һәр бер халыҡты һәм уның мәҙәниәтен һаҡлап ҡына бөтә Рәсәйҙең йөҙөн һәм рухын ҡотҡарып буласаҡ", - тип бик хаҡлы билдәләне.

"Арт-Ҡоролтай" Бөтә донъя Фольклориадаһының ойоштороу комитеты менән дә тығыҙ бәйләнештә булыуын аңғартты. Испаниянан килгән Филипп Боссан әфәнде - был ваҡ мәшәҡәтле оло форумды етәкләүсе. Арымай-талмай һәр йыл һайын илдәр һәм ҡитғалар буйлап мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыусы үҙәктәрҙе тоташтырып йөрөй ул. Боссан әфәнде Фольклориада йыйынына килергә тейешле илленән ашыу илдең делегациялары, уларҙың әҙерлеге - һәммәһен дә бәйнә-бәйнә һөйөнсөләп, таныштырып үтте.

Артур Әлибәковтың телмәре иһә халыҡ ижады оҫталары сығышы менән аралаш барҙы. Әбйәлил районы Үтәгән ауылынан оло сәсәниәбеҙ Хәнифә Әүбәкирова сығышы уның боронғоса "тәритләү", "туҡырлап бейеү", "һамаҡлап әйтеү" кеүек жанрҙар ҡатнашмаһынан торған уникаль фольклор күренеше булып яңғыраны. Уның саялығына, оҫталығына, үҙ-үҙен һис аямай, һаман да төҫ ташламай, тауыш һалмай халыҡ ижадын пропагандалауға арнауына һоҡланып бөткөһөҙ.

Халыҡ ижады үҙәге директорының сығышын "Урал батыр" эпосынан өҙөк башҡарыусы Илһам Байбулдин күтәреп ебәрҙе. Илһам - Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестиваленең гран-при бүләген яулап, бөтә ил алдында аҡ кейеҙгә баҫҡан халыҡ сәсәне. Оло исемдәр яулаған уникаль башҡарыусы, ҡурайсы, өҙләүсе, думбырасы, йыраусы. Уның ҡунаҡтар алдында күкрәккә һалып өҙләп, иртәк-эпос моңон сығарыуына бик рәхмәтле булынды.

Рәйес Низаметдинов та арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе. Ҡурайсы, бейеүсе һәм бейеү һалыусы, ҡумыҙсы егетебеҙ әлеге көндә башҡорт милли кейемдәре буйынса ла бик ентекле эш алып бара. Ул ҡатнашыусылар иғтибарына үҙе теккән баш кейемдәрен тәҡдим итте, шунан башҡорт ҡурайын үләндән яһап, уйнап күрһәтте, ағас шпондан эшләнгән өлгөләр хаҡында бәйән итте. Артабан форум ҡунаҡтарына һүҙ бирелде. Силәбе өлкә халыҡ ижады үҙәге етәксеһе Оксана Громова һүҙ алды. Был яҡтарҙа бүленеп ҡалған башҡорт ерҙәрендә йәшәгән ырыуҙарҙың, милләттәштәребеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙә тотҡан урыны ни хәтле мөһим, тәрән йөкмәткеле һәм кисекмәҫтән һаҡлауға-яҡлауға мохтаж икәнен беләбеҙ. Шуға күрә был ҡунаҡтың сығышында беҙҙең милләттәштәр, ҡан ҡәрҙәштәрҙең быуаттар буйы һаҡлаған мираҫы, уларҙы өйрәнеү һәм үҫтереү мәсьәләләре тураһында ишетергә теләп, бөтә зал тын ҡалды... Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күрше төбәктәрҙән килгән етәкселәр үҙҙәренең тарихи аҫаба ерҙәрендә йәшәп ятыусы халҡыбыҙҙың һаман да үҙ милли төҫөн, ауыҙ-тел ижады, эпик мираҫы, кейем һәм көнкүреш ҡаҙаныштарын һаҡлап килеүе хаҡында бер кәлимә лә һүҙ әйтмәне. Ә бит иң тәүҙә ошо хаҡта ишетергә теләк бар ине. Әммә... Беҙҙең башҡорт мәҙәни мираҫы бары тик беҙҙең үҙебеҙгә генә кәрәк, ә тарихи ватаныбыҙҙың бөтә байлығына хужа булған төбәк етәкселәре бындай мираҫҡа бөтөнләй күҙ йома икәне тағы бер тапҡыр раҫланды.

Ҡыҫҡаһы, "Арт-Ҡоролтай" эше башланды, ваҡыт сәғәте телдәре Фольклориада көндәренә яҡыная. Ләкин форумдың эше киләсәктә бик күп буласаҡ әле. Уның уй-ниәттәре, эш пландары бик тәрән, һәр беребеҙҙең тормошона, йәшәү принциптарына, граждандыҡ бурыстарына ла барып тоташа. Ҡағыҙҙа һәм хыялда ғына ҡалмаһын "Арт-Ҡоролтай". Ул беҙҙеке һәм беҙҙең яңы яҡты юл, эшлекле, рухлы, булдыҡлы майҙан булып торһон. Алдағы көндә бөтә Башҡортостан һәм Рәсәй халҡын яңы мәҙәни асыштар, төплө һәм файҙалы ҡарарҙар, ентекле эш уңыштары менән ҡыуандырырға яҙһын.

**Сәрүәр СУРИНА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МАТУРЛЫҠТА ЯРЫШ

**Өфөлә IX "Мисс Республика - 2020/2021" Төбәк матурлыҡ конкурсы финалы уҙҙы. Конкурста Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән 13 ҡыҙ ҡатнашты.**





Һылыуҡайҙар ике бейеү күрһәтте, киске күлдәктәр өлгөһөн демонстрацияланы, ике интеллектуаль турҙа һынау үтте. Шулай уҡ конкурс барышында "Мисс Талант", "Мисс спорт" һәм "Мисс интеллект" этаптары ла ойошторолдо. Быйыл ике еңеүсе һайланды (2020 йылда пандемия арҡаһында конкурс үткәрелмәгәйне). "Мисс Республика-2021" - Илүзә Иҫәндәүләтова. Ул Сибайҙа тыуған, 20 йәштә, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында уҡый. "Мисс Республика-2020" - Өфөнән 22 йәшлек Альбина Шәйхелисламова, Башҡорт дәүләт медицина университетында белем ала, ковид-госпиталдә эшләй. Йәйгеһен ҡыҙҙар халыҡ-ара һәм ил кимәлендәге гүзәллек конкурстарында Башҡортостан исеменән сығыш яһаясаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫҒА ӘЙТҺӘҢ - ҺЕҢДЕРЕР,

## яманға әйтһәң - бөлдөрөр

Мин ғәйбәттәргә ҡаршы түгелмен. Ғәйбәт кешегә ҡыҙыҡһыныу уята.

**(Оливер Хассенкамп).**

Һине өндәшмәгәндә аңламаған кеше һөйләшкәндә аңлармы икән?

**(Эльберт Хаббард).**

Һуғышта ғына түгел, тыныс тормошта ла еңеү яулай кеше, тик ниңәлер был еңеүҙәргә һәйкәлдәр ҡуйылмай.

**(Фрэнк Хаббард).**

Ни өсөн кешеләр эштән түгел, ә борсолоуҙарҙан үлә? Сөнки кеше күп эшләмәй, ә күп борсола.

**(Роберт Фрост).**

Проблеманан ҡотолоуҙың иң яҡшы ысулы - уны хәл итеү.

**(Брендан Франсис).**

Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер киҫәк кенә лә ер юҡ.

**(А. Грюн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким урамда бер фәҡирҙе осратҡан да, уның ямаулы кейеменә, табаны айырылып сыҡҡан аяҡ кейеменә ҡарап, уны йәлләп, шулай тип өндәшкән:**

**- Әй, фәҡир, һиңә бик ныҡ ауырҙыр инде был донъяла йәшәүе...**

**- Эйе, мин ярлымын, ләкин был мин ауыр йәшәйем тигәнде аңлатмай әле, - тигән фәҡир кеше. - Ауыр йәшәү - ул барыр юлыңды, ундағы уңайлыҡтарҙы, мөмкинлектәрҙе, көс-ҡеүәтте белеп тә, шул юлдан бармау ул. Ямаулы кейем, табаны аҡтарылған аяҡ кейеме - ул ауыр йәшәү түгел, ул ярлы йәшәү, ул уңайһыҙ ваҡытта тыуыу. Ҡарағыҙ, үҙҙәренең урманында саҡта маймылдар ағастан-ағасҡа һикерә, дошманынан ҡаса, үҙенә ашар ризыҡ таба ала. Әгәр ҙә ниндәйҙер асыҡ яланға йә ҡыуаҡлыҡҡа барып эләкһә, улар үҙҙәрен ышанысһыҙ тота, һикереп ҡаса, ырғый ҙа алмай. Сөнки улар ғәҙәти булмаған мөхиткә барып эләгә, ә бит бынан ғына үҙгәреп китмәйҙәр, шундай уҡ өлгөр һәм көслө булып ҡалалар, ләкин үҙҙәренең мөхитендә булмағас, көстәрен һәм нимәгә һәләтле булыуҙарын күрһәтә алмайҙар. Нисек кенә булмаһын, намыҫлы кешегә насар хаким һәм уның мут чиновниктары янында ярлы булмайынса сара юҡ. Ләкин ярлы йәшәү ауыр йәшәү түгел..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21021

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 331/05